ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Киске Өфө

27-2 август - сентябрь (урағай - һарысай)

2022

№34 (1024)

kiskeufa.ru • 2002 йылдан башлап сыға • һатыуҙа хаҡы ирекле

## БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:


### Санкциямы, әллә терроризммы?



2-3

### Фатир алғанда...

быңдай хәлдәр ҙә булғылай



6

### Мәғлүмәттәр бик күп,

уларҙы тарих итеп яҙыусыларға мохтажлыҡ ҙур



7

### Театр донъяһы - күңел дауаһы



11


@KISKEUFA

Беҙҙең Телеграм каналға рәхим итегеҙ!

смартфон камераһын төбә

***Иғтибар! Мөхтәрәм уҡыусыларыбыҙ, 31 августа тиклем 2023 йылдың беренсе яртыһы өсөн ПР905 индекслы "Киске Өфө" гәзитенә арзаныраҡҡа - 718 һум 98 тингә яҙылып ҡалығыҙ. 1 сентябрҙән иһә "Киске Өфө"гә яҙылыу хаҡы 798 һум 60 тин буласаҡ. Өфө халҡы "Өфөматбуғат" киоскыларында - 600 һумға, коллектив менән редакцияның үҙендә (кәмендә 5 дана) 372-шәр һумға яҙыла ала. Бергә булайыҡ!***

***МӨХӘРРИРИӘТ.***

## ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

**Быйыл үҫмәгән үлән, уңмаған емеш ҡалманы. Боланут эшкәртеп, башҡа үләндәр йыйып, тәмле сәй әҙерләргә лә тамам оҫтарҙыҡ, ул хатта махсус етештерелеп, һатыуға ла сығарылды. Тағы ниҙәрҙе үҙебеҙ үҫтереп, өҫтәмә килем алырға, аҡса эшләргә булыр ине?**

***Сәлим ХАФИЗОВ, Ишембай районы Маҡар урман хужалығы директоры:*** Эйе, боланут сәйен етештереүгә лә байтаҡ булды инде, 2014-2015 йылдарҙа уҡ башлап ебәргәйнек. Оҙон-оҙаҡ уйлап, хәбәр һөйләп тә торманыҡ, тоттоҡ та башланыҡ - тәүәккәллек кәрәктер, тием барыбер ниндәй эшкә тотонғанда ла. Был эш бөгөн дә дауам итә. Халыҡ бик оҡшатты яңы продукцияны, хатта үҙҙәре килеп һатып ала башланылар. Хуш еҫле тәмле сәйебеҙ Өфөләге Ҡунаҡһарай, Коммунистик урамындағы фермер магазиндарында, Рощинский совхозының сауҙа селтәре аша һатыла. Яңыраҡ был сәй хаҡында ил Президенты Владимир Путинға ла билдәле булды хатта. 20 июлдә булып үткән яңы идеялар форумында Череповец ҡалаһынан боланут сәйе етештереүсе бер эшҡыуар сәйҙе ситтән һатып алғансы, ошо болануттан үҙебеҙ етештереп, йөҙҙәрсә миллиард йыллыҡ килем алырға мөмкин булыуы хаҡында һөйләне һәм Путин был үҫемлекте ауыл хужалығы культуралары исемлегенә индереп, Ауыл хужалығы министрлығына шифалы һәм экологик таҙа боланут сәйен етештереүҙә ярҙам күрһәтеү бурысын йөкмәтергә һүҙ бирҙе.

Дөрөҫ, Рәсәйҙең күп төбәктәрендә, шул иҫәптән беҙҙә лә, әйтеп китеүемсә, боланут сәйе уға төрлө шифалы үләндәр ҡушып, күптән инде етештерелеп килә, тик улар урындағы ихтыяждан ары китмәй, сөнки шәхси эшҡыуарҙар тарафынан бәләкәй предприятиеларҙа сикле күләмдә етештерелә. Ә Хлынов әйтмешләй, бөтөн илде сәй менән тәьмин итеү өсөн боланутты плантацияларҙа үҫтереп, сәнәғәт етештереүе линияһын яйға һалыу кәрәк. Был оҙайлы һәм ҡатмарлы эш, бик күп аҡса талап итә, шунлыҡтан, беҙ әҙер сәйҙе күтәп ултырмаясаҡбыҙ, әлбиттә, үҙебеҙҙең юлға һалынған эшебеҙҙе дауам итәсәкбеҙ, сөнки сифатлы һәм арзан сәй беҙгә бөгөн кәрәк.

Был сит ил продукцияһын үҙебеҙҙеке менән алмаштырыуҙа мөһим бер аҙым да ул. Бөгөн магазиндарҙағы сәйҙәрҙең хаҡын күрәһегеҙҙер: сит илдәрҙән килтерелгән, сифаты, тәме менән бер ҙә һоҡланырлыҡ булмаған 100 грамлыҡ сәйҙең ҡабы 300-400 тәңкәгә барып баҫты бит! Ә үҙебеҙ етештергән боланут сәйе тәмле һәм арзан ғына түгел, шифалы ла! Составында A, B1 - B9, C, PP витаминдарынан башҡа, фосфор, калий, кальций, цинк, магний, селен, тимер һәм башҡа бик күп макро- һәм микроэлементтар бар. Боланут сәйе юғары ҡан баҫымын төшөрә, нервыларҙы тынысландыра, йоҡоһоҙлоҡтан дауа, организмдан артыҡ тоҙҙарҙы сығара, ашҡаҙан-эсәк юлдарын көйләй, баш ауыртыуын баҫа, ҡан тамырҙарын нығыта һәм башҡалар - уның файҙаһы хаҡында тиҙ генә һөйләп тә сығырлыҡ түгел. Ата-бабаларыбыҙ мәтрүшкә сәйе менән бер рәттән, боланутҡа ҡарағат, ҡурай еләге япраҡтары, әлморон емеше һәм башҡа шифалы үләндәр ҡушып, юҡҡа ғына яратып эсмәгәндер, күрәһең.

*БАШ ҠАЛАМ*

# САЛАУАТ МАЙҘАНЫН...

## тәртипкә килтерәһе бар



**Өфөлә йәшәүемә биш кенә йыл. Ләкин ошо бәләкәй генә арауыҡ эсендә лә баш ҡала шул тиклем үҙгәрҙе, үҫте. Өфө тураһындағы фекерҙәремде яҙып үткем килә.**

Өфөлә төрлө баҙарҙар күп, әлбиттә, ләкин миңә нәҡ шәхси хужалыҡтарҙың, фермерҙарҙың үҙ уңыштарын һатҡан ауыл хужалығы баҙарҙары ифрат оҡшай. Мәҫәлән, август буйы Якутов исемендәге паркта бал йәрминкәләре ойошторолдо - һатыусы ла ҡәнәғәт, һатып алыусы ла алыҫҡа бармай ғына үҙенә ҡышҡылыҡҡа тәмле лә, файҙалы ла бал алып ҡыуана.

**(Дауамы 2-се биттә).**

## ҺАЙ-ҺАЙ-ҺАЙ!

# УН ЙӘШЛЕК ҺЫЛЫУҠАЙ...

## Башҡортостанды, башҡортлоҡто данлай



**"Ҡыҙыл төлкө - ер күрке, матур егет - ил күрке, матур ҡыҙҙар - өй күрке" тигәндәр борон беҙҙең ата-бабаларыбыҙ. Бөгөн шундай аҫыл егет-ҡыҙҙарыбыҙ бихисап, тип беләбеҙ. Шөкөр, йәштәрҙең төрлө өлкәлә уңыштарына шаһит булып торабыҙ. Өйөбөҙ Башҡортостандың күрке булырҙай һылыу ҡыҙҙарыбыҙ ҙа етерлек, шуларҙың береһе - күптән түгел Мәскәүҙә үткән "Russian Beauty 2022" матурлыҡ, мода һәм талант фестивале сиктәрендәге "Юная Мисс Вселенная" конкурсының Гран-приһын яулаған Регина ХУЖИНА. Ун йәшлек һылыуҡай һәм уның әсәһе Айгөл Тәфтизән ҡыҙы менән матурлыҡ төшөнсәһенең асылы, юғары мода донъяһы, үҫмер ҡыҙҙарҙың тәрбиәһе тураһында әңгәмә ҡорҙоҡ.**

**(Дауамы 8-9-сы биттәрҙә).**

12+

✓ *Конгресс-холл алдындағы майҙансыҡты ла шау һатыу нөктәһенә әйләндерҙеләр. Фонтандың бер яғынан бөтөнләй үтеп булмай - ул бәләкәй машиналар, ул уйын аттракциондары, шәкәрле мамыҡ, туңдырма һатыу һәм башҡалары.*



*БАШ ҠАЛАМ*

# САЛАУАТ МАЙҘАНЫН... тәртипкә килтерәһе бар

**(Башы 1-се биттә).**

Шулай уҡ республика Башлығының урамда үҙенең баҡса уңышы менән һатыу итеүселәргә теймәскә тиғән ҡарарын бик хуплайым. Мәҫәлән, элек күршем үҙенең баҡсаһында үҫтергән сәскәләрен һата алмай ыҙалай ине, сөнки бөтә ерҙән дә ҡыуҙылар, һатырға рөхсәт итмәнеләр, ә хәҙер иркенләп ултырып матур сәскәләрен һатып ҡайта. Оло кеше өсөн әҙме-күпме килем дә, өйөндә яңғыҙ ултырып арыған инәйгә кеше араһына сығып, аралашып, ваҡыт үткәреү әмәле лә.

Ләкин ошондай баҙарҙарҙы әлеге лә баяғы алыпһатарҙар "баҫып" ала башлауы күңелде ҡыра. Улар бер ҙә үҙҙәренең көсөн түгеп үҫтергән баҡса емешен йәки ҡул эшен һатмай, ә ҡайҙандыр осоҡҙа алған ойоҡбаштарын, күлдәк-кофта, плед һәм башҡа әйберҙәрен ҙур өҫтәлгә ҡуйып, ирәйеп һатып ултыра. Һатыһындар, һәр кем ҡулынан килгәнсә аҡса эшләй, ләкин улар әлеге лә баяғы сәскә бәйләме йәки бер биҙрә бәрәңге, ике килограмм ҡыярын һатып ултырыусыларҙы "баҫмаһын" ине.

Ҡалалағы фонтандарҙы бик яратам. Уларҙың ниндәй генә төрҙәре юҡ! Барыһы ла матур. Мәҫәлән, Ҡала мәҙәниәт йорто янындағы "Бейеүсе торналар" фонтаны янында тере музыка кистәре үтә, иҫ киткес күркәм сара. Төрлө тематикалы был концерттарға ҡаланың төрлө районынан йыр-моң яратыусылар махсус килә. Әллә күпме ваҡыт эшләмәй торған фонтандың бөгөнгө көндә ошондай матур мәҙәни үҙәккә әйләнә барыуына ҡыуанмай булмай.

Күптән түгел генә "Кашҡаҙан" ял паркында ла матур фонтан астылар, ғөмүмән, паркты бик матурланылар. Ләкин бөгөнгө көндә күңелде ҡырған әйберҙәргә иғтибар итмәйенсә мөмкин түгел. Мәҫәлән, кисен төрлө уйынсыҡ, ҡыуыҡса (воздушный шар) һатып ултырыусылар велосипед өсөн махсус эшләнгән юлды биләп алып, шунда үҙҙәренең сауҙа эштәрен башҡара. Был, берҙән, велосипедта йөрөүселәр өсөн дә мәшәҡәт тыуҙыра, икенсенән, әлеге әйберҙәрҙе һатыусылар өсөн хәүефле, өҫтәренә барып менмәҫтәр тимә ике тәгәрмәс хужалары. Шулай уҡ ошо юлда ни өсөндөр бәҙрәфтәр ҙә ҡуйыла. Улар, һис шикһеҙ, кәрәк, ләкин ни өсөн нәҡ халыҡ күп йөрөгән ерҙә, парктың ҡап уртаһында йәмһеҙ булып ултыралар? Мәҫәлән, Ҡала советы майҙаны янында улар бик бөхтә итеп эшләнгән. Ошондай ваҡ, әммә мөһим күренештәр парктағы тәьҫораттарҙы юҡҡа сығара.

Шулай уҡ Конгресс-холл алдындағы майҙансыҡты ла шау һатыу нөктәһенә әйләндерҙеләр. Фонтандың бер яғынан бөтөнләй үтеп булмай - ул бәләкәй машиналар, ул уйын аттракциондары, шәкәрле мамыҡ, туңдырма һатыу һәм башҡалары. Аттарға ҡуш итеп хәҙер хатта паровоз да йөрөй башланы. Аңлайым, унда балалары менән килгәндәр өсөн был аттракциондар, бәлки, кәрәктер, ләкин туристар һәм ял итергә сыҡҡан ҡала халҡы өсөн мәшәҡәт тыуҙырмаймы икән?

Шулай уҡ Салауат Юлаев майҙанындағы фонтанға туҡталып, шуны әйткем килә. Фонтан асылған ғына ваҡытында ул төҫлө сағыу уттар менән балҡып һәм милли моң яңғырай ине. Ҡайҙа ул хәҙер? Ни өсөн тымып ҡалған?

**Әлиә НӘҘЕРШИНА.**

*БЫНАҒАЙЫШ!*

# САНКЦИЯМЫ, ӘЛЛӘ ТЕРРОРИЗММЫ?

**Егерме беренсе быуатты сәйәсмәндәр терроризм эпидемияһы быуаты тип бик дөрөҫ билдәләмә бирә, сөнки был хәүефле күренеш тарихта һис ҡасан булмағанса әүҙемләшә һәм төрләнә бара. Әммә уның төп асылы - көс ҡулланыу, ҡурҡытыу юлы менән теге йәки был йәмғиәттәге тотороҡлолоҡто ҡаҡшатыу һәм ваҡиғалар ағышын үҙ мәнфәғәттәренә бойһондорорға маташыу, үҙҙәре ҡылған енәйәткә ҡарата мөмкин тиклем күберәк һәм киңерәк даирәләр иғтибарын йәлеп итеү, ҡанһыҙлыҡ, маҡсаттарына өлгәшеү юлында күпме ҡорбан килтереләсәген дә уйлап тормаҫтан, телһә ниндәй сараларҙан да баш тартмау кеүек кешелеккә ҡаршы йөкмәткеһе һәм алымдары үҙгәрешһеҙ ҡала.**

Әйе, ин ҙур хәүефе уның бер ниндәй гәйепһеҙ кешелеккә ҡаршы йүнәлтелгән булыуы, ә бит шул уҡ ваҡытта терроризм, айырыуса уны ойоштороусы төркөм, ойошма, ә бәлки, ниндәйҙер ил асылда теге йәки был дәүләткә, уның власть башлыҡтарына ҡаршы дәғүәләрен белдерә һәм шул нигеҙҙә ниндәйҙер сәйәси мәсьәләләрен хәл итергә маташа. Терроризм кеүек енәйәттең кешелекһеҙлеге тап шунда ла: уның бер ниндәй гәйепһеҙ халыҡҡа - потенциаль ҡорбандарға ҡаршы йүнәлтелгән булыуы. Бына шуның өсөн дә был енәйәти акттың тәьҫир көсө ни тиклем кинерәк масштабта ҡылынып, ни тиклем шаңҡытҡыс яңғыраш алһа, ул шул тиклем отошлораҡ һәм маҡсатҡа өлгәшеүе лә шул тиклем тиҙерәк, енелерәк иҫәпләнә. Тик был юлдың ниндәй ҡорбандарға килтереү ихтималлығы ҡара көстәрҙе бөтөнләй борсомай. Ләкин цивилизация гәйепһеҙ ҡорбандарҙы онотмай. 21-се быуат башынан алып иң ҙур юғалтыуҙарға сәбәп булған Мәскәү ("Норд-Ост") менән Беслан фажиғәләре генә лә 500-гә яҡын кешенең ғүмерен алып китте, шуларҙың яртыһы тип әйтер-

*ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...*

?

***Быйыл үҫмәгән үлән, уңмаған емеш ҡалманы. Боланут эшкәртеп, башҡа үләндәр йыйып, тәмле сәй әҙерләргә лә тамам оҫтарҙыҡ, ул хатта махсус етештерелеп, һатыуға ла сығарылды. Тағы ниҙәрҙе үҙебеҙ үҫтереп, өҫтәмә килем алырға, аҡса эшләргә булыр ине?***

***Сәриә ҠАҺАРМАНОВА, Белорет районы, уҡытыусы:*** Йәй ризыҡтың мул сағы, һыйыр ағының һәр тамсыһын исрафламай тотонор мал. Халҡыбыҙ һыйыр һөтөнән ниндәй генә ризыҡ етештермәгән! Үкенескә, хәҙерге балалар, шулай уҡ хатта өлкәнерәктәр ҙә, ҡатыҡ эсмәй, ҡорот ашамай һәм үҙҙәрен дауаға бәрәбәр бик шифалы, туҡлыҡлы аҙыҡтан мәхрүм итәләр. Шулай булһа ла был ризыҡтарҙы ашап үҫкән быуын - беҙ бар, ә ауылда тыуып, хәҙер ҡалала көн иткәндәр өсөн, ғөмүмән, танһыҡ аш ул һөт ризыҡтары. Күптәр уны ҡәҙерле күстәнәс итеп ауылдан килтерә, һатып та алалар, йә булмаһа, фермер продукттары менән сауҙа итеүсе ҡала магазиндарынан әҙләп табалар. Шулай булғас, һөт ризыҡтарын әҙерләп, уны һатып алырға теләгәндәр өсөн тәҡдим итеү көнүҙәк мәсьәләләр тип уйлайым. Йәйге селләлә ҡыҙыу эш, бесән мәлендә һыуһыңды ҡандырыр айранды ғына алып ҡараһаҡ та, был магазиндарҙа һатылған телһә ниндәй кока-кола, пепси, йә башҡа төрлө химикат тултырылған газлы эсемлектәргә ҡарағанда мең артыҡ!

Мин үҙем ҡорот ҡайнатырға әүәҫмен, заказдар ҙа күп була. Уны мин былай эшләйем. Айыртылған һөттән ойотолған ҡатыҡты егерме көнләп ултыртып ҡуйғас, барлыҡҡа килгән эркетте ҡайнатабыҙ. Кемдер уны рәхәтләнеп газ плитәһендә ҡайнатам, ти. Шулай рәхәтерәктер, әлбиттә, ләкин ерек утыны яғып, шуның төтөнө ыҫында ҡайнатмағас, ҡорот ҡорот буламы инде! Ҡайнатҡанда эркеткә бер аҙ тоҙ һалам, шул саҡ ҡорот шыйығы тиҙ һарҡа. Бер-ике көндән ҡорот әҙер. Тоғонан табаҡҡа ауҙарып, үҙегеҙ теләгән рәүештә йомарлап, киптерергә ҡуйырға ғына ҡала. Ҡоротҡа төрлө тәм бирергә телһәгеҙ, ҡайнатҡанда эркеткә сейә япрағы ҡушырға мөмкин, ә инде әҙер ҡорот массаһын йоморсоҡтарға әүәләгәндә укроп ҡушып, туңдырғыҫҡа һалһағыҙ, аш ҡатыҡлауға бына тиғән тәмләткес була. Шул уҡ ваҡытта балалар өсөн ҡоротҡа емеш-еләк ҡушып туңдырырға ла мөмкин. Мин килолап йәш ҡоротто полиэтилен моҡсайҙарҙа туңдырам, һатып алыусылар өсөн шулай унайлыраҡ була. Ә инде шыйыҡ ҡорот яратҡандар өсөн уны пластик шешәләргә тултырып һатам. Кипкән ҡорот та бик үтемле була, уны айыуса походта, экскурсияла йөрөгәндә конфит урынына һурып йөрөһән, асыҡтырмай, йән-тәненә көс-ҡеүәт өҫтәлә.

Ҡаҡ ҡойоу шулай уҡ бик үтемле, файҙалы ризыҡ. Быйыл емеш-еләк уңды, ниндәйенән эшләһәң дә тәмле һәм шифалы килеп сыға, сөнки ул ҡайнатмаға ҡарағанда күпкә файҙалыраҡ. Йыйылған еләкте таҙалап, йыуып, блендер менән иҙәһең. Еләктең күплегенә ҡарап, самалап шәкәр ҡомо һибеләә. Мин үҙем уны күп ҡушмайым: 1 литр һауыттағы емешкә - 1 балғалаҡ шәкәр һалам, сөнки шәкәрҙең дауа түгеллеген яҡшы беләбеҙ. Кемдәрҙең заманса электр ылашы юҡ, өләсәй-әсәйҙәребеҙ эшләгәнсә, таҡтаға йәйеп киптерергә була. Ылашҡа пергамент ҡағыҙ түшәлә, уны майларға кәрәк. Артабан еләк иҙмәһен тигеҙләп йәйеп сығабыҙ ҙа ылашҡа ултыртабыҙ. Мин ни бары 30 градусҡа ғына ҡуйып, ике көн киптерәм. Әҙер булғас, ҡаҡ йәймәһен ҡағыҙҙан айырып алыуы еңел булһын өсөн пергамент аҫтына дымлы таҫтамал һалып тотабыҙ һәм аҙаҡ ҡаҡты үҙебеҙгә оҡшағанса төрәбеҙ.

Әйткәндәй, был ике төр ризыҡ та экологик таҙа һәм тәбиғи продукт, уларға бер ниндәй консервант та, химия ла ҡушылмай. Белгән кешеләр заказ биреп, йыл һайын һатып ала, ләкин иглан биреп кенә әллә ни килем эшләп булмай, ошондай ауыл ризыҡтарын һата торған махсус магазиндар бик кәрәк, тип уйлайым. Шул саҡта ауыл ризығы етештереп һатыусылар ҙа күберәк булыр ине.

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓Башҡортостанда 26 августа коронавирус йоҡтороуҙың 342 осрағы асыҡланған. Әлеге ваҡытта 174 пациент, шул иҫәптән 60 йәште уҙған 122 кеше стационарҙа дауалана, 11-еһең хәле ауыр, берәүһе үпкәне яһалма елләтеү аппаратына тоташтырылған. Ә 1630 кеше амбулатор шарттарҙа дауалана, уларҙың 499-ы - оло йәштәгеләр. Уҙған тәүлектә 175 кеше сирҙе еңгән, коронавирустан үлем осраҡтары теркәлмәгән. Башҡортостанда уҙған тәүлектә 15 876 кеше прививка яһатҡан.

✓Республикала 33 белем биреү учреждениеһына Советтар Союзы Геройҙары һәм Башҡортостандың күренекле эшмәкәрҙәренең исемдәре бирелде. Ошо уҡ документ менән Украинала махсус хәрби операцияла һәләк булған сығарылыш уҡыусылары иҫтәлегенә мемориаль таҡтаташ ҡуйыласаҡ мәктәптәр исемлеге раҫланды. Исемдәр биреү һәм мемориаль таҡтаташтар ҡуйыуға бәйле сараларҙы финанслау Башҡортостан райондары һәм ҡалалары хакимиәттәренә йөкмәтелде.

✓Башҡортостандың 1295 белем биреү ойошмаһының 1284-е яңы уҡыу йылы башланыуға әҙер. Был күрһәткес файҙаланыуға тапшырырға планлаштырылғандың 100 процентын тәшкил итә. Мәғариф һәм фән министры Айбулат Хажин оператив кәңәшмәлә ошо турала һөйләне. Министр һүҙҙәренсә, 1 сентябрҙә Башҡортостанда 509 мең уҡыусы өсөн яңы уҡыу йылы башлана, уларҙың яҡынса 55 меңе беренсе класҡа бара, бынан тыш, Луганск һәм Донецк халыҡ республикаларынан мәжбүри күскенселәрҙең ғаиләләренән 156 бала парта артына ултыра.

✓2022 йылда Башҡортостан муниципалитеттары юлдарға ваҡ таш түшәү өсөн бөтәһе 270 миллион һум аҡса алған. Республика Башлығы Радий Хәбиров үҙенең телеграм-каналында хәбәр итеүенсә, Нуриман, Стәрлетамаҡ, Илеш, Дүртөйлө, Благовещен, Борай һәм Стәрлебаш райондарында эшкә тотонғандар ҙа инде. "Беҙ муниципалитеттарыбыҙға тораҡ пункттарға юлдар мәсьәләһен хәл итеүҙә ярҙам күрһәтәбеҙ. Быйыл өсөн райондарға дүртенсе йыл инде юлдарға ҡырсынташ һибеү өсөн аҡса бүләбеҙ", - тип яҙҙы Радий Хәбиров социаль селтәрҙә.

✓ ***Бындай ҡатмарлы операцияны башҡарыу әҙерлек курсы ғына үткән фанатик террорсыларҙың ҡулынан килерлек түгел, сөнки ауыр һәм ҡатмарлы "Боинг" менән оҫта идара итеү өсөн профессионал булыу кәрәк.***





леге - балалар. 2004, 2010 йылдарҙа Мәскәү метрополитенындағы шартлатыуҙар һөҙөмтәһендә иһә 81 кеше һәләк була. Был терактарҙың сәбәптәре, ҡайғылы эҙемтәләре хаҡында халыҡ телендә лә, электрон матбуғат сығанаҡтарында ла бәхәстәр һәм фекерҙәр айырмалыҡтары әле булһа дауам итә, ләкин бөгөн иң мөһиме - власть һәм көс структураларына ана шул фажиғәләрҙән һабаҡ алыу, уның һәр эпизодын ентекле тикшереп, анализлап өйрәнеү һәм киләсәктә бындай фажиғәләргә юл ҡуймау маҡсатында һәр саҡ уяулыҡ тәьмин итеү тейештер.

Башҡасараҡ мәсьәлә - Америка ысынбарлығы. 2001 йылдың 11 сентябре был ил тарихында ғына түгел, донъя кимәлендә иң күп һанда ҡорбан килтергән террористик акт булды. Был көндө ике "Боинг" пассажирҙар самолеты Нью-Йорктағы Бөтөн донъя сауҙа үҙәгенең "күккә олғашҡан игеҙәк" биналарына килеп бәрелә. Тәүҙә янғын сыға, сәғәт ярымдан һуң биналар емерелеп төшә. Тағы бер самолет Пентагон бинаһына төшөп шартлаһа, дүртенсеһе Пенсильванияға етәрәк бушлыҡҡа ҡолай. Һөҙөмтәлә 3 мең кеше һәләк була һәм эҙһеҙ юғала, 6 мең кеше төрлө йәрәхәттәр ала. Рәсми версия буйынса теракт Усама бен Ладен тарафынан ойошторолған, тип ҡаралһа, уны үҙ-үҙҙәрен ҡорбан итеүсе 19 террорист тормошҡа ашыра.

Ә бына рәсми булмаған мәғлүмәттәр бөтөнләй икенсе төрлө һөйләй - әҙәм ышанмаҫлыҡты ысын булһа ла һөйләмә, тигәндәй, бындай хәбәрҙәргә ышаныуы ҡыйын, әлбиттә. Был хаҡта бик күп электрон сығанаҡтар, шул иҫәптән әле бына материалдарынан өҙөктәр килтереләсәк "Хәрби күҙәтеү" ("Военное обозрение") сайты ла был теракты... Американың махсус хеҙмәттәре ҡатнашлығында ойошторолоуы ихтимал, тип белдерә, сөнки был юҫыҡта аңлашылып бөтмәгән һәм "осо-оҫҡа" ялғана алмаған сәйер факттар бик күп икән. Мәҫәлән, "игеҙәк" биналарҙың конструкцияһы бик ныҡ һәм ышанаслы, теләһә ниндәй тетрәнеүҙәргә лә сыҙай алырлыҡ кимәлдә, тип, уларҙың самолеттар бәрелеүҙән йә булмаһа янғындан ғына емерелеп төшөүенә шик белдереүҙәр байтаҡ булып сыға. Икенсенән, бындай ҡатмарлы операцияны башҡарыу әҙерлек курсы ғына үткән фанатик террорсыларҙың ҡулынан килерлек түгел, сөнки ауыр һәм ҡатмарлы "Боинг" менән оҫта идара итеп, уны "сәпкә" тап килтереү өсөн профессионал булыу кәрәк, ти автор. Һәм, ниһайәт, иң мөһиме - сәйәси һөҙөмтә. Америка властары үҙҙәренә кәрәк һөҙөмтә хаҡына бер ниндәй провокациянан да баш тартмаясаҡ һәм ундай осраҡтар булғыланы, тиелә "Хәрби күҙәтеү" һәм башҡа материалдарҙа.

Ә уның маҡсаты ниҙе күҙҙә тота була һуң? Көрсөк кисереүсе капитализм арҡаһында АҠШ менән Көнбайыш илдәре иненә йөк булып төшкән ҡапма-ҡаршылыҡтар һәм проблемаларҙан ҡотолоуҙың бер юлы, тип фаразлай рәсми булмаған сығанаҡтар. "Донъя кимәлендә терроризмға" ҡаршы һуғыш иғлан итеп, хәрби-сәнәғәт комплексына өҫтөнлөк биреү, сит илдәргә һөжүм һәм уларҙы талау сәйәсәтен аҡлау һәм шул юл менән көрсөк депрессияһы башланыуҙы һуҙыу көнбайышса маҡсаттарға ярашлылыр ҙа, бәлки. Терактан һуң, ысынлап та, Америка хоҡуҡтары һәм Вашингтондың сәйәси ҡарарҙары халыҡ-ара һәм милли хоҡуҡ нормаларынан өҫтөнлөк ала башлай: бер ҡотопло донъяға иҫәп тотоу һәм шуға асыҡтан-асыҡ ишаралыр ҙа, был, бәлки. Тап шул терактан һуң бит Америка "терроризмға ҡаршы көрәш" флагы менән Ираҡҡа һуғыш асты. Төрмә телләр ишаралауынса, иллә мәгәр Ираҡ нефтҡә бай илдәрҙең береһе инде былай. Нисек кенә булмаһын, цивилизациялы йәмғиәт һәм прогрессив кешелек был теракта Американы ғәйепләүҙән алыҫ, иллә мәгәр ябай американдар араһында үткәрелгән һорау алыуҙарҙа "Теракт хаҡында тулы хәҡиҡәтте беләһегеҙме?" тигән һорауға респонденттарҙың 50 проценты "юҡ" тип яуап биргән. Уйлап ҡарағанда, властарҙың үҙ халҡына ҡарата ҡурҡаләтә ҡанлы "шоу" ойоштороуы ни бысағыма кәрәк? Етмәһә, уның һөҙөмтәһендә килтерелгән иҫ киткес ҙур зыян һәм уның эҙемтәләрен бөтөрөүгә киткән етди сығымдар шулай уҡ кәрәк булдымы икән? Әйтеүҙәренсә, теракт һөҙөмтәһендә шартлатылған биналарҙың емереклектәрен таҙартыуға ғына ла һигеҙ йылдан ашыу ваҡыт китә, шул сүрәттә лә Бөтөн донъя сауҙа комплексы биналарын тергеҙеү бөгөн дә тамамланып бөтмәгән, тиҙәр. Элекке "игеҙәк" биналар урынына хәҙер шундай уҡ алты күп ҡатлы башнялар күккә олғашасаҡ.

Быларҙың бөтәһе лә үҙен донъя кендеге тип хис иткән илгә ғибрәтле генә һабаҡ булырҙай ҙа бит, ләкин Америка ысынбарлығы шундай: был ил үҙен донъя гегемоны итеп күргәнлектән, бөтөн башҡа илдәр мәнфәғәте менән иҫәпләшеп тормай. АҠШ үҙенең башҡа илдәрҙән өҫтөнлөгөн һәм Евразия континентында үҙ контролен һаҡлар өсөн көнәркәш күргән дәүләтәләрен юлдан алып ташлау хаҡына теләһә ниндәй провокацияға әҙер. Ә бындай дәүәсәләр итеп Вашингтон Рәсәй менән Ҡытайҙы күрә, шуға ла ул күп һәм ике яҡлы хәрби ойошмалар системаһы яҡлы, "заговорсылар" төркөмдәре ойоштора, ҡурҡытыу һәм баҫым яһауҙың башҡа төр алымдарын әүҙем ҡуллана, уларға ҡаршы һуғыш хәрәкәттәре аса.

Баҫым, ҡурҡытыу, тигәндән, АҠШ менән Евразия илдәре тарафынан Рәсәйгә ҡаршы иғлан ителгән санкцияларҙың глобаль терроризмдан ниндәй айырмаһы бар, уйлап ҡарағанда? Шул уҡ алымдар, баҫым, үҙҙәренә отошло шарттар ҡуйыу, Рәсәй банктарын һәм ундағы активтарҙа "бик" һалыу, Рәсәйгә сит ил тауарҙары индереүҙе тыйыу, хатта ки беҙҙең граждандарға виза биреүҙе лә ҡаты контролдә тотоу һәм кеше хоҡуҡтарын сикләү. Был нимә, ил халҡын, тимәк, аманат итеп алдымы ни улар үҙҙәренсә? Улай булһа, ысынлап та, был үҙенсәлекле, "йәшерен" террористик актты хәтерләтә түгелме?

Халыҡ-ара Reuters яңылыҡтар агентлығының һуңғы көндәрҙәге хәбәрҙәренә ҡарағанда, Көнбайыш Рәсәйгә ҡаршы БМО сиктәрендә яңы төр санкциялар иғлан итеүҙән тыйылған, имеш, сөнки донъяның күпселек илдәре бындай аҡылһыҙлыҡты артабан яҡламаясаҡ икәне былай ҙа аңлашыла. Был, әлбиттә, аҡылһыҙлыҡ һәм сәйәси күрәгаралыҡ. Рәсәй Президенты Владимир Путин әйтмешләй, Рәсәйгә ҡаршы санкцияларҙан бөтөн донъя иҡтисады зыян күрҙе. Шул арҡала ла, бирһен Хоҙай, Көнбайыштың сәйәсәтте лә, иҡтисад өлкәһендә лә өҫтөнлөккә ынтылыуының күңелһеҙ ахыры оҙаҡ көттөрмәйәсәк.

**Фәүзиә ИҘЕЛБАЕВА.**

## ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

?

***Быйыл үҫмәгән үлән, уңмаған емеш ҡалманы. Боланут эшкәртеп, башҡа үләндәр йыйып, тәмле сәй әҙерләргә лә тамам оҫтарҙыҡ, ул хатта махсус етештерелеп, һатыуға ла сығарылды. Тағы ниҙәрҙе үҙебеҙ үҫтереп, өҫтәмә килем алырға, аҡса эшләргә булыр ине?***

***Фирүзә ИШБИРҘИНА, хеҙмәт ветераны:*** Магазин аҙыҡ-түлегенең сифатына торған һайын дәғүәләр арта бара. Хәҙерге көндә магазин һөтөнөң эсергә яраҡһыҙлығын махсус лабораторияла тикшереп мәшәҡәтләнеү ҙә кәрәкмәй, тәмләп ҡарау ҙа етә: һөт тәменән башҡаһы бөтәһе лә бар. Шул уҡ ваҡытта һөт ризыҡтарын баҙарҙан һатып алыу ҙа хәүефле: ниндәй малдан, ниндәй шарттарҙа һауылған һәм ниндәй һауыттарға тултырылған? Картуф, йәшелсә, емеш-еләк кеүек аҙыҡ-түлекте шикләнмәй һатып алырға булһа ла, һөт продукттарының тиҙ боҙолосанлығы махсус контроль талап итә, шуға күрә, тәмһеҙерәк булһа ла һөттө ниндәйҙер контроль үткән магазиндан һатып алыуҙы өҫтөн күрәһең.

Тик барыбер күңелдә хәүеф, сөнки Роспотребнадзор мәғлүмәттәренә ҡарағанда, ит һәм һөт ризыҡтарының 15-20 процентында антибиотик бар. Бөгөн бит хатта бер ни уйлап тормаҫтан, һайлап-һайлап, маҡтай-маҡтай эскән сит ил сәйҙәренә лә ышаныс ҡаҡшап ҡуйҙы бит әле. Яңыраҡ "Рәсәй гәзите" яҙып сығыуынса, немец ғалимдары бәләкәй фильтр-пакеттарға төрөлгән сәйҙә үлән менән тукланыусы, шулай уҡ ул үҫкән тупраҡ экосистемаһында йәшәүсе меңәрләгән төр бөжәк һәм йәнлектәрҙең ДНК-һы, йәғни генетик эҙҙәрен асыҡлаған. Улар араһында йыртҡыстары ла, паразиттары ла, детритофагтар ҙа (үле органика менән тукланыусы) бар. Был, әлбиттә, махсус сәй компанияларына ҡаршы эшләнгән антиреклама түгел, ә осраҡлы рәүештә асыҡланған мәғлүмәт.

Шуға күрә, ете диңгеҙ, ете тау арьяғынан килтереп һатылған сәйгә ҡарағанда үҙ еребеҙҙә үҫкән үлән сәйе таҙараҡтыр тип ышанғы килә. Ләкин һәр кемебеҙҙең дә ҡырға сығып, үҙ ҡулдарыбыҙ менән үлән сәйе әҙерләй алыу мөмкинлеге юҡ, ә был эш менән даими шөғөлләнгән эшҡыуарҙар продукцияһы баш ҡалабыҙ Өфөлә бер ике урында ғына һатыла. Ғөмүмән, фермер продукцияларын һатыуҙы аралашсы ҡулына тапшырып ҡуймайынса, тейешле кимәлдә ойоштороп, тәртипкә һалыу кәрәктер тип уйлайым, юғиһә, күберәк килем алыу өсөн санитар нормалар һәм ҡағиҙәләрҙе ашатлап өйрәнгән намыҫһыҙ фермерҙар һәм аралашсылар ҙа бар бит...

**Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА яҙып алды.**

## НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✓Башҡортостанда быйыл ете айҙа 1,6 миллион квадрат метрҙан ашыу торлаҡ файҙаланыуға тапшырылған. 2021 йылдың ғинуар-июле менән сағыштырғанда 10,3 процентҡа күберәк, тип белдерҙе Премьер-министр Андрей Назаров республика Хөкүмәтенең оператив кәңәшмәһендә. Торлаҡты сафҡа индереү буйынса Башҡортостан әлеге ваҡытта Волга буйы федераль округында икенсе урынды биләй.

✓Башҡортостанда "Атай ҡаһарманлығы" наградаһына 160-тан ашыу ир-егет дәғүә итә. Улар араһында - янғын һүндереүсе, уҡытыусы, фермер, водитель, тракторсы, адвокат, нотариус, балта оҫтаһы, слесарь, маркетолог һәм башҡа һөнәр эйәләре. Уларҙың ҡайһы берҙәре һаулыҡ мөмкинлектәре сикле балалар үҫтерә, ҡайһылары тәрбиәгә бала алған, 30-ҙан ашыу бала ҡараған атайҙар ҙа бар. Конкурсҡа йомғаҡ сентябрь айында яһала.

✓Башҡортостанда 23 августан 5 сентябргә тиклем автомобиль менән урманға инеү сикләнде. Быға аномаль эҫелек сәбәпсе. Уҙған аҙнала республикала дүрт урман янғыны теркәлгән, уларҙың барыһы ла һүндерелгән. Башҡортостан буйынса Ғәҙәттән тыш хәлдәр министрлығының матбуғат хеҙмәте хәбәр итеүенсә, әле урман янғындары юҡ. 2022 йылдың янғын хәүефе осоро башланғандан алып бөтәһе 298,460 гектарҙа 50 урман янғыны сыҡҡан.

✓Башҡортостанстат белгестәре республикала беренсе класс уҡыусыһы өсөн шартлы минималь тауарҙар йыйылмаһы хаҡын иҫәпләп сығарған. Уға әйберҙәр, канцелярия кәрәк-яраҡтары, уҡыу һәм дидактик материалдар инә. 2022 йылдың июленә мәғлүмәттәр буйынса, малайҙар өсөн тауарҙар - 22 889,56 һумға, ә ҡыҙҙарға 27 624,08 һумға төшә. 2021 йылдың июле менән сағыштырғанда хаҡ 18,2 процентҡа һәм 15,4 процентҡа ҡиммәтләнгән. Хәҙер бер дәфтәр - 9,19 һум, рюкзак - 2636,31 һум, ҡыҙҙар күлдәге - 1929,88 һум, ә малайҙар джемперы 1344,6 һум тора.

✓Ишембайҙа Ҡала көнөн гәзиттәгенән ике айға һуңыраҡ билдәләйҙәр. Әлегәсә байрам августың һуңғы йәкшәмбеһендә үткәрелеп килде. Ләкин быйыл уны октябрь айына күсерергә хәл итеҙе. Был хаҡта район башлығы социаль селтәрҙәге сәхифәһендә хәбәр итте. "Октябрь башында Ҡала көнөн һәм Башҡортостан нефтенә 90 йыл тулыуҙы берләштереп, ҙур сара ойоштораbыҙ. Уның датаһы һәм программаһы хаҡында социаль селтәрҙә хәбәр итермен", - тип яҙҙы Азат Ишемғолов.

✓ *Дәүләт милли сәйәсәтенең төп йүнәлештәре тип республика халыҡтарының дәүләт һәм туған телдәрен өйрәнеү хоҡуғын тәьмин итеү; милли мәҙәниәтте һәм ғөрөф-ғәҙәттәрҙе, башҡа өлкәләрҙе һаҡлауына ярҙам итеү билдәләнә.*



*ҠЫҪҠАСА*

# ИКЕ МИЛЛИОНДАН АШТЫ!

**Башҡортостан игенселәре 2,1 миллион тонна ашлыҡ йыйып алған. Гектарынан уртаса уңыш - 30 центнер.** "Республикала иген һәм ҡуҙаҡлы иген культуралары сәселгән майҙандарҙың 40 проценты һуғылған. Параллель рәүештә ужым сәсәбеҙ, планлаштырылған 500 мең гектарҙың 12 проценты әҙер. Башҡа традицион культураларҙы ла онотмайбыҙ. Уҙған аҙнала Күгәрсен районында "Етен - 2022" семинары үтте. Был культураны эшкәртеүҙең нескәлектәре бар, семинарҙа ошо хаҡта һөйләштек. Етен - рентабелле культура, тупраҡтың составына яҡшы йоғонто яһай. 2022 йылда Башҡортостанда 68,7 мең гектар майҙанда етен сәселгән - 2021 йылға ҡарағанда 13 процентҡа күберәк", - тип яҙҙы Радий Хәбиров социаль селтәрҙәге сәхифәһендә.

✓ **2023 йылдан башлап илдең спорт үҙәктәре һәм мәктәптәре - белем биреү эшмәкәрлегенә лицензия, ә ошо учреждениеларҙа эшләгән тренерҙар бөтә хоҡуҡтар, бурыстар һәм социаль гарантиялар менән педагогик хеҙмәткәрҙәр статусын алыу мөмкинлегенә эйә.** Рәсәй Федерацияһы Хөкүмәте Премьер-министры Михаил Мишустин ябайлаштырылған тәртиптә ошондай лицензиялар биреү ҡағиҙәләрен раҫлаған ҡарарға ҡул ҡуйҙы. Спорт әҙерлеге программалары буйынса эшләгән ойошмаларға Мәғариф һәм фән өлкәһендә күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәткә тейешле ғариза тапшырыу ҙа етә. Бындай лицензиялар ярты йыл ғәмәлдә була. Артабан спорт үҙәктәре һәм мәктәптәре мөҙҙәтһеҙ лицензиялар алырға мөмкин. Быны 2023 йылдың 1 сентябренә тиклем башҡарырға кәрәк.

✓ **Ауыл ерендә торлаҡ төҙөү йәки һатып алыу өсөн льготалы ипотека кредиттары программаһының ваҡыты сикләнмәй. Был туралағы ҡарарға Хөкүмәт рәйесе Михаил Мишустин ҡул ҡуйған.** 18 августа Тамбовта "Бәләкәй ҡалаларҙы һәм тарихи биләмәләрҙе үҫтереү" һәм "Йәшәү өсөн мөхит: үҙ йортоң" Бөтә Рәсәй форумдарының пленар сессияһында сығыш яһағанда ул ошо хаҡта белдерҙе. "Ауыл халҡы программа тамамланғансы өлгөрмәҫбеҙ тип ҡурҡмай, йорт һатып алыу йәки төҙөү өсөн кредит юлларға мөмкин", - тип билдәләне министрҙар кабинеты башлығы. Тәүҙә программа 2022 йылдың 31 декабренә тиклем ғәмәлдә булырға тейеш ине. Хәҙер тағы ла күберәктәрҙең йылына 3% тиклем льготалы ставка менән ипотека кредиттары алыу мөмкинлеге бар.

✓ **Республикаға идара итеү үҙәге Башҡортостандың иҫтәлекле, күркәм урындары менән таныштырыуҙы дауам итә һәм уларҙы барып күрергә саҡыра.** Бына улар: Торатау шиханы - тәбиғәт ҡомартҡыһы һәм республиканың төп символдарының береһе. Шүлгәнташ - Уралдағы иң ҙур, күп ҡатлы карст мәмерйәләренең береһе. Унда уникаль ҡая һүрәттәре һәм палеолит осороноң мәҙәни ҡатламы һаҡланған. Туймазы районындағы Ҡандракүл - Европала урман-ялан зонаһында урынлашҡан иң ҙур күлдәрҙең береһе. Күгәрсен районындағы "Мораҙым тарлауығы" тәбиғәт паркы - Уралдағы иң матур, мауыҡтырғыс мәмерйә комплекстарының береһе. Нөгөш һыуһаҡлағысы - Көньяҡ Уралдағы ғәжәйеп урындарҙың береһе, туристарҙың яратҡан урыны. "Ҡарағыҙ, ял көнө маршрутын төҙөгөҙ", тиҙәр Республикаға идара итеү үҙәгендә.

*ТӨРЛӨҺӨНӘН*

# ҮЗБӘКСТАНДА...



**Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров социаль селтәрҙәге сәхифәһендә Үзбәкстандың иҫтәлекле урындарына һоҡланыу белдерҙе.**

"Үзбәкстан иҫ киткес матур. Бында баш ҡала - Ташкент тормошон, Сәмәрҡәнд, Бохара һәм Хиуа кеүек туристик ынйыларҙы, Фирғәнә үҙәнен, атап әйткәндә, Наманганды ҡарап йөрөргә мөмкин (әлеге ваҡытта бында инвесторҙар менән осрашабыҙ). Мәҫәлән, Наманган өлкәһендә генә 27 тарихи объект һәм изге урын бар. Мәҙрәсә, мәсеттәр, кәшәнәләр... Бәрәкәтле ер, бигерәк тә яҙғыһын һәм көҙгөһөн, емеш-еләк һәм йәшелсәләр күп булған осорҙа. Мин Башҡортостан туристарының да ошо ил менән танышыуын теләр инем", - тип яҙҙы Радий Хәбиров. Уның һүҙҙәренсә, Башҡортостандан Үзбәкстанға яңы авиамаршруттар асылыуы мөмкин. "Хәҙер Өфөнән Үзбәкстанға ике рейс бар - йәкшәмбе көндө самолеттар Ташкентҡа, шаршамбы Наманганға оса. Әгәр ошо йүнәлешкә ихтыяж булһа, өҫтәмә рейстар асырбыҙ", - тине Радий Хәбиров. Башҡортостан Башлығы дүрт көнлөк ялын Үзбәкстандың туристик ынйыларын - Сәмәрҡәнд һәм Бохара ҡалаларын өйрәнеүгә арнаны. "Ике ҡала ла Аҡһаҡ Тимер һәм уның тоҡомдары, Тимуридтар династияһы менән тығыҙ бәйләнгән. Бында минең төп маҡсатым - Евразия күсмә цивилизациялар музейын ойоштороу өсөн идеялар туплау. Белеүегеҙсә, беҙ уны Шишмә районында асырға йыйынабыҙ", - тип билдәләне республика Башлығы социаль селтәрҙәге сәхифәләрендә. Ул Башҡортостанда ла Аҡһаҡ Тимер менән бәйле урындарҙың барлығын әйтте.

# БЕҘҘӘ - ТАШКЕНТ КӨНДӘРЕ



**Быйыл көҙ Өфөлә Ташкент көндәре уҙғарыла. Был хаҡта Башҡортостан Хөкүмәте Премьер-министры Андрей Назаров хәбәр итте.**

"Үзбәкстан менән мөнәсәбәттәрҙе нығытыуҙы дауам итәбеҙ. Ташкент мэры менән октябрь айында Өфөлә Ташкент көндәрен үткәреү тураһында һөйләшеп килештек. Сәнәғәт предприятиеларын булдырыу, шулай уҡ ауыл хужалығы сеймалын етештереү һәм эшкәртеү, туризм өлкәһендә берлектәге инвестиция проекттарын билдәләнек", - тип яҙҙы ул үҙенең Телеграм-каналында.

Премьер-министр һүҙҙәренсә, бөгөн Үзбәкстан бизнесы менән берләштерелгән "ГазРесурс" компанияһы Башҡортостанда 1,3 миллиард һумлыҡ өс инвестиция проектын ғәмәлгә ашыра. Андрей Назаров Башҡортостан делегацияһының Үзбәкстанға сәфәренән һуң республикалар араһында тышҡы сауҙа әйләнешенең үҫеше күҙәтелеүен билдәләне. Йыл башынан алып ул 6,9 процентҡа артҡан. 2021 йылда әйләнеш 113 миллион доллар тәшкил иткән. Шулай уҡ компанияның март айынан Uzbekistan Airways авиакомпанияһының Өфөнән Ташкентҡа тура рейстарын тергеҙеү тураһында килешеүгә өлгәшелде, 14 июлдә UTair авиакомпанияһының осош программаһы эшләй башланы. "Башҡортостан предприятиелары менән Үзбәкстандың потенциаль партнерҙары араһында хеҙмәттәшлек булдырыу дауам итә. 17-19 августа беҙҙең бизнес-миссия ойошторолдо. Комплекслы эшлекле осрашыуҙар, урындағы эшҡыуарлыҡ һәм эшлекле даирәләр ҡатнашлығында түңәрәк ҡорҙар үткәрҙек, шулай уҡ Үзбәкстандың профилле предприятиелары эше менән таныштыҡ", - тине республика Хөкүмәте башлығы.

# РЕСПУБЛИКА КӨНӨНДӘ...



**Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров 2022 йылдың 11 октябрендә Республика көнөн уҙғарыу тураһындағы указға ҡул ҡуйҙы.**

Башҡортостан Башлығы Хакимиәте етәксеһе Максим Забелин рәйеслегендәге ойоштороу комитетына саралар планын әҙерләү бурысы йөкмәтелде. Тантаналы саралар ковидҡа ҡаршы сикләүҙәрҙе һәм санитар-эпидемиологик талаптарҙы үтәп ойошторолорға тейеш. Муниципалитеттарға "Рәсәй Федерацияһының һәм Башҡортостан Республикаһының дәүләт символикаларын файҙаланып, учреждениеларҙы, урамдарҙы, майҙандарҙы, йәмәғәт биналарын һәм торлаҡ кварталдарҙы байрамса биҙәргә" тәҡдим ителде. Республиканың ҡала һәм район хакимиәттәренә лә "тораҡ пункттарҙа йәрминкәләр үткәреү, күсмә сауҙа ойоштороу" бурысы ҡуйылды. Республика буйынса Эске эштәр министрлығына йәмәғәт тәртибен һәм юл хәрәкәте хәүефһеҙлеген тәьмин итергә ҡушылды. Сараларҙы бюджеттарға һәм сметаларға ярашлы финанслау тейешле ведомстволарға йөкмәтелә. Хәтерегеҙгә төшөрәбеҙ, Республика көнө байрам көнө тип иҫәпләнә. Быйыл ул шишәмбегә тура килә.

# МИЛЛИ СӘЙӘСӘТ БУЙЫНСА...


УКАЗ

**Милли дәүләт сәйәсәте концепцияһы Башҡортостан Башлығы Указы менән раҫланды. Ул Башҡортостан Республикаһының хоҡуҡи мәғлүмәт рәсми интернет-порталында донъя күргән.**

Документта республиканың дәүләт органдары милләт-ара мөнәсәбәттәр һәм этномәҙәни үҫеш мәсьәләләрен хәл иткәндә ошо концепцияны ҡулланырға тейешлеге билдәләнә. Урындағы үҙидаралыҡ, ойошмалар һәм йәмәғәт берекмәләре өсөн ул тәҡдим характерына эйә. Документта төбәктең милләт-ара мөнәсәбәттәре ҡылыҡһырлана, системалағы милләт-ара һәм этноконфессиональ мөнәсәбәттәрҙең төп мәсьәләләре билдәләнә. Улар араһында радикаль идеялар һөҙөмтәһендә дөйөм граждан берҙәйлегенең юйылыуы, Рәсәй халыҡтарына сит булған ҡиммәттәрҙе көсләп тағыу, күршеләргә сит илдәрҙән миграцияның көсәйеүе һ.б. бар.

Дәүләт милли сәйәсәтенең төп йүнәлештәре тип БР халыҡтарының ватансылыҡ ҡиммәттәре, тарихи хәтер, милли традицияларға һәм дини тойғоларға ихтирамы нигеҙендә граждандыҡ берҙәмлеген булдырыу; Башҡортостан халыҡтарының матди һәм рухи мәҙәниәтен һаҡлау һәм үҫтереү; милләт һәм дин-ара низағтарҙы профилактикалау; республика халыҡтарының дәүләт һәм туған телдәрен өйрәнеү хоҡуғын тәьмин итеү; республиканан ситтә йәшәгән башҡорттарҙың телде өйрәнеүен, милли мәҙәниәтте һәм ғөрөф-ғәҙәттәрҙе, башҡа өлкәләрҙе һаҡлауына ярҙам итеү билдәләнә.

**Роман ЯКИМЧУК.**

# БАШ ҠАЛА ХӘБӘРҘӘРЕ

✓ Баш ҡалала уҡыусылар өсөн яңы уҡыу йылы тантаналы линейканан башлана. Был турала хакимиәт башлығы урынбаҫары Гөлләриә Ялсыҡаева хәбәр итте. Уның һүҙҙәренсә, байрам алдынан полиция хеҙмәткәрҙәре һәм кинологтар белем биреү ойошмаларын тикшереп сыға. Ә 1 сентябрҙә мәктәптәрҙә контроль һәм үткәреү режимы көсәйтелә. Дәрестәр башланғас, коронавирустың таралыуын иҫкәртеү өсөн санитар инспекторҙар ҙа эшкә тотона.

✓ Өфө ҡалаһы хакимиәтенең мәҙәниәт һәм сәнғәт идаралығы коллективын яңы етәксе - Айгөл Барый ҡыҙы Хәсәнова менән таныштырҙылар. Быға тиклем Айгөл Хәсәнова Башҡортостан Республикаһы Мәҙәниәт министрлығының этномәҙәни үҫеш һәм төбәк-ара хеҙмәттәшлек бүлеген етәкләне. 2019 йылдың мартынан идаралыҡ етәксеһе булып эшләгән Шамил Абдраҡов быйыл 22 июлдә вазифаһын ҡалдырҙы.

✓ Илдең көньяҡ һәм үҙәк өлөшөндәге 11 аэропортҡа осоштарҙы ваҡытлыса сикләү режимы 29 августа тиклем оҙайтылды. Һүҙ Анапа, Белгород, Брянск, Воронеж, Геленджик, Краснодар, Курск, Липецк, Дондағы Ростов, Симферополь һәм Элиста хаҡында бара. Пассажирҙарға Сочи, Волгоград, Минеральные Воды, Ставрополь һәм Мәскәү аша альтернатив маршруттарҙан файҙаланырға тәҡдим ителде. Илдең башҡа аэропорттары ғәҙәттәгесә эшләй.

✓ Өфөлә 28 августа, Ағиҙел йылғаһы буйында "Кино төнө-2022" үткәрелә, тип хәбәр итте Башҡортостандың мәҙәниәт министры Әминә Шафиҡова. Уның билдәләүенсә, кино һөйөүселәрҙе Алексей Нужныйҙың "Папа из будущего" комедияһы һәм Динар Әбдрәшитовтың ҡыҫҡа метражлы "Гильза" фильмы көтә. Кино байрамы киске сәғәт 9 тула 10 минутта башлана.

✓ 28 августа "Ҡашҡаҙан" паркында Ватан телевидениеһының иң сағыу проекттарының береһе булған "Ҙур джаз" йондоҙҙары - Анастасия Иванова, София Ацбеха-Негга, Михаил Фотченков, Тигран Арутюнян, Андрей Баталеев һәм башҡалар ҡатнашлығындағы уникаль сара үтә. Концерт 20.00 сәғәттә башлана. Инеү түләүһеҙ. Өфөләге был джаз тамашаһын "Рәсәй-Культура" телевизион каналында күрһәтәсәктәр.

**"БАШИНФОРМ" материалдары файҙаланылды.**

*✔ Күрше кварталдағы "Башҡортостан" концерт залы алдындағы майҙан да төҙөкләндереләсәк. Бының өсөн "Өфө картаһы" арт-объекты эшләнгән, унда баш ҡаланың тарихи өлөшөнөң мәҙәни үҙәктәре билдәләнгән.*



ТӨРЛӨҺӨНӘН

# ӨФӨ АРБАТЫ ҠАЙҘАН ҮТӘ?



**Баш ҡалала йәйәүлеләр өсөн генә тәғәйенләнгән урам булмаһа ла, Пушкин урамынан Боҙ аренаһына тиклем арауыҡта Ленин урамын ҡала халҡы күптән Өфө Арбаты итеп күрергә теләй һәм ул ниндәйҙер кимәлдә ошо бурысты үтәй ҙә инде.**

Баш ҡала дизайны үҙәге ошо арауыҡта урынлашҡан скверҙарҙы, йәмәғәт киңлектәрен төҙөкләндереү проектын тәҡдим итә. Был эштәр 2024 йылға тиклем башҡарылырға тейеш.

Эштең Ленин менән Революцион урамдары киҫелешендәге скверҙан башланыуы күҙаллана. Бының өсөн Октябрь революцияһының 50 йыллығы темаһына концепция эшләнгән. Шулай уҡ эргәләге ике скверҙың стилистик бәйләнеше лә уйланылған. Бында тротуар плитаһын алмаштырыу ҡарала. Халыҡҡа уңайлы булһын өсөн асамай рәүешендәге эскәмйәләр, түңәрәк япмалар һәм башҡа ваҡ биҙәү элементтары ҡуйыу күҙаллана.

Икенсе маршрут - Йәштәр театры алдындағы майҙан. Бында аҡлы-ҡаралы плита һалыу, йәшелләндереү, эскәмйәләр ултыртыу планлаштырыла.

Күрше кварталдағы "Башҡортостан" Дәүләт концерт залы алдындағы майҙан да төҙөкләндереләсәк. Бының өсөн "Өфө картаһы" арт-объекты эшләнгән, унда баш ҡаланың тарихи өлөшөнөң мәҙәни үҙәктәре билдәләнгән. Фонтанды реставрациялау һәм тротуар плиталарын алмаштырыу ҙа ҡарала.

Маршруттың һуңғы өлөшөндә урынлашҡан "Родина" кинотеатры майҙанында, Ленин һәм Театр исемендәге скверҙарҙы төҙөкләндереү тротуар плиталарын алмаштырыу, эскәмйә урынлаштырыу һәм бәләкәй архитектура формаларын ҡуйыуҙан ғибәрәт буласаҡ.

Октябрь революцияһы урамында төҙөлөш-монтаж эштәрен башҡарыуға подряд ойошмаһын һайлау буйынса конкурс процедураларына әҙерлек бара. Реконструкцияның беренсе этабында Ленин урамынан Салауат Юлаев проспектына тиклем участка яңыртыла. Әҙерлек ваҡытында ағастарҙы ҡаҙып алыу һәм электр селтәрҙәрен көсәйеү ҡаралған. Юл эштәре тамамланғас, экологик акциялар сиктәрендә ағастар яңынан ултыртыласаҡ. 2023 йылдың яҙында, уңайлы шарттар тыуыу менән, инженер селтәрҙәрен үҙгәртеп эшләү башланасаҡ.

# ТЫҒЫНДАРҘАН ҠОТҠАРА...



**Зинино ауылы эргәһендә "Хәүефһеҙ сифатлы юлдар" милли проектын тормошҡа ашырыу барышында төҙөлгән юл сиселешендә ҡуйылырға тейешле 36 балканың 10-һы ултыртылған.**

- Балка алдан билдәләнгән, цемент-ҡом ҡатнашмаһы һалынған урындарға ҡуйыла. Был бик яуаплы һәм ҡатмарлы эш. Бер юлы ике крансының бер төрлө эшләүен талап итә. Бында балканың ауырлығы ла, уның оҙонлоғо ла йөгонто яһай, - ти прораб Айрат Кәлимуллин. - Килтереү һәм ҡуйыу өсөн сәғәт ярым ваҡыт кәрәк. Был 3-4-се аралыҡтағы бишенсе балка.

Проект документацияһына ярашлы, юлдың оҙонлоғо 106,5 метр тәшкил итә һәм ул өс арауыҡтан тора. Арауыҡтар дүрт терәүҙә ултыра. Һәр арауыҡта 33 метрлыҡ 12 балка ҡуйыла. Береһенең ауырлығы 60 тонна, оҙонлоғо 33 метр. Бөгөнгә шулай уҡ 1-2-се арауыҡта ла биш балка урынлаштырылған. Барлыҡ балкалар йыл һуңына тиклем монтажланып бөтөргә тейеш. Тимер юлы өҫтөнән үткән юл арауығын эшләгәндә поездар хәрәкәте ваҡытлыса туҡтатылып торасаҡ, электр энергияһы һүндереләсәк һәм, РЖД расписаниеһына ярашлы, сымдар төшөрөләсәк. Был ғәмәлдәр барыһы ла килешеү буйынса һәм һәр яҡ вәкиле ҡатнашлығында башҡарыласаҡ.

Субподряд ойошмаһы бер үк ваҡытта юлдың ике яғын күтәртеү менән шөғөлләнә. Был маҡсаттан 19 августҡа ҡарата планлаштырылған 540 меңдән 270 мең куб ҡырсынташ килтерелгән. Юл сиселешенән Нуғай шоссеһына тиклем ара 1850 метр тәшкил итә. Ул һәр яҡҡа ике һыҙаттан тора. Дөйөм алғанда, объектта эш алдан раҫланған графикка ярашлы бара, тапшырыу 2023 йылдың өсөнсө кварталына планлаштырылған. Яңы юл сиселеше асылғандан һуң тимер юлын аша сығыу урыны ябыласаҡ һәм Нуғай ҡасабаһы, Иглин районының ҡайһы бер ауылдары халҡы километрҙарға һуҙылған "тығын"дарҙан ҡотоласаҡ.

# ӨФӨ - ПОЧТА МАРКАҺЫНДА




**Был аҙнала Өфө почтамты ҡарамағындағы почта бүлексәһенең клиенттарҙы хеҙмәтләндереү залында "Өфө - хеҙмәт фиҙаҡәрлеге ҡалаһы" почта маркаһының ҡулланылышҡа сығыу тантанаһы үтте.**

Мәғлүм булыуынса, 2020 йылдан республиканың баш ҡалаһы ошо маҡтаулы исемде йөрөтә. Ул Рәсәй Федерацияһының Бөйөк Ватан һуғышында халҡы хәрби һәм ябай тормош продукцияһын өҙлөкһөҙ етештергән, киң ҡоласлы хеҙмәт ҡаһарманлығы һәм фиҙаҡәрлеге менән Бөйөк Еңеүгә ҙур өлөш индергән ҡалаһына РФ Президенты Указы нигеҙендә бирелә. Был турала РФ Дәүләт Думаһы 2020 йылда закон да ҡабул итә. Әлеге ваҡытта дәүләттең 45 ҡалаһы, шул иҫәптән Екатеринбург, Ижевск, Иркутск, Ҡаҙан, Магнитогорск, Түбәнге Новгород, Новосибирск, Омск, Пермь, Һамар, Һарытау, Ульяновск, Силәбе, Ярославль ошо исемгә эйә.

Төбәк һәм муниципаль властар ҡаланың айырым статусын иҫәпкә алып, хәрби-тарихи һәм хеҙмәт мираҫын һаҡлау шулай уҡ ҡала халҡында, бигерәк тә йәштәрҙә, илһөйәрлек тәрбиәләү буйынса саралар-ҙы тормошҡа ашырыуҙы тәьмин итергә тейеш. 2021 йылда "Берҙәм Рәсәй" депутаттары инициативаһы буйынса махсус "Хеҙмәт фиҙаҡәрлеге ҡалаһы" почта маркалары серияһы булдырыла. Ошо көндәрҙә ҡулланылышҡа Өфөгә арналған маркалар ҙа сығарыла. Унда Еңеү паркында ҡуйылған Тыл хеҙмәтсәндәре һәйкәле фрагменты төшөрөлгән. Марка менән бергә "Өфө - хеҙмәт фиҙаҡәрлеге ҡалаһы" махсус почта штемпеле лә сығарыла һәм ул маркаларҙың ҡулланылышҡа сығыуының беренсе көнөндә генә маркаларға баҫыла.

ҠЫҪҠАСА

# ЗЫЯН ИТӘЛӘР

**Баш ҡалала контейнер майҙансыҡтарында вандаллыҡ һәм янғын осраҡтары йышая.** Ҡаты көнкүреш ҡалдыҡтары менән эшләү буйынса төбәк операторы мәғлүмәттәренә ярашлы, вандалдар 1,3 миллион һумдан ашыу зыян эшләгән. Былтыр 60 пластик контейнер яндырылыуы теркәлгән. Шулай уҡ билдәһеҙҙәр пластик контейнерҙарҙы урлай, һындыра. Һөҙөмтәлә сүп-сар йыйыу майҙансыҡтарын яңыртыу эше йыл бара йәки мәжбүри рәүештә кисектерелә, сөнки бер контейнер 15-20 мең һум тора. Ошо йәһәттән Өфө ҡалаһы хакимиәте баш ҡала халҡын ҡала милкенә һаҡсыл булырға саҡыра һәм һәр зыян өсөн административ штраф ҡаралыуы тураһында иҫкәртә. Ә инде ут төртөү йәки урлау өсөн хатта 5 йылға тиклем иректән мәхрүм итеү ҙә ҡаралған. Бынан тыш, хаслыҡ ҡылыусы зыянды тулыһынса ҡапларға тейеш.

✔ **Рәсәйҙең Һаулыҡ һаҡлау министрлығы яңы коронавирус инфекцияһын иҫкәртеү, диагностикалау һәм дауалау буйынса ваҡытлыса методик тәҡдимдәрҙең 16-сы версияһын раҫланы. Уны Рәсәйҙең инфекция ауырыуҙары өлкәһендәге төп эксперттары әҙерләгән.** Методик тәҡдимдәрҙең яңы версияһына бер нисә өҫтәмә индерелгән. SARS-CoV-2 вирусының генетик варианттарын һәм уларҙың үҙенсәлектәре тураһындағы мәғлүмәтте иҫәпкә алып, "Этиология, патогенез һәм патоморфология" бүлегендәге мәғлүмәт актуалләштерелгән. Яңыртылған документ шулай уҡ Рәсәй Федерацияһындағы яңы вакцина препараттары хаҡында мәғлүмәт менән тулыландырылған. "Пациенттарҙың үҙенсәлекле төркөмдәре" бүлеге шәкәр диабеты менән сирләгән, психикаһы боҙолған пациенттарҙы дауалау тураһында мәғлүмәт менән тулыландырылған, тип хәбәр итте Башҡортостан Һаулыҡ һаҡлау министрлығының матбуғат хеҙмәте.

✔ **Республикала йөклө ҡатын-ҡыҙҙар һәм пенсия алды йәшендәгеләр бушлай юридик ярҙам алыу мөмкинлегенә эйә.** Башҡортостан Дәүләт Йыйылышы бушлай юридик ярҙам алырға хоҡуҡлы граждандарҙың исемлеген киңәйтә. "Башҡортостан Республикаһында бушлай юридик ярҙам тураһында" республика законының 5-се һәм 8-се статьяларына тейешле үҙгәрештәр индереү ҡарала. Закон проектын ҡабул иткәндән һуң пенсия алды йәшендәгеләр (пенсияға тиклем 5 йыл алдан), шулай уҡ йөклө ҡатын-ҡыҙҙар һәм өс йәшкәсә балаһы булған ҡатындар бушлай юридик ярҙам алырға мөмкин. Башҡортостан Республикаһы Дәүләт Йыйылышы рәйесе Константин Толкачев һыҙҙаренсә, документтар тултырғанда, судҡа мөрәжәғәт иткәндә профессиональ юристың ярҙамы талап ителеүе һәм ошо йәһәттән Башҡортостан Республикаһының Дәүләт юридик бюроһынан профессиональ юристың ярҙам итә алыуы ихтимал. Юридик хеҙмәттәр бюджет аҡсаһы иҫәбенә түләнә.

✔ **Башҡортостандың Сауҙа министрлығы башлығы Алексей Гусев әйтеүенсә, легаль булмаған алкоголгә ҡаршы көрәш үҙенең һөҙөмтәһен бирә.** "Республиканың Сауҙа министрлығы Башҡортостан буйынса Эске эштәр министрлығы менән берлектә алкоголь баҙарын көйләү буйынса эш алып бара. Әммә бында мәсьәләне уйлап хәл итергә кәрәк булыуын яҡшы аңлайбыҙ. Бер яҡтан, алкоголь баҙары түләнгән акциздарҙан республика бюджетын тулыландыра. Икенсе яҡтан - был продукция кеше организмына зыян килтерә. Ныҡ уйланған сәйәсәт кенә беҙгә республика бюджетына акциздарҙан килгән килемде кәметмәйсә лә һуңғы бер нисә йылда үлем осраҡтарын әҙәйтергә булышлыҡ итте. Был эште артабан да дауам итәсәкбеҙ", - ти ул. 2018 йылдан Башҡортостанда суррогат алкоголь менән үлемесле ағыуланыусылар һанын дүрт тапҡырға аҙайтыуға өлгәшелде. Әгәр дурт йыл элек республикала унан 211 кеше вафат булһа, 2021 йылда был һан 57 кеше тәшкил итте.

# Х А Л Ы Ҡ   Д А У А Һ Ы



**Был рубрикала баҫылған киңәштәрҙе ҡулланыр алдынан мотлаҡ табип менән һөйләшергә, аныҡ диагноз ҡуйырға, үләндәргә аллергия юҡлығын тикшерергә кәрәклекте онотмағыҙ.**

## Ҡоро йүтәл

❖ Грипп һәм ОРЗ эҙемтәһендә барлыҡҡа килгән ҡоро йүтәл булғанда тын алыу органдарының лайлалы тиресәһенең һиҙеүсәнлеге арта. Саҡ ҡына берәй еҫ, саң йәки һыуыҡ һауа ҡуҙғытыуынан кеше йүтәләй башлай. Шул уҡ ваҡытта үпкәне тынлап ҡарағанда барыһы яҡшы кеүек. Был осраҡта тын юлдарындағы лайлалы тиресәнең һиҙеүсәнлеген кәметергә кәрәк. Бының өсөн 1 өлөш ҡара торма һутына 2 өлөш бал ҡушып, 3-5 көн дауамында көнөнә 3-4 тапҡыр 1-әр ҡалаҡ ашарға.

❖ Һаҙанаҡ (багульник болотный), ҡарағай бөрөһө, һары ҡандала үләне (донник лекарственный) һәм кейәү үләнен (чабрец) бер тигеҙ өлөштә алырға. Йыйылманың 1 ҡалағына 1 стакан ҡайнар һыу ҡойоп, ҡапҡас ябып 4 сәғәт төнәтергә һәм һөҙөргә. Ашарҙан алда 1-әр ҡалаҡ эсергә.

❖ 50 грамм бөтнөк япрағы, 20 грамм декоратив пион сәскәһе, 20 грамм киптекәр (сушеница) сәскәһе, 10 грамм лаванда (колосковая) үләнен бергә ҡушырға. Йыйылманың 20 граммна 1/2 литр ҡайнар һыу ҡойорға, өҫтөн ҡаплап 2 сәғәт төнәтергә һәм һөҙөргә. Ҡаты ҡоро йүтәл булғанда көнөнә 1-2 стакан эсергә.

## Бөйәр

❖ Бөйәр ауырыуҙарынан ҡара көртмәле файҙалы. Унан һалҡын һәм йылы төнәтмәләр яһарға була. Һалҡын төнәтмә өсөн 2 ҡалаҡ ваҡланған көртмәлегә 1 стакан ҡайнатып һыуытылған һыу ҡойорға һәм төнгөлөккә ҡалдырырға (8 сәғәткә). Иртәнсәк һөҙөргә һәм ашарҙан алда көнөнә 4 тапҡыр сирек стакан эсергә, һуңғыһын - йоҡлар алдынан. Ә бына йылы төнәтмәгә 1 ҡалаҡ ваҡланған ҡара көртмәлегә (яңыһы ла, киптерелгәне лә ярай) 1 стакан ҡайнар һыу ҡойоп, 2 сәғәт төнәтергә. Шунан һөҙөргә һәм көнөнә 4 тапҡыр сирек стакан эсергә.

## Ҡайын

❖ Күҙҙәр шешенгәндә бер ҡалаҡ яңы ҡайын япрағына 1 стакан ҡайнатып һыуытылған һыу ҡойоп, 8 сәғәт төнәтергә. Сылатҡыстар яһарға.

**Ғәлиә ШӘМСИЕВА әҙерләне.**

✓ *Милек хужаһы фатирҙа балиғ булмаған баланың өлөшө булған осраҡта бер килешеүҙе лә опека һәм попечителлек идаралығы менән нотариус ҡатнашыуынан тыш эшләй алмай.*



*ЙОЛАҢДАН ЙҮН ТАП!*



# АҒАС ҺАУЫТ-ҺАБА

Урал буйының көньяғында Ыҡ һәм Һүрән йылғалары буйында йәйпәк һәм киң ижау-туҫтаҡтар ҡулланғандар, уларҙың ситтәре ҡалын, һалынҡы итеп, ә төбө ялпаҡ итеп эшләнгән. Был ижауҙар менән ҡымыҙ эскәндәр. Уларҙың тотҡаһы ҡыҫҡа ғына булған, ҡайһы бер осраҡта хатта сығып торған бәләкәй генә дүңгәләк рәүешендә эшләнгән. Тотҡа һырланға осраҡта, уны бер аҙ күтәреберәк, арҡырыға эшләгәндәр. Киҫкен бөгөлөп киткән урынынан аҫта бер йәки ике тишек һәм сығынты һырланған. Ейәнсура районы Бикбау ауылының мәктәп музейында 1970 йылда беҙгә күтәренке һырлы ситле, өҫкө өлөшө бөгөлөп тотҡа-таяу хасил иткән ижау күрһәттеләр. Зауыҡлы орнаменталь композиция оҙонса һәм йомро һырҙарҙан торған, шулай уҡ парлы дүңгәләктәр менән биҙәлгән булған. Ике дүңгәләк ижау эсенә һалынып төшөп торған. Үҙенсәлекле һәм ниндәй формала булыуҙарына ҡарамаҫтан, бөтә тасуирланған ижауҙарҙың, Урал аръяғында кеүек үк, ҡош башын хәтерләткән детале булған.

Бейек тауҙар араһында таралып ултырған ауылдарҙа осраған ижауҙар ифрат төрлө. Улар ҡайын урмандары булған ерҙә генә эшләнгән. Был кәсеп Белорет районында Ағиҙел йылғаһы үрендә (Мәхмүт, Байһаҡал ауылдары) һәм Ағиҙел менән Инйәр араһында (Ҡарталы, Ҡоҙғон-Әхмәр ауылдары), Бөрйән районының көнсығышында (Ҡолғона, Килдеғол, Әбделмәмбәт, Байназар, Иҫке Монасип һ.б.) үҫешкән. 1912 йылда Байназар ауылында С.И. Руденко музейға бер нисә ижау һатып алған. Береһе бәләкәй, түңәрәк төплө һәм төҙ оҙон тотҡаһы ҡатмарлы семәрле булған: тишек-күҙле һәм суҡышлы ҡош башы кикрек һәм ярым ай менән осланған; был деталдәр ишмә биҙәк ярҙамында тоташып торған. Тотҡаһы төбөндә оя биҙәкте хасил иткән түңәрәктәр һырланған. Икенсе ижауҙың һырлы биҙәге ситтәренән үк башланған. Һөҙәк урынлашҡан киң тотҡаһында ярым ай рәүешендә ырғағы булған. Һырҙар һәм тотҡаһы төбөндәге нәзәкәтле таяуҙары булмаһа, ижау һалмаҡ ҡына күренер ине.



*Ҡымыҙ ижауҙары: 1,2 - Баймаҡ районы Күсей ауылы; 3 - Ҡурған өлкәһе Сафакүл районы Мырҙабай ауылы; 4 - Бөрйән районы Байназар ауылы; 5, 6 - Ейәнсура районы Бикбау ауылы (1,2 - 1958 йылғы экспедиция; 3,4 - РЭМ фондынан; 5,6 - 1970 йылғы экспедиция). Рәссамы В.М. Шутова*

**Светлана ШИТОВА.**
**"Башҡорттарҙа ағас семәрләү һәм биҙәк төшөрөү" китабынан.**

*БЕЛМӘҺӘҢ - БЕЛ!*

# ФАТИР АЛҒАНДА...

## быңдай хәлдәр ҙә булғылай



**Балиғ булмағандар исемендә булған фатирҙы һатып алыуҙың бер нисә үҙенсәлеге бар. Был осраҡта һатыу-һатып алыу килешеүенә ҡул ҡуйыу оҙағыраҡ ваҡыт талап итеүен иҫтә тотоғоҙ.**

РФ Граждандар кодексына ярашлы, балиғ булмағандар рәтенә 14 йәшкә тиклем һәм 14 йәштән алып 18-гә тиклемгеләр ҡарай. Тәүгеләре исеменән килешеү төҙөү уның ата-әсәһе йәки башҡа законлы вәкиле тарафынан башҡарыла. Икенсе төркөмгә ингәндәр иһә граждан-лыҡ-хоҡуҡи килешеүҙәр төҙөү барышында күберәк хоҡуҡҡа эйә, йәғни үҙаллы килешеү төҙөргә, документтарға ҡул ҡуйырға һәм башҡа процестарҙа ҡатнаша ала. Ләкин быларҙың барыһы ла тик ата-әсәһенең йәки башҡа законлы вәкилдәренең яҙма рөхсәте менән генә башҡарыла.

Фатир бала милке булып иҫәпләнгән осраҡта, һатып алыусы өсөн ниндәйҙер кимәлдә хәүефле булһа, һатыусы иңенә иһә өҫтәмә йөкләмәләр һалына. Шуға күрә бындай килешеү төҙөр алдынан бөтә тейешле документтарҙы ентекле тикшереү мотлаҡ.

Һатып алыусы, алынасаҡ фатирға балиғ булмағандарҙың ниндәй ҙә булһа мөнәсәбәте бармы-юҡмы икәнлеген асыҡлау өсөн Күсемһеҙ милектең берҙәм дәүләт теркәүенән күптән түгел генә алынған выпискаһын, объектты алыу хоҡуғын күрһәткән документтарҙы (һатыу-һатып алыу, бүләк итеү килешеүҙәре, һ.б.) тикшерергә тейеш. Выписканы Күп функциялы үҙәктә йәки Росреестрҙа заказ биреп алырға мөмкин. Балиғ булмағандар ҡатнашлығындағы килешеүҙе теркәр өсөн ғариза һәм башҡа мотлаҡ ҡағыҙҙар менән бер рәттән, түбәндәге документтар кәрәк буласаҡ:

- баланың законлы вәкилдәренең вәкәләттәрен иҫбатлаусы документ;

- 14 йәштән 18-гә тиклемге балиғ булмағандың милкен, законлы вәкилдәренең ризалығынан тыш, үҙаллы һата алыуы тураһындағы документ (балиғ булмағандың тулыһынса хоҡуҡҡа һәләтлелеген (дееспособный) раҫлаусы суд йәки опека һәм попечителлек буйынса идаралыҡ ҡарары (эмансипированный);

- балиғ булмаған менән никахҡа инеү танытмаһы;

- законлы вәкилдәренең килешеү төҙөүгә яҙма ризалығы;

- 14 йәше тулмағандар өсөн опека һәм попечителлек идаралығының балиғ булмаусының законлы вәкилдәренә милекте һатыуға рөхсәте;

- ошо уҡ идаралыҡтың 14 йәштән 18-гә тиклемге балаға законлы вәкилдәренең уға (балаға) милек менән үҙенә идара итергә рөхсәт итеүе.

Шулай уҡ фатирҙы һатып алғанда Әсәлек капиталы ҡулланылғанлығын дә белешергә кәрәк, сөнки был осраҡта фатирҙа мотлаҡ ғаиләнең һәр ағзаһына өлөш бүленергә тейеш. Ҡайһы саҡта фатир хужалары ошо хаҡта онотоп (йәки маҡсатлы рәүештә), өлөш бүлмәйенсә фатирҙы һатыуға ҡуя. Бындай килешеү суд ҡарарына ярашлы ғәмәлдән сығарыла. Фатир һатыусынан мотлаҡ рәүештә Әсәлек капиталының ҡулланылмауын дәлилләүсе документтарҙы - уның ипотекаһы булған банктан йәки Пенсия фондынан белешмә - талап итергә кәрәк.

Милек хужаһы фатирҙа балиғ булмаған баланың өлөшө булған осраҡта бер килешеүҙе лә опека һәм попечителлек идаралығы менән нотариус ҡатнашыуынан тыш эшләй алмай. Фатирҙы һатырға ҡуйыр алдынан баланың вәкилдәре идаралыҡҡа мөрәжәғәт итеп, килешеү төҙөүгә рөхсәт алырға бурыслы. Әлеге документта ике ай эсендә балаға икенсе күсемһеҙ милектә өлөш бүленәсәге тураһында теркәлә. Балиғ булмаған баланың икенсе милектә хужа итеп теркәлеүе йәки уға өлөш бүленеүе тураһындағы выписка идаралыҡҡа килтерелә. Выпискала мотлаҡ яңы фатирҙың адресы күрһәтелергә тейеш. Әгәр ҙә ике ай эсендә ошо эш атҡарылмаһа, идаралыҡ булып үткән килешеүҙе тарҡатыу тураһында процесс башлай.

Яңы фатир алған саҡта һатыусының ситтә балалары йәки башҡа вариҫтары булыу мөмкинлеген күҙ уңынан ысҡындырырға ярамай. Әйтергә кәрәк, һатыусы хатта үҙе лә был хаҡта белмәҫкә мөмкин. Шуға күрә фатир һатып алыусының мәнфәғәтен һаҡлау маҡсатында уның менән һатыусы араһында, әгәр ҙә киләсәктә ошондай кешеләр барлыҡҡа килһә, һатыусы улар менән бөтә финанс мәсьәләләрен үҙе хәл итәсәген күҙаллаған документ төҙөлә.

*ҺОРАУ - ЯУАП*



# АЛИМЕНТ ТҮЛӘМӘНЕМ

**Тәүге никахымда тыуған балаға алиментты бер ниндәй рәсмиләштереүһеҙ, элекке ҡатыным менән килешеү нигеҙендә билдәләнгән бер суммала түләп барҙым. Хәҙер килеп ул был сумманың бик әҙ булыуына дәғүә белдерҙе. Ул мин айырылышҡандан һуң балаға бөтөнләй алимент түләмәгән тип судҡа мөрәжәғәт итә аламы?**

- Теоретик яҡтан ҡарағанда, әлбиттә, мөмкин. Быны өсөн судта элекке ҡатынығыҙға үткән осор өсөн һеҙҙең тарафтан (әйткәндәй, был осор үҙ эсенә өс йыл ваҡытты ғына алырға мөмкин) бер ниндәй ҙә аҡсалата күсереү йәки балаға башҡа төрлө ярҙам күрһәтелмәгәнлеген иҫбат итергә кәрәк буласаҡ. Шуға күрә, эш судҡа ҡалһа, алдан уҡ әҙер булығыҙ һәм аҡсалата ярҙам итеүегеҙҙе дәлилләүсе иҫбатлауҙар туплап алып барығыҙ. Улар шаһиттарҙың күрһәтмәләре, банктан алынған йәки ниндәйҙер хеҙмәт, әйбер, кейем өсөн һеҙҙең түләү ҡағыҙҙарығыҙ, элекке ҡатынығыҙ менән ошо турала яҙышҡан хәбәрҙәрегеҙ һәм башҡалар булырға мөмкин.

# ИДАРА ИТЕҮСЕГӘ...

**Өфөлә күп ҡатлы йорттарҙың береһендә йәшәйем. Тотош йортобоҙ менән Идара итеүсе компанияһына һорауҙарыбыҙ, дәғүәләребеҙ күп. Ләкин улар беҙҙең бер һорауға ла, дәғүәгә лә яуап бирмәй һәм үҙ эштәрен теүәл үтәмәйҙәр. Уларға нисек тәъьир итеп була? Бәлки, ҡайҙалыр ялыу менән мөрәжәғәт итеү уларҙы беҙҙең менән иҫәпләшә башларға этәрер.**

- Теүәл, аныҡ итеп ялыу яҙып, урындағы дәүләт торлаҡ инспекцияһына мөрәжәғәт итегеҙ. Әгәр ҙә ялыу тотош йорт исеменән яҙылһа, тағы ла яҡшыраҡ. Унда Идара итеүсе компанияға ҡарата ниндәй дәғүәләрегеҙ бар икәнлеген тулыһынса күрһәтегеҙ, яҙғанығыҙҙы дәлилләү өсөн фотоһүрәттәр ҡушып бирегеҙ. Ялыуҙың күсермәһен шулай уҡ урындағы хакимиәт исеменә лә ебәрергә була.

**Гөлназ МАНАПОВА әҙерләне.**

✓ *Регинаның бөтә юғары наградалары ла башҡорттарҙы танытыу маҡсатында яуланды. Сөнки 20 йыл дауамында ошондай конкурста Башҡортостандан балалар араһында ҡатнашыусылар, айырыуса башҡорт ҡыҙыҡайҙары булмаған.*



# УН ЙӘШЛЕК ҺЫЛЫУҠАЙ...

## Башҡортостанды, башҡортлоҡто данлай

(Башы 1-се биттә).

**Төрлө кимәлдәге конкурстарҙа ҡатнашып, иң һылыуҙарҙың береһе булып танылған ҡыҙ һәм уның әсәһе матурлыҡ төшөнсәһенең асылын нисек аңлай?**

**Регина:** Матурлыҡ - ул һәр беребеҙҙең күңелендә йәшәй, ул күңелдәрҙе һауыҡтыра, таң ҡалдыра, кешеләргә ярҙам итә. Тормош үҙе үк бер матурлыҡ, тип аңлатып үҫтерәләр мине атай-әсәйем. Матур кешене яҡшы эштәре, яуаплылығы, алсаҡлығы, ҡыҙыҡһыныусанлығы буйынса танырға була, тип беләм. Минең өсөн бөтә туғандарым һәм, әлбиттә, тәү сиратта әсәйем матурлыҡ өлгөһө. Сөнки улар мин әле әйтеп киткән барлыҡ сифаттарға эйә, яҡшылар, алсаҡтар һәм ҡыйынлыҡтар килгәндә ярҙам күрһәтергә һәр саҡ әҙерҙәр. Үҙ-ара беҙ бик татыу һәм һәр нәмәгә яуаплылыҡ менән ҡарайбыҙ.

**Айгөл Тәфтизән ҡыҙы:** Регина ҡыҙыбыҙ бигерәк туған йәнле, был беҙҙең яҡындарыбыҙҙың күп балалы ғаиләләр булыуынан һәм тығыҙ аралашып йәшәүебеҙҙән киләлер. Мин матурлыҡтың асылын кешенең күңел донъяһы яҡшылыҡ, алсаҡлыҡ, мәрхәмәтлек менән тулы булыуында күрәм. Кешене һәр саҡ ошондай күркәм сифаттарына ҡарап баһалайым, ә инде тышҡы яҡтан да гүзәл булып, яҡшы уҡый һәм атай-әсәйенә, туғандарына ярҙамсыл, алдына маҡсат ҡуя белә икән, ижад итергә һәм халҡы өсөн тырышып йәшәгәндәрҙе бар яҡлап та камил тип беләм. Ирем менән балаларыбыҙҙы ошо инаныстарыбыҙға ярашлы тәрбиәләргә тырышабыҙ. Ниндәй өлкәлә уңыш ҡаҙанһаң да, халҡыңа файҙа килтерергә, уның аҫыл ул-ҡыҙы, туған ереңдең патриоты булырға тейешһең, тип өйрәтәбеҙ.

**Шундай кешенең өлгөһө тормошоғоҙҙа бармы?**

**Айгөл Тәфтизән ҡыҙы:** Бындай күркәм холоҡло кеше минең өсөн әсәйем, педагогик хеҙмәт ветераны Рита Булат ҡыҙы Юлмөхәмәтова. Нәҡ ул бала саҡтан Ватаныбыҙҙы һөйөргә, ярҙамсыл, намыҫлы, татыу булырға өйрәтеп үҫтерҙе. Нәҫелебеҙҙә быуындан-быуынға күсә килгән башҡорт теленә, мәҙәниәтенә, йолаларына тоғролоҡ тәрбиәләне. Бөгөн үҙ сиратыбыҙҙа балаларыбыҙға шундай өлгө күрһәтергә, аңдарына һалып үҫтерергә тырышабыҙ. Дөрөҫөн генә әйткәндә, Регинаның бөтә юғары наградалары ла башҡорттарҙы танытыу маҡсатында яуланды. Сөнки 20 йыл дауамында ошондай конкурста Башҡортостандан балалар араһында ҡатнашыусылар, айырыуса башҡорт ҡыҙыҡайҙары булмаған. Ойоштороусылар: "Һеҙҙең республиканан бөтөнләй ҡатнашмай торғайнылар, ҡапыл килеп сыҡтығыҙ ҙа, балҡынығыҙ", - тиҙәр. Ысынлап та шулай булды шул. Былтыр Регина тәү башлап "Башҡортостан гүзәле" конкурсының Гран-приһын яуланы, шунан Мәскәү ҡалаһында уҙғарылған бик абруйлы ярыштарҙа ҡатнашып, еңеп сыҡты, онлайн конкурстарҙа ла һынатманы. "Юная мисс Россия - 2022" гүзәллек конкурсында ла Гран-при алып, "Юная мисс Вселенная"ла ҡатнашты һәм унда ла жюри Регинаны юғары баһаланы.

Әйткәндәй, быға тиклем "Юная мисс Вселенная" Лакоста уҙғарылған булған, быйыл донъя хәлдәрен иҫәпкә алып, конкурсты Мәскәүҙә үткәрергә рөхсәт иткәндәр. Унда Беларусь, Ҡаҙағстан, Рәсәйҙең төрлө төбәктәренән һуңғы 2-3 йылда юғары кимәлдәге ярыштарҙа еңеүсе ҡыҙҙар ҡатнашты. Йәш буйынса дүрт төркөмгә бүленделәр, Регина үҙенең 10-14 йәшлектәр араһында еңде. Шулай уҡ уға "Russian Beauty 2022" матурлыҡ, мода һәм талант фестиваленең төп иҫтәлекле наградаларының береһе - Пьер Кардендың алтын миҙалы тапшырылды. Уны билдәле француз модельерының тыуыуына 100 йыл тулыуға арнап булдырғандар, Регинанан тыш, ул миҙалды тағы күренекле Рәсәй модельеры Вячеслав Зайцев, жюри рәйесе, мода тарихсыһы, "Модный приговор" телетапшырыуын алып барыусы Александр Васильев, тағы бер нисә модельерға һәм ҡатнашыусы ҡыҙҙарға бүләк иттеләр. Башҡортостанды һәм башҡорт ҡыҙҙарын данлау, ошо өлкәлә лә билдәле итеү маҡсатында тырыштыҡ инде.

**Бындай юғары кимәлдәге һылыуҡайҙар конкурсында ниндәй сифаттарға ҡарап баһалайҙар? Ул баһалар һинең матурлыҡ тураһындағы төшөнсәләреңдән айырыламы?**

**Регина:** Әлбиттә, бындай саралар ҙа күберәк тышҡы ҡиәфәткә, ҡыҙҙарҙың моделгә ҡуйылған талаптарға ярашлы баҫып йөрөүенә, үҙ-үҙен тотошона, кейемдәренә иғтибар итәләр. "Russian Beauty 2022" фестивалендә беҙ тәүҙә мода күрһәтергә тейеш дизайнерҙар командаларына бүленеп, репетициялар яһаныҡ, һуңынан милли кейем, спорт кейеме һәм кисәләр өсөн күлдәк кейеп сығырға ла өйрәндек. Милли кейем менән сығышта мин башҡорт күлдәге, кәзәки кейеп, иҙеү тағып, ҡушъяулыҡ ябынып сыҡтым һәм башҡорт бейеүҙәрендәге үҙебеҙгә хас хәрәкәттәр яһаным. Мода аҙналығының һуңғы көнөндә байрам табыны ойошторҙолар һәм еңеүселәрҙе шунда билдәләнеләр. Конкурстарҙа мин ярышташтар тураһында уйламайым. Минең категорияла ҡатнашҡан башҡа ҡыҙҙар 12-13 йәшлектәр ине, улар араһында мин йәшкә лә, буйға ла иң бәләйе булдым. Бындай ярышта еңеү өсөн яҡшы әҙерләнеп барырға һәм сәхнәлә һәр ваҡыт матур йылмайып йөрөргә кәрәк, артыҡ ауырлығы юҡ. Әйткәндәй, әсәйем менән беҙ ҡайҙа барһаҡ та Башҡортостандан иҫтәлекле сувенирҙар, башҡорт балын үҙебеҙ менән алабыҙ һәм үҙебеҙҙе шулай ҙа танытып йөрөйбөҙ.

**Айгөл Тәфтизән ҡыҙы:** Регина еңел әҙерләндем, еңел үтте, тип иҫәпләй, сөнки ул 5 йәшлек сағынан Фәйзи Ғәскәров исемендәге Дәүләт академия халыҡ бейеүҙәре ансамбле эргәһендәге балалар бейеү коллективында шөғөлләнә. Башҡа балалар кеүек, арыным, фотоға төшмәйем, тиеп мыжығаны ла юҡ. Бынан тыш, һәр конкурс алдынан уны еңмәгән осраҡта ла борсолмайбыҙ, күңел төшөнкөлөгөнә бирелмәйбеҙ, барыһы ла яҡшы буласаҡ, тип көйләйем.



Әлегә ҡыҙым бер ҙә һынатҡаны юҡ, еңеренә ышанмай ғына барһа ла, иң юғары һөҙөмтәгә өлгәшә лә ҡайта. Бейеү ансамблендәге һәм "Һомай" театр-дефилеһындағы педагогтары бик ярҙам итте, ҡыҙым белем алған М. Кәрим исемендәге 158-се Башҡорт гимназияһының коллективына ла оло рәхмәтлебеҙ. Һәр саранан тәжрибә туплап ҡайтабыҙ, тормош иптәшем беҙҙе "Башҡорттарҙы күтәрергә киттегеҙме?" тип, сираттағыһына оҙатып ҡала. "Донъя һылыуҡайы" һәм "Европа һылыуҡайы" конкурстарында ҡатнашһаҡ, йәш буйынса ҡатнаша алырлыҡ бүтән юғары кимәлдәге саралар ҡалманы инде хәҙер.

**Бындай конкурстар балаларға һәм уларҙың атай-әсәйҙәренә нимә өсөн кәрәк тип уйлайһығыҙ?**

**Регина:** Бала еңһә, ул шунда уҡ үҙ төбәгендә билдәле булып китә, уны күптәр таный. Әүҙем ҡатнашһаң, төрлө яҡтан килгән ҡыҙҙар араһынан дуҫтар табырға була. Мәҫәлән, мин был юлы Чебоксар ҡалаһынан килгән ҡыҙҙар менән танышып, дуҫлашып ҡайттым. Үҫкәс, хәтерләп һөйләргә матур иҫтәлектәр күп буласағы ла минең өсөн мөһим. Әлегә мин М. Кәрим исемендәге 158-се Башҡорт гимназияһында яҡшы уҡыйым, 5-се синыфҡа барасаҡмын. Класс старостаһы. Киләсәктә модель һөнәрен һайлағым да килә, бейеүсе йәки хореограф та булам тип хыялланам.

**Айгөл Тәфтизән ҡыҙы:** Былтыр "Мисс Останкино" конкурсында ҡатнашҡанда ҡыҙҙарын оҙатып килгән атай-әсәйҙәр өсөн оҫталыҡ дәресе ойошторолғайны. Шунда был өлкәләге белгестәр Регина кеүек үҙенсәлекле балалар замандаштары һәм халҡы өсөн нимәләр эшләргә, үрнәк булырға тейеш, тигәйнеләр. Ә бының өсөн Мәскәүгә килеп эҙләнеп йөрөргә кәрәкмәй, үҙең йәшәгән төбәктә эшләү мөһим булыуын да аңлаттылар. Беренсе ҡатнашҡан конкурста һәм һуңғыһында төшөрөлгән видеояҙмаларҙы, фотоларҙы сағыштырып ҡараһаң да Регинаны танырлыҡ түгел. Ул бер йыл эсендә кешеләр араһында үҙен тоторға өйрәнде, үҙенә ышанысы артҡаны ла күренеп тора, төрлө яҡлап үҫешер өсөн тырышып, түңәрәктәрҙә шөғөлләнә, мәктәптә лә яҡшы өлгәшә. Баланы дүрт йүнәлештә: модель оҫталығына, инглиз теленә, сәхнә телмәренә, йыр-моң һәм бейеү йәһәтенән үҫтерергә кәрәк. Профессиональ моделдәргә 17 йәштә бөтә мөмкинлектәр асыла башлай. Регина киләсәктә үҙе теләгән һөнәрҙе һайлар, әлегә уның һәләттәрен үҫтереү - төп маҡсатыбыҙ. Ул уҡыған гимназияла моделдәр түңәрәге асыу, һылыуҡай конкурстарына кейерлек балалар өсөн башҡорт кейемдәрен төрлөләндереп тегеү, балалар өсөн матур йөкмәткеле саралар ойоштороу йәһәтенән дә уй-ниәттәребеҙ байтаҡ.

Модель агентлыҡтарында шөғөлләнгән ҡыҙҙар арҡаһын төҙ тоторға, матур баҫып йөрөргә, зауыҡлы кейенергә, үҙен ҡарарға өйрәнәсәк. Гүзәллек конкурстарында ҡатнашҡан барыһы ла үҫкәс модель булып китә алмай, ҡыҙғанысҡа күрә. Әммә 7-8 йәшлек сағында шундай сараларҙа ҡатнашып өйрәнгән бала үҙ-үҙенә бикләнеп ҡалмай, һәләттәрен күрһәтергә һәм үҫтерергә өйрәнә. Байҙарҙың, аҡсалы кешеләрҙең генә ҡыҙҙары шундай юғары еңеүҙәргә өлгәшә ала, тип уйлау бик үк дөрөҫ түгеллеген үҙ миҫалыбыҙҙа асыҡланыҡ. Хәҙер ошо тәжрибәне башҡалар менән дә уртаҡлашабыҙ.

Бындай конкурстар баланы һауаландырып ебәрер, холоҡфиғелен насар яҡҡа үҙгәртер, тип хафаланыусылар ҙа барҙыр. Был инде һәр ғаиләләге тәрбиәнән килә. Күпме сараларҙа булырға тура килде, бөтә балалар ҙа эскерһеҙ, үҙҙәре ихлас теләп ҡатнашып йөрөй һәм тиҫтерҙәре менән алсаҡ аралашалар, тыйнаҡтар. Әммә ярыш тамамланғандан һуң шау-шыуҙы уларҙың атай-әсәйҙәре күтәрә, ҡыҙғанысҡа күрә, шундай йәмһеҙ ҡыланған өлкәндәр гел осрай. Шулай ҙа Регинаның еңеүенә ҡарата ризаһыҙлыҡ белдереп торғандары булманы, барыһы ла уның тәбиғи һылыулығына ғына түгел, эскерһеҙлегенә, алсаҡлығына һоҡланыуын белдерә. Ғәҙәттә, ҡыҙымдың ҡыйғас ҡара ҡашы стилистарҙы ла хайран ҡалдыра, ҡарайтып һыҙҙығыҙмы, тип юйырға тотоналар, йәки, ирендәренә ниҙер ҡаҙаттығыҙмы, тип тә шик белдерәләр. Беҙҙең башҡорт ҡыҙҙары тыумыштан шулай һылыу булыуын гел әйтә йөрөйөм.

**Әйткәндәй, Регина, башҡорт һылыуы ниндәй булырға тейеш тип уйлайһың?**

**Регина:** Ул тәү сиратта үҙенең тыуған телен яҡшы белергә, тышҡы ҡиәфәте лә, күңеле менән дә матур булырға тейеш. Башҡорт ҡыҙы мотлаҡ тыуған ерендә йәшәй, ҡайҙалыр ситкә сығып китмәй. Тәбиғи матурлығын һаҡларға һәм кешеләргә шундай үрнәк күрһәтергә тейеш, сәсен киҫеп, сағыу төҫкә буяп йөрөмәй. Алсаҡ йөҙлө, йылмайыусан, ярҙамсыл да ул башҡорт ҡыҙы. Мин шулай тип уйлайым.

**Айгөл Тәфтизән ҡыҙы:** Үҙемдең атай-әсәйемә лә, ҡайным менән ҡәйнәмә лә беҙҙе башҡорт рухлы итеп тәрбиәләүҙәренә рәхмәтлемен. Күрәһегеҙ, ошо ғына йәшенән олатай-өләсәйҙәренең: "Үҙ ереңдә хужа булып йәшә, ситкә сығып китмә", - тип әйтеүен ҡабатлап ултыра. Ҡала мөхитендә башҡорт телен өйрәтеп, башҡорт итеп тәрбиәләүе еңел түгел, тиһәләр ҙә, үҙебеҙсә көс һалабыҙ. Өс өлкән балам да балалар баҡсаһына тиклем тик башҡортса ғына һөйләште, әле өйҙә башҡортса аралашабыҙ, 11 айлыҡ кескәй һеңлеләренең теле башҡортса асылһын тип тырышабыҙ.

Тәрбиә ғаиләнән килә, шуға туған-тыумасаларҙан йыйып алған көнкүреш әйберҙәре, ҡаралдыларҙан торған бер музей ойошторор ҡуйырға йыйынам. Сөнки беҙҙә 200 йыллыҡ селтәрҙәр, ҡоштабаҡ, бер быуатлыҡ етен таҫтамал, кәрәсин шәме, ҡартәсәйемдән ҡалған үлсәү кеүек бик ҡыҙыҡлы ҡомартҡылар һаҡлана. Ҡайҙалыр мөйөштә ятмаһындар, балалар күреп үҫһен өсөн тотондом инде был эшкә. Иремдең дә, үҙемдең дә шәжәрәбеҙҙе күптән ентекләп төҙөп ҡуйҙым. Мин сығышым менән Әбйәлил районы Асҡар ауылынан, тамырҙарыбыҙ Сураш батырға барып тоташа. Ә ирем Ринат Мәләүез башҡорто. Туған тейеш кешеләргә бөтә Башҡортостан буйлап йөрөп, танышып сыҡтыҡ, үҙебеҙ ҙә, балаларыбыҙ ҙа аралашып йәшәйбеҙ.

**Һылыу ҡыҙ өйҙә атай-әсәһенә ярҙам итәме?**

**Айгөл Тәфтизән ҡыҙы:** Эйе, шөкөр. Регина һәм Роберт икәүләшеп кескәй һеңлеләрен әүрәтәләр, мәктәптә лә яҡшы өлгәшәләр. Өлкән улыбыҙ - студент, эшләп тә йөрөй. Һауыт-һаба йыуыу, өйҙө ипләү, тағы ла ниндәйҙер ҡулдарынан килгән эште атҡарыуға һис ҡаршылашып тормайҙар. Хатта ҡайһы саҡта компьютерҙа уйын да эләкмәй үҙҙәренә, уға ваҡыттары ҡалмай.

**Регина:** Тиҙҙән йәйге каникулға Мәләүезгә олатай-өләсәйгә барабыҙ. Унда ике туған апайым менән өләсәйҙең кәзәләрен яланға сығарып көтәсәкбеҙ. Өй йыйыштырышам, бәләкәй тыуғандарымды ҡарашам һәм улар менән уйнарға яратам. Яңы ғына әсәйемә ҡышҡылыҡҡа ełәк-емеш ҡайнатмалары эшләштем әле.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**"Ояһында ни күрһә, осҡанында шул булыр", тигән халыҡ һүҙҙәренең тәрән мәғәнәле булыуына хайран ҡалып тыңланым әсәй менән ҡыҙҙы. Ысынлап та, барыһы ла ғаиләләге тәрбиәгә һәм ундағы мөнәсәбәттәргә бәйле шул. Үҫмер генә сағында донъя кимәлендә билдәлелек яулаған был мөләйем ҡыҙҙың аңында әле үк ана ниндәй төшөнсәләр, ҡиммәттәр мөһим урын биләй. Йәш быуындың күңелендә матурлыҡ төшөнсәһе милли үҙенсәлектәребеҙгә ярашлы формалашыуы, үҙ халҡының мәнфәғәтен ҡайғыртыр шәхес булып үҫеүе бөгөн атай-әсәй, олатай-өләсәй рәтендәгеләрҙең аңлы һәм вайымлы булыуындалыр.**

**Сәриә ҒАРИПОВА**
**әңгәмәләште.**

УЙЛЫҒА - УЙ

# НУРЛЫ ДОНЪЯ СЕРЕ...

## үҙебеҙҙә ул!



**Ошо фани донъябыҙҙа ғәжәп матур бер күренеш бар - ул да булһа, һыҙылып ҡына таң атыуылыр. Илаһи тәбиғәтебеҙҙең ошо мәлен һоҡланып та, илһамланып та ҡарап-күҙәтеп тормаған кеше һирәктер ул. Әле яңы ғына тоҫмаллана башлаған офоҡ тәүҙә аҙ ғына алһыулана башлай, шунан инде иртәнге шәфәҡ ҡыҙыллығы ҡуйыра барып, күк менән ер тоташҡан көнсығыш тарафын рәссамдарҙа ла булмаған буяу-төҫтәргә мансый. Ошо иҫ китмәле тантаналы үә илаһи күк нурҙары балҡышында еребеҙҙә өр-яңы көн тыуа, һәм мәңгелек тип аталған йыһан хәрәкәтенең ошо микроскопик бер мәлендә беҙҙең йөнебеҙ ҙә яңырғандай, яңынан тыуғандай булалыр ул.**

Романтик хисле шағирҙар күңелендә тәбиғәттең ошо илаһи күренеше илһам уты ҡабындырып, гүзәл шиғри образдар тыуҙыралыр. Башҡорт һүҙе тылсымына эйә булған шағирыбыҙ Ғәлимов Сәләм дә ошо илаһи мәлде бына ни рәүешле күҙ алдына баҫтыра алған:

*"Тын күлдәргә төшкән аҡкошмо ни:*
*Уйһыуҙарҙа ята аҡ томан.*
*Ниндәй йәнле иртә!*
*Бына бер саҡ,*
*Тау биттәрен солғап яҡтыға,*
*Ҡояш сыға башлай, нурҙарына*
*Ем-ем итә Урал таштары.*
*Иртәнге ел, әкрен генә өрөп,*
*Һыйпап үтә үлән баштарын..."*

Ҡабатланмаҫ таң картинаһы нурҙарҙан хасил була. Йыһан һәм уның Ҡош Юлы тип аталған галактикаһы барлыҡҡа килгән ваҡыт төпкөлдәренән бирле Ер шарыбыҙ Ҡояш исемле йондоҙобоҙ нурҙарында ҡойона. Ҡояшыбыҙ булмаһа, уның барса тереклеккә көс-ҡеүәт биреүсе нурҙары булмаһа, еребеҙҙә тормош тигән ысынбарлыҡҡа ла урын булмаҫ ине. Кешелек ошо яҡты бына тойолған хәҡиҡәткә күптән күнеккән инде, быға ниндәйҙер айырым иғтибар биреүсе лә юҡҡа иҫәп. Әммә телебеҙҙә изге Нур һүҙе бар, ошо һүҙҙең асылында әле үҙебеҙ ахырынаса төшөнөп тә бөтә алмаған ғилләә барҙыр кеүек тойола миңә.

Бына күҙ алдына килтереп ҡарайыҡ: йыһан киңлектәрендә бер генә секундҡа булһа ла бер ниндәй ҙә нур ҡалмаһа, бар донъя шундуҡ шомло ҡараңғылыҡҡа сумыр ине. Ғөмүмән, әгәр ҙә мәгәр Ахырызаман тигәнең кеше аңы тарафынан хасил ителгән уйҙырма булмаһа, уны йыһан нурҙарының тамам һүнеүе итеп күҙаллап булалыр, тим.

Йәнә бына тағы ла бер ҡыҙыҡлы мәғлүмәт. Муса бәйғәмбәрҙең Библияға инеш рәүешендә индерелгән "Булмыш" ("Бытие") китабының башында уҡ былай тип әйтелә: "2. Ер ҙә буш ине һәм күренмәне, һәм төпһөҙлөк өҫтөндә ҡараңғылыҡ ине, һәм Аллаһ Рухы һыуҙан өҫтә йөрөнө. 3. Һәм Аллаһ әйтте: яҡтылыҡ булһын әйҙә. Һәм яҡтылыҡ пәйҙә булды".

Ысынлап та, ҡояш нурҙары ерҙәге яҡтылыҡтың төп сығанағы, ошо нурҙар Ер шарына сама менән 150 миллион км алыҫлыҡтан килеп етеп, ерҙең ҡояшҡа ҡараған яғын туҡтауһыҙ яҡтыртып һәм йылытып тора. Күҙҙәребеҙ күрә алған ҡояш нурҙары билдәле бер оҙонлоҡтағы электромагнит тулҡындарҙан хасил булған нурланыш ул. Әммә беҙ ҡояш нурланышының ультрафиолет һәм инфаҡыҙыл өлөштәрен күреү һәләтенә эйә түгелбеҙ. Әйткәндәй, беҙгә, кешеләргә, шулай уҡ башҡа ҡайһы бер тере организмдарға яҡты донъяны күрә алыу, уның барса нескәлектәрендә һәм сифаттарында айыра алыу мөмкинлеген тәьмин итеүсе иҫ китмәле камил физик-неврологик аппарат - күреү анализаторы бирелгән. Шуныһы ерҙә йәшәй алыу мөмкин булмаҫ ине.

Яҡты, нурлы тышҡы донъя беҙҙең эске халәтебеҙҙе - аңыбыҙҙы, хис-кисерештәребеҙҙе, үҙебеҙҙе уратып алған барса мөхиттең сағылышы булған күңел донъяһын да бар итә. Әммә беҙ йәшәйешебеҙҙә йыш ҡына парадоксаль бер күренешкә иғтибар итергә мәжбүрбеҙ - тышҡы донъя, тәбиғәт нисек кенә нурлы үә гүзәл булмаһын, ошо тәбиғи мөхиттә, барыһы өсөн дә уртаҡ булған шарттарҙа, бәғзе бер әҙәм балаларының эске торошо нурһыҙ, иләмһеҙ ҡалып, башҡалар өсөн үтә хәүефле булыуы бар.

Әлбиттә, әгәр йәмғиәттә, ниндәйҙер бер дәүләттә кешелеклелек сифаттары инҡар ителә ҡалһа, ошо ерлектә ҡара эсле әҙәмдәр һаны бермә-бер күбәйә барасаҡ. Ҡотһоҙ, яуыз, яман кешеләрҙе лә тыуҙыра ошондай мөхит. Быны иң асыҡ һәм фәһемле миҫалы сифатында фашистик идеология хөкөм һөргән Германия дәүләтен күрһәтеп була.

Уйлай китһәң, барса рухи донъябыҙҙың да нурҙарҙан хасил булыуына инанырға булалыр. Әммә был нурҙар, күҙҙәребеҙ күрә алған тышҡы нурҙарҙан айырмалы, башҡа бер сифаттарға эйә, тип һыҡымта яһарға ла була. Мейе эшмәкәрлеге ярҙамында фекерләй алыуыбыҙҙы ла шул уҡ эске нурланыш рәүешендә тәфсирләй-аңлата алһаҡ, фекерҙәребеҙҙең булмыш-тыумышына ла шул уҡ нур тәғлимәте аша тәрәнерәк һәм аныҡраҡ төшөнә алыр инек.

Уға ҡалһа, әҙәм балаһына бирелгән һүҙ ҡеүәһе - телмәребеҙ ҙә шул уҡ нур сығанаҡлы икәненә ышанып була. Һәр бер һүҙебеҙҙең уйыбыҙҙа ғына яралғаны ла, тауышыбыҙ аша яңғырағаны ла, ҡағыҙ битенә йә иһә компьютер мониторы экранына теркәлгәне лә асылында йөнебеҙҙә күҙгә күренмәҫ бер нур булып ҡабынала ул. Был, әлбиттә, минең шәхси фаразым, әммә фән донъяһында юғары абруй ҡаҙанған байтаҡ ҡына ғалимдар донъяның асылын нур-тулҡын тәғлимәте аша аңлатырға тырыша.

Күптән түгел миңә Америка нейрохирургы, үтә һирәк осрай торған менингит сиренә тарып, бик күп көндәр дауамында дауаханала иҫһеҙ-һушһыҙ ятҡан Александр Эбендың "Ожмахҡа сәйәхәт" тигән үтә фәһемле яҙмаларын уҡырға насип булды. Юғары белемле һәм квалификациялы нейрохирург һәм ғалим үҙе кисергән ауыр сиргә тиклем барса ҡараштарының материалистик рухта булып, ысынбарлыҡта үҙен атеист итеп һанауы хаҡында яҙа. Әммә ауырып, мәрткә киткәс (ул клиникала тик яһалма тын алдырыу һәм туҡландырыу аша тере хәлдә тотола), ул ошо халәттә ятҡан сағында низәр кисергәне һәм күргәне хаҡында ҡабаттан аңына килеп, госпиталдән сыҡҡандан һуң китап яҙа. Ҡыҫҡаса әйткәндә, ул комала ятҡан мәлендә ниндәйҙер элек үҙе күрмәгән-белмәгән донъяла сәйәхәт итә. Уны хатта Аллаһының тәйәге булған иң юғары йыһан түбәһенә алып баралар. А.Эбен яҙыуынса, ул тәйәк ситтән ҡарағанда йыһан төпкөлөндәге дөм-ҡараңғы бер арауыҡ кеүек күренә икән (ошо урында астрономдарҙың "ҡара тишегә" иҫкә төшә), ә уның үҙен ошо ҡараңғы тәйәктән эсенә алып ингәс, ул күҙ ҡамаштырғыс нурлы, яп-яҡты бер мөхиткә килеп ингәндәрен тоя. Ошо урын тик нурҙан ғына хасил икән. Ошо яҙмалар миңә Хоҙайҙың асылы нурҙан хасил булыуы хаҡындағы ҡарашҡа тура килеүен раҫлағандай тойолдо.

Иғтибарға алһаң, Ҡөрьән-Кәримдә лә ошо уҡ фекер хәҡиҡәткә тиң итеп һүрәтләнә. Ән-Нур сүрәһенең 35-се аятында ошо хаҡта бына низәр әйтелгән: "Аллаһ - Күктәр менән Ерҙең нуры. Уның нуры мейес соҡалтаһындағы кеүек. Унда шәм яна, шәме быяла эсендә, быялаһы ынйы йондоҙо һымаҡ. Ул (шәм) мөбәрәк зәйтүн ағасынан тоҡана, ә ағасы көнсығыштыҡы ла, көнбайыштыҡы ла түгел. Уның майы ут теймәҫ борон тоҡанырға тора. Нур өҫтөнә нур! Аллаһ Үҙ нурына теләгән кешеһенә юл күрһәтә. Кешеләргә Аллаһ миҫал килтерә. Аллаһ бөтә нәмәне белә!"

Ошо юлдарҙы уҡыған замандашыбыҙ быны бер әкиәт кеүек итеп ҡабул итмәһен ине. Кешелеккә еткерелгән барлыҡ изге китаптар уғата образлы, заманына ярашлы телдә яҙылғанын онотторға ярамаҫ ине. Дөрөҫөрәге, Библияның да, Ҡөрьән-Кәримдең дә теле ябай ғына яҙманан ғибәрәт түгелдер, сөнки ошо тәғлимәттең асылы билдәле бер код менән бирелгәнгә оҡшаған. Тик ошо кодты ахырынаса аңлай алғанда ғына был изге яҙмаларҙың ысын маҡсаты һәм тәғәйенләнеше тулыһынса асыҡланыр ине. Әле иҫкә алынған Ән-Нур сүрәһендәге Аллаһ тоҡандырған шәм үҙемә шәхсән шул уҡ кешелек тик XIX быуат аҙағында ғына тоҡандыра алған электр лампочкаһына оҡшаған кеүек тойола. Әммә ошо тәғлимәттең асылы бар кешегә лә берҙәй асылмай, күрәһең. Шул уҡ Ән-Нур сүрәһенең 40-сы аятында ла әйтелгән бит: "Аллаһ нур бирмәгән кешегә нур булмаҫ!"

Халҡыбыҙҙа нур төшөнсәһе кеше өсөн бик әһәмиәтле һаналған ҡиммәттәр иҫәбенә инә. Башҡорт исемдәре араһында да нур һүҙе ингәндәренең күп булыуы ла ошо фекерҙе раҫлап тора. Беҙҙә иң яратҡан кешеңә "Күҙ нурым!" тип өндәшеү, алсаҡ кешене "нурлы йөҙлө" тип нарыҡлау, телебеҙҙә "өмөт нуры", "нурлы йән", "изгелек нуры" кеүек һүҙбәйләнештәр булыуы нурлы башҡорт донъяһының бер гүзәл сағылышы булып торалыр ул.

Һәр кемебеҙ ошо йәшәйешебеҙҙе йәмләрлек тормош ҡора ала, быны өсөн бары тик күңелең нурҙарын эргә-тирәңдәгеләргә мулыраҡ өләшә алыу фарыҙ. Изге ниәттәребеҙҙән, гүзәл хистәребеҙҙән, файҙалы ғәмәлдәребеҙҙән, үҙ ҡулдарыбыҙ үә аҡылыбыҙ менән булдырылған ҡиммәттәрҙән хасил була нурлы донъябыҙ. Шәхси тормошобоҙ ҙа, ижтимағи мөхитебеҙ ҙә яҡтыраҡ үә нурлыраҡ булһын тиһәк, аламалыҡтарҙан арынып, яҡшылыҡҡа табынып, иманыбыҙ юлдашлығында йәшәргә ынтылайыҡ, туғандар!

**Вәлиәхмәт БӘҘРЕТДИНОВ.**

*✓ Янындағы сибәркәйҙең дә ҡулымды ҡыҫыуын теләгәйнем, тик, ни өсөндөр, быны эшләмәне. Уның ҡарауы, матур итеп йылмайҙы... Беҙҙең ауылға эшкә ебәрелгән мәктәп директорын тәү күргәс үк, шул ҡыҙҙы таныным.*




Камила боролдо ла ире яғына атланы. Улар күҙҙән юғалғансы, Ғәзинур урынынан ҡуҙғалманы.

Байтаҡ ваҡыт шым ғына барҙылар. Исхаҡ ҡапыл тамаҡ ҡырып ҡуйҙы. Камила һағайҙы, ире нимә тураһындалыр һүҙ башларға итә.

- Мин уны, нисек тип әйтергә... "Уңыш үҙеңдең ҡулыңда, үҙеңә ышан!" - тигәне өсөн барыбер хөрмәт итәм...

Камила шып туҡтаны. Ул ниндәй һөйләшеү? Һис булыуы мөмкин түгел.

- Нимә тинең, ҡабатла әле! Ҡасан булды былай һөйләшеү? Улай шаяртмайҙар!..

- Шаяртмайым, Камила. Ул элекке, бала саҡтағы...

- Ғәзинурҙың Үрнәккә килгәне булдымы ни? Барыбер был хаҡта белгән булыр инем.

- Уның Үрнәккә килгәне юҡ. Килмәҫ тә тип уйлайым...

- Һорауға яуап бир, йәнекәй...

Исхаҡ ҡатынына тултырып ҡарап торҙо. Берсә йылмайырға итте, берсә уйсан төҫ алды.

- Алтынсыла уҡығанда Юлбирҙе ауылына спорт ярышына барғайныҡ...

- Хәтерләйем-хәтерләйем, бер мәртәбә беҙҙең ауылда ла уҙғарылғайны шул, - Камила йылмайҙы. - Ә мин унынсыла уҡый инем. Өлкән синыф. Бына бит ҡалай була...

Исхаҡ кәләшенә йәнә мут ҡына ҡарап алды.

- Өлкән синыф тип, әллә кем булып йөрөмәнәгеҙ, мин, бәлки, ул саҡта һинән әрләнмәгән дә булыр инем.

- Туҡта-туҡта, һис аңламайым, нимә тураһында һөйләйһең һин?

- Беҙ, Үрнәк балалары, мәктәп эргәһендәге шишмә буйына төшкәйнек, бер өлкән синыф апайы килде лә, тәбиғәтте бысратаһығыҙ, тип шелтәләне. Мин уның үҙен Үрнәккә ҡунаҡҡа саҡырҙым...

- Ул малай һин инеңме? - Ни көлөргә, ни аптырарға белмәгән кәләше күҙҙәрен селт-селт йомдо. - Бына һинә мә...

- Һуңынан йүгереү буйынса тиҫтерҙәрем араһында беренселекте алғас, Ғәзинур ағай... Ғәзинур менән килеп ҡотлап киттегеҙ...

- Ул ғына түгел, Илфат, Айгөл бар ине... Тағы ла кемдәрҙер индә, хәтерҙән сыҡҡан.

- Теге ҡупшы егет, - Исхаҡ ҡатынына күҙ ҡырыйы менән генә ҡарап алды, нишләптер был юлы Ғәзинурҙың исемен әйтмәне. - Ҡулымды ҡыҫты һәм мәңге минең хәтерҙә ҡалыр теләген әйтте. Янындағы сибәркәйҙең дә ҡулымды ҡыҫыуын теләгәйнем, тик, ни өсөндөр, быны эшләмәне. Уның ҡарауы, матур итеп йылмайҙы... Беҙҙең ауылға эшкә ебәрелгән мәктәп директорын тәү күргәс үк, шул ҡыҙҙы таныным. Донъяла мөғжизә юҡ, тиҙәр...

- Һуң, нишләп... Нишләп был турала бер ҡасан да һөйләгәнең булманы һуң, Исхаҡ?.. Нишләп үҙеңде башта уҡ шулай тип танытманың? - Камила күҙҙәрен ҙур асып хәләленә төбәлде. - Һин инең шул! Ап-асыҡ бөтәһе лә күҙ алдына килеп басты. Танынымы... Ул ҡысҡырып көлөргә кереште.

- Таныуыңды, ошо һүҙҙе ҡасан да булһа әйтереңде көттөм. Мин бөгөн иң бәхетле ир!

Ҡатыны көлөүҙән туҡтаны, Исхаҡтың битенән һыпырҙы.

- Күптән танырға тейеш инем бит инде...

- Асылып китеп, әле шул турала нисек һөйләп ташлағанымды үҙем дә һиҙмәй ҡалдым, - тип уға ире шуҡ ҡына ҡарап алды.

- Исхаҡ, - тине шул саҡ Камила. - Минең һинә хыянат иткәнем булманы. Алдағаным булманы.

- Мин быны беләм, Камила, - ире уны ҡосаҡлап алды. - Камила, Камилам, Камилаҡайым...

* * *

Исхаҡ менән Камила ял көндәрендә саңғыла йөрөйҙәр. Дөрөҫөрәге, Камиланы саф һауаға ире алып сыға. Хәҙер ҡатынына күберәк хәрәкәтләнергә кәрәк. Бөгөн дә улар, гәҙәттәренсә, урманға сығып киттеләр. Ҡайтыу яғына боролған саҡта ғына ҡапыл Камила бөгөлөп төштө. Исхаҡ йәһәт кенә уның ҡаршыһына сыҡты.

- Нимә булды?

- Эсем... Эсем ауырта, - кәләше бер-ике аҙым йәһаны ла йәнә сүкәйҙе. - Был ни булды миңә? Әҙерәк ултырып торайыммы әллә?

- Юҡ-юҡ, аҫылын яурыныма, - Исхаҡ ҡатынын ҡосаҡлап бер аҙ бара бирҙе, ләкин йәйыҙ ине. Ахыр, саңғыларын систе лә Камиланы күтәреп алды. Көртҡә бата-сума барыуын белде. Ҡатыны ауыртыныуҙан тешен ҡыҫып ыңғырашты.

- Түҙ, аҙ ғына сабыр ит...

Ауыртыу тағы ҡабатланды, Камила түҙмәйенсә ҡысҡырып ебәрҙе.

- Эй, Хоҙайым!..

Исхаҡ күҙен шар асып уға төбәлде:

- Һин үлмә... Һин үлмә...

- Исхаҡ, нимә һөйләйһең тағы?

Ире ул әйткәнде ишетмәне, бугай, һаман бер үк һүҙҙәрҙе ҡабатланы:

- Мин һинә үҙ ғүмеремде бирәм... Йәнемде бирәм... Ишетәһеңме, мин үҙ йәнемде бирәм.

Лысма тир булған Исхаҡ ҡатынын оло юлға алып сыҡты. Бәхеттәренә күрә, ҡаршыла машина күренде. Хәле бөткән ир ҡарға сүгәләне. Шофер машинаға менергә ярҙамлашты. Исхаҡ йәнә ҡатынына эйелде.

- Йәнем фиҙа, бәгерем! Ишетәһеңме?

Иренең күҙҙәре ҡыҙарғайны.

- Исхаҡ, һин әлләә?.. Ни өсөн?

- Камила, мин ҡасандыр бер ғәзиз кешемде юғалттым... Былай тип әйткәндә ишетеү ауыр түгелме?

Камила "юҡ" тигәнде белдереп, баш сайҡаны.

- Ул бала тапҡанда... баланы тыуҙыра алмайынса икеһе лә...

- Ҡәҙерлем, беҙҙең балаға әле йән дә инмәгән!.. Исхаҡ, ышан миңә, беҙгә бер нәмә лә булмаясаҡ. Ҡурҡыттым бит һине, - Камила, ауыртыныуҙы ла онотоп, иренә йылмайҙы. - Ҡай саҡ һин үҙең дә бала һымаҡһың, әллә шуға һине оҡшаттыммы икән?

Һуҡыр эсәккә операция яһанылар. Бөтәһе лә һәйбәт үтте. Бына Камила эргәһендә бер-береһенә ҡарап йылмайышҡан ҡәҙерлеләре ултыра. Шатлыҡ тулы күҙҙәрен унан ала алмайҙар. Ҡайһылай рәхәт икән янында үҙ йәнен бирергә әҙер кешең булғанда! Был һүҙҙәрҙе ғүмер буйы көткән кешеһе әйтмәне... Я, Рабби, үҙеңдең ысынлап та бәхетле икәнеңде аңлар өсөн әллә нимәләр кисерергә кәрәкмәй ҙә баһа! Ҡаршылағы мөлдөрәмә тулы күҙҙәр уның асыҡ сағылышы! Ошо һүҙҙәрҙе, ошо күҙҙәрҙе Камила шулай оҙаҡ эҙләнеме? Был турала Исхаҡҡа әйтергә теләне. Кәрәкле һүҙ табылманы. Бары күҙҙәрен генә селт-селт йомдо. Ә ул аңланы.

* * *

Буран көсәйгәндән-көсәйҙе. Йөрәген усына тотоҙай булған Камила бер бүлмәнән икенсеһенә өҙләкһеҙ йөрөнө. Район үҙәгенән шылтыратҡан сағында Исхаҡ: "Аҙыраҡ һепертеп торған һымаҡ, һуңғараҡ юлға сығырға тура килер", - тигәйне лә һуң, Камила үҙе бит: "Бында тып-тыныс, өлгөрөрһөң, етмәһә, малды ҡарарға кәрәк", - тине. Шунан һуң ун-ун биш минут үттеме-юҡмы, тышта буран күтәрелде лә китте. Эй, ниндәй мал ҡайғыһы булһын ошондай сакта, баш ҡайғыһы ла баһа! Ҡайтанан шылтыратып ҡарағайны ла бит, юлға сығып китте, тинеләр. Инде күптән өйҙә булырға тейеш ине лә һуң...

Ике, өс, дүрт... ете сәғәт үтте. Әкренләп төн етте. Камиланың мейеһен тик бер уй өҙләкһеҙ сүкене: "Ул ҡайтманы, аҙашты..." Бер нисә мәртәбә тышҡа ла сығып әйләнде, хатта ихата эсендә аҙым яһарлыҡ түгел. Нишләп был ҡәҙәре яман итеп олой бураны?! Ҡараңғылыҡ эстәге хәүефте көсәйтә генә төштө: "Именгә түгел был, Исхаҡ аҙашһа, уны ҡасан табасаҡтар? Уға тиклем туңып үләсәк бит!" Яуап урынына тышта буран үкерҙе. Әгәр ҙә ул ике бала менән яңғыҙ тороп ҡалһа, әле икенсеһе тыумаған килеш?.. Бәхетле буласаҡ, имеш... Бына ул тормош ҡайһылай! Камиланың маңлайынан һалҡын тир бәреп сыҡты, ул ҡалтырана башланы. "Ул үлде, ул үлде..." Нишләп ошо һүҙ тел осонан китмәй ҙә ҡуя? Камила торҙо ла йәнәтләп кейенә башланы. Былай ярамай, эҙләргә сығырға!

Ҡапыл ишек асылып китте. Унда танымаҫлыҡ булып ап-аҡ ҡарға батҡан ире баҫып тора ине. Камила шатлығынан ҡысҡырып ебәрҙе лә ғәзиз кешеһенә табан ташланды. Көс-хәл менән аяғында баҫып торған ире йылмайҙы:

- Ҡара-ҡара, әллә иларға итә инде? Мин бит бағаналарҙы һанап ҡайттым, ял итә-итә...

- Нинә мине тыңланың, нинә генә кире боролманың? Минең арҡала бит, Алла һаҡлаһын... Ул ниндәй көзрәт менән ҡайтып етә алдың?

- Ул ҡөҙрәтте һин беләһең, Камила. Әлеге мәлдә мине еңерҙәй, туҡтатып, йығып һалырҙай көс юҡ, - Исхаҡ ҙур усын ҡатынының ҡорһағына ҡуйҙы. - Бына ул серҙең асылы!

- Исхаҡ, ә беҙҙең сабыйға йән ингән. Бөгөн көнө буйы тулаңы, тибеште. Атаһын юғалтыуҙан ҡурҡты ул...

- Миңә оҡшап алабарман, үҙ һүҙле булмаҡсы бит.

- Һинең кеүек тәүәккәл дә, ҡыйыу ҙа!

Камилаға нимәләр тип яуап бирергә тырышһа ла, Исхаҡтың хәленән килмәне. Ул диванға ултырған килеш йоҡлай ине инде. Камила йәре янына барып теҙләнде.

* * *

Тышта шундай тыныс. Иҫ киткес һиллек. Әйтерһең, ҡотороҡ дауылдан арыған бөтә ғәм ял итә. Камила ҡоймаға һөйәлгән дә, был һиллеккә ышанырға теләмәгәндәй, ҡатып ҡалған. Исхаҡ ҡатынына табан атланы.

- Камила, һин нимәнеләр бик бирелеп тыңлайһың.

- Тынлыҡ...

- Ул һинә нимә ти?

- Мин тынлыкты тыңланым, Ул миңә аҡыл бирҙе...

- Мин тынлыкты тыңланым, Ул миңә серен систе...

- Ниндәй серҙе?

- Камила һине ярата, тине.

Камила, тәү күргәндәй, иренә күтәрелеп ҡараны. Тынлыкта серле бышылдау ишетелде:

- Яраттырҙың шул. Яратам шул!..

**(Аҙағы. Башы 27-33-сө һандарҙа).**

*ҮӘТ, ШУЛАЙ!*

# ҠАҺЫМ ТҮРӘ МУЗЕЙЫ



**Стәрлетамаҡ районы Мырҙаш ауылы мәҙәниәт йортонда 1812 йылғы Ватан һуғышы геройы Ҡаһым түрәнең тарихи-этнографик музейы булдырылды.**

Ҡаһым түрәнең яңы тарихи-этнографик музейы ете булектән тора: башҡорт (Мырҙаш ауылында), рус (Рязановка), мордва (Садовка), татар (Талас), украин (Золотоношка), сыуаш (Ишпарс), ҡаҙаҡ ( Октябрьский). Мырҙаш ауылында урынлашҡан төп музей 1812 йылғы Ватан һуғышында һәм 1813-1814 йылдарҙа рус армияһының сит ил походтарында ҡатнашҡан башҡорт полктары командиры Ҡаһым түрәгә арналған. Ҡаһым түрә (Ҡаһым Мырҙашев, 1778-1813) Стәрлетамаҡ районы Айыусы ауылында тыуған. Уның героик фигураһы башҡорт ғәскәрҙәренең 1812 йылғы Ватан һуғышында алған хәрби даны менән айырылғыһыҙ бәйле. Айыусыла Ҡаһым түрә хөрмәтенә стела, башҡорт халыҡ йыры "Ашҡаҙар"ға һәйкәл ҡуйылған.

Хәтерегеҙгә төшөрәбеҙ, 2022 йылда ил Рәсәйҙең 1812 йылғы Ватан һуғышында еңеүенә 210 йыл тулыуҙы билдәләй. Унда 28 атлы башҡорт полкы һәм Өфө пехота полкы ҡатнашҡан. Әлеге ваҡытта экспозицияларҙы тулыландырыу, саралар планын төҙөү эше алып барыла. Учреждениены Республика көнөндә, 2022 йылдың 11 октябрендә, асыу күҙаллана.

✔ *Тормошобоҙ талап иткән һөнәрҙәр үҙгәреп тора, шулай ҙа актер һөнәре һәр саҡ кәрәк булыр тип уйлайым. Бөгөн был һөнәр буйынса уҡырға килеүселәр күп түгел, конкуренция әллә ни юҡ.*



ИЖАДХАНА

# ТЕАТР ДОНЪЯҺЫ - КҮҢЕЛ ДАУАҺЫ

**Башҡортостандың халыҡ артисы Миңзәлә ХӘЙРУЛЛИНА 1983 йылдан, студент сағында уҡ, Мәжит Ғафури исемендәге Башҡорт академия драма театрында эшләй башлай. Әлеге көнгә тиклем сәхнә киңлегендә йөҙөп йөрөп эшләгән талантлы актрисаларыбыҙҙың береһе булып ҡала. "Театр бит ул - яҡтылыҡ, яҡшылыҡ, мәңгелек сығанағы. Театр донъяһы - күңел дауаһы" - ти Миңзәлә Ғәйнетдин ҡыҙы.**



**➔ Һөнәрҙәрҙе лә төрлөсә баһалайҙар, мәртәбәле, кәрәкле, бөгөн талап ителгән һөнәр, тиҙәр. Актер һөнәре шулай уҡ үҙенсәлекле. Һеҙгә лә үҙ һөнәрегеҙҙә күп кенә боролоштарҙы кисерергә тура килгәндер. Актерлыҡ һөнәре беҙҙең заманға ни тиклем талап ителә?**

- Эйе, һәр кем күңеленә яҡын һөнәрҙе үҙе һайлай. Шул саҡта кеше эшенә дәртләнеп йөрөй, дуҫтарына, ғөмүмән, кешеләргә изгелек эшләргә тырыша. Хеҙмәтен шатлыҡ килтерә икән, ундай ерҙә шаярыуҙар ҙа, йылмайған йөҙҙәр ҙә күберәк була. Тормошта профессияһына тура килмәгән әҙәмдәр ҙә осрай. Мин үҙем дә ундайҙарҙы беләм, улар һәр ваҡыт нимәгәлер асыулы, ризаһыҙлыҡ белдерергә сәбәп табып ҡына торалар, тормоштан да, кешеләрҙән дә зарланалар, яҡшы нәмәнән дә кире яҡ эҙләйҙәр. "Был кеше һөнәрен дөрөҫ һайламаған", - тип уйлайым мин ундай саҡта.

Үҙемә килгәндә, артист булырға бала саҡтан хыялландым. Мин имтихан бирергә барғанда сәнғәт институтының театр факультетында бер урынға 80 абитуриент дәғүә итә ине. Инәйем дә, атайым да минең уҡырға инеремә ышанманылар: "Атай-әсәйһеҙ, юғары урындағы берәйһенең ярҙамынан тыш, бер кем дә унда уҡырға инә алмаҫ", - тинеләр. Хәҙер аптырайым, нисек йөрьәт иткәнмендер: мин институтка, уҡырға керәм, тиғән ныҡлыҡ, ышаныс менән барҙым, бөтөн төрлө уй башта ла булманы. Шундай ҙур маҡсат ҡуйылған ине. Ысынлап та, уҡырға индем. Беҙ өс ҡыҙ - Эльвира, Шәүрә Рифҡәт Исрафилов курсына эләктек.

Шулай итеп, ошо актерлыҡ һөнәре менән күп йылдар инде үҙемдең халҡыма хеҙмәт итәм. Шул ваҡыт эсендә кем генә булырға тура килмәне: бер көндө ябай ауыл ҡатыны, икенсе көндө уҡытыусы, унан директор, табип, йәки асарбаҡ... Актерға бөтә һөнәрҙе лә үҙләштерергә кәрәк шул. Әгәр ҙә сәхнәгә үҙең һынландырасаҡ һөнәрҙе белмәйенсә сығаһың икән, залда бит шул һөнәр кешеһе тамаша ҡылып ултыра, ул һинең уйнауыңа ышанмаясаҡ. Минең маҡсат - уны ышандырыу, образды уның күңеле аша үткәрергә тырышыу.

Эйе, бик тә үҙенсәлекле беҙҙең профессия, үҙ тормошоң менән генә йәшәгәндә улай уҡ эҙләнмәйһең, ә образ булғас, уның һәр бер аҙымын, һәр бер интонацияһын, һәр бер күңел хәрәкәтен үҙең аша үткәрәһең. Күпме нервы кәрәк уның өсөн! Артист халҡы шулай "туҙалыр" инде ул. Ә шулай ҙа үҙемдең һөнәремде мин дөрөҫ һайлағанмын тип уйлайым.

"Мин халыҡҡа нимә әйтергә теләйем?" тигән борсолоу гелән эҙләнеүҙе, яңылыҡтар менән танышып барыуҙы, ғилем алыуҙы, заманса технологияларҙы үҙләштереүҙе талап итә. Шуға ла яңы алымдар менән эшләгән режиссерҙарҙың спектаклдәрен ҡарап барабыҙ, ҡайҙа ғына барһаҡ та, ундағы театр тамашаларын ҡалдырмайбыҙ, хәҙер сәхнә әҫәрҙәрен интернет аша ла ҡарап була бит - шуныһы яҡшы. Беҙҙең бит бер урында тапанырға хаҡыбыҙ юҡ, киреһенсә, алдараҡ барырға тейешбеҙ. Минең өсөн тағы бер талап бар: минең күңел торошом халҡымдың күңел торошо менән тура килергә тейеш. Башта үҙемдекен, шунан уның йөрәген асыу - минең бурысым. Халыҡ алдында һәр ваҡытта ла үҙеңдең әйтер һүҙең булырға тейеш.

Театрға килгән һәр йәш режиссер беҙҙәге ижад донъяһына ниндәйҙер яңылыҡ индерергә тырыша. Онотола төшкән элекке алымдарҙы тергеҙә, кире ҡайтара, заманға яраҡлаштыралар. Заман тиғәндән, тормошобоҙ талап иткән һөнәрҙәр үҙгәреп тора, әлбиттә, шулай ҙа актер һөнәре һәр саҡ кәрәк булыр тип уйлайым. Бөгөн был һөнәр буйынса уҡырға килеүселәр күп түгел, конкуренция әллә ни юҡ. Шулай ҙа киләсәккә өмөт менән ҡарайбыҙ. Театр тарихы ҙур, батшалар ҙа эрәләрендә театр тотҡан. Театр актуаллеген юғалтмай, ул хәҙер ҙә халыҡҡа кәрәк, сөнки сәхнә тормош фәлсәфәһен асып һала, төрлө хәлдәрҙән сығыу юлдарын эҙләй, кешене уйланырға мәжбүр итә.

**➔ Элек оҙайлы гастролдәргә сығыуҙар була торғайны. Сит илдәрҙә алған тәьҫораттар тураһында белге килә. Ҡайһы ил-йорт айырыуса иҫтә ҡалды һәм ни өсөн?**

- Элек бер ай буйы бөтөн коллектив менән, һуңынан бер ай бер генә спектакль менән райондан-районға гастролдәргә йөрөй инек шул. Айлап Ҡаҙағстандан, Үзбәкстан, Ҡырғыҙстанда яткан саҡтар булды, ғаиләләрҙе һағынып бөтә инек. Иң мөһиме, беҙҙең театр килһә, залдар шығырым тула ла ҡуя торғайны.

Ике йыл элек Ҡаҙағстанда гастролдә йөрөнөк. Унда кешеләрҙең шул тиклем яғымлы булыуы мине хайран ҡалдырҙы. Улар барыбер беҙҙән айырыла, тип уйланым. Автобусҡа ҡатын-ҡыҙ инеү менән, йәш егетме, оло йәштәге ирме, йәһәт кенә тороп урын бирәләр, беҙҙә бит ул культура юғалып бара. Студенттар уҡыған, йәшәгән яҡта ашханалар күп, беҙ шунда туҡланып йөрөнөк, ризыҡтары иҫ киткес тәмле. Шул тиклем ҙур ашханаларҙа үҙҙәренең милли аштарын бешерәләр, сәйҙе емеш-еләк менән бирәләр, көн дә төрлө-төрлө аҙыҡ, ҡыҫҡаһы, йәнең нимә теләй, бөтәһе лә бар. Студенттар өсөн интернеты ла эшләй, шунда ашайҙар ҙа, дәрестәрен дә әҙерләп ултыралар, аптырап ҡайттым. Көнләшерлек тә.

Ҡытайҙа Шанхайҙа булырға тура килде, ныҡ эҫе, тормошто кондиционерһыҙ күҙ алдына килтереп тә булмай. Унда һәр эштә булған теүәллек беҙҙе аптыратты. Фәлән ваҡытта машина һине килеп алырға тейеш икән, шул секундына килеп тора. Шанхай аэропортында минут һайын самолет осоуына хайран ҡалдым. Рәсәйҙән килгән самолет һуңланы, үҙҙәренең ғәйебе булмаһа ла, ҡытайҙар беҙҙе тиҙ генә йыйып, ашарға бирҙеләр. Бер тапҡыр ҡулланыла торған һауыт-һаба, уны сүп йәшнигенә ташлап та өлгөрмәйбеҙ, күҙ асып йомғансы йыйыштырып алып та китәләр, йәшник эсендә бер нәмә лә юҡ. Бөтә ерҙә таҙалыҡ, тәртип. Һәр бер ҡытай кешеһе эшенә йәбешеп ята, йәнә шул хайран итте.

Беҙҙең театрға Төркиәлә Анкара университетында Нәжип Асанбаевтың Әхмәтзәки Вәлидигә арналған спектаклен уйнарға насип булды. Студенттар бик ихлас ҡараны тамашаны. Истамбулда үткән театр фестивалендә урамда уйнаныҡ. Төрөктәр тамаша ҡарарға ғаиләләре менән килә, хатта имсәк балаларын да үҙҙәре менән алалар. Сәнғәткә һөйөү тәрбиәләүҙә ата-әсәнең роле иҫ киткес ҙур бит, бына шуға ла балаларҙы бындай тамашаларҙан ҡалдырмайҙар.

Симферополдә үткән театр фестивалендә шулай уҡ халыҡ күп булды. 800 урынлыҡ зал шығырым тулы ине, беҙ спектаклдә уйнап бөткәс, халыҡ аяғүрә тороп ҡул сапты. Үҙебеҙҙең башҡорт театрында уйналған спектаклде ситкә алып сыҡһаҡ, һәр саҡ бына шулай күтәреп алалар, яратып ҡабул итәләр. Театрыбыҙ юғары кимәлдә, тиғән фекер нығына инде шулай үҙебеҙҙә лә.

**➔ Һеҙ һәр саҡ йылмайып, донъяға асыҡ ҡараш менән йәшәйһегеҙ. Был, моғайын, эске көстәр, сөнки һәр кемгә тормоштоң һынауҙарын да үтергә тура килә. Һеҙгә әҙәм балаһындағы ниндәй сифаттар оҡшай?**

- Кеше ниндәй генә дәрәжә биләмәһен, уның ябай кеше булып ҡалыуын хуп күрәм. Тормош бит ул ябай ғына нәмәләрҙән тора, шуның өсөн ябай булып ҡалыу, үҙеңдең халҡың менән бергә булыу оло бәхет тип уйлайым.

Ҡай саҡ кешегә әйткән бер йылы һүҙ ҙә уны бөйөк эштәргә этәрә. Шуға ла кешегә йылы һүҙ әйтеүҙән ҡурҡмаҫҡа, уның күңелен үҫтерергә кәрәк. Әлбиттә, төрлө кешеләр бар, кемгәлер, бәлки, тәнҡитләү ярҙам итәлер. Үҙемә килгәндә инде, минә берәй йылы һүҙ әйтһәләр, шул мине ҡанатландыра һәм дәртләндерә. Тағы ла шул, кешеләргә рәхмәтте ваҡытында әйтергә тырышайыҡ, үкенесле һуңлауҙар булмаһын.

**Фәрзәнә АҠБУЛАТОВА**
**яҙып алды.**

*АҠҺАҠАЛ ҺҮҘЕ*



## АҠЫЛДЫҢ ҮҘЕ БЫЛАР

- Ике аяҡ менән ике ҡул бәләкәй генә бер телдән көсһөҙҙәр.
- Мөлкәт туплау уты йәнде ялмап алһа, рухиәт усағы һүнә.
- Байлыҡ, дан, абруй түгел, кешене кешеләр менән яҡшы мөнәсәбәттә булыу һау-сәләмәт итә.
- Байлыҡ - мөлкәткә эйә булыуҙа түгел, ҡәнәғәт була белеүҙә.
- Аҡсаһы күп түгел, ҡыуаныстары күп аҡса талап итмәгән кеше бәхетле.
- Күпме аҡсаң булыуы түгел, уны нисек тотоноуың мөһим.
- Кемлегенә таянған түгел, кем булырға теләгән маҡсатына ирешә.
- Аҡыллы үҙенән генә ҡурҡа, сөнки ул үҙенең иң аяуһыҙ баһалаусыһы һәм язалаусыһы.
- Берәүҙәр белгән эше менән түгел, билгән урыны менән билдәле.
- Донъяла тупланған бөтә ҡорал шартлауынан баланың сөскөрөүе көслөрәк һиҫкәндерә.
- Берәүҙәрҙе кешелеклеге өсөн түгел, вазифаһы өсөн генә ихтирам итәләр.
- Тәнгә тере һыу - сама белеүҙә, йәнгә тере һыу - йәлләй белеүҙә.
- Кеше азатлыҡ иркенлегенә ҡарағанда ҡоллоҡ тарлығын еңелерәк кисерә.
- Власть - күсер, ярандары - дилбегә, закондары - сыбыртҡы булған илдә тормош алға бара.
- Иң ҙур яңылышыу - үткәндәрҙә яһаған хаталарҙы төҙәтеү менән ваҡыт уҙғарыу.
- Хыялға ынтылыу шәхесте үҫтерә, кешегә көнләшеү эсте күптерә.
- Китаптарҙан яҡшылыҡ алыу зарур, аламалыҡҡа тормош үҙе өйрәтә.
- Етмеш төрлө һөнәргә эйә ете улың булғанда, бер көйәнтә һыу алып килерлек ҡыҙың булһын.
- Мең кешенең солтаны булыуҙан, ата-әсәңдең ҡоло була белеү мең артыҡ.
- Тышҡы донъяны күреү өсөн - күҙҙәр, эске донъяны күреү өсөн күңел кәрәк.
- Ғүмер буйы тәһәрәттә булғанда ла, көн һайын мәрхәмәтле булыу зарур.
- Мең тапҡыр аҙан ҡысҡырыуҙан, бер тапҡыр аҙғынды тыйыу - ҡыйыулыҡ.
- Ҡылғандары өсөн генә түгел, әйткән һүҙҙәре өсөн дә яуаплылыҡ тойған кеше башҡаны өйрәтә ала.
- Тауға менгәндәр бер-береһенең терһәгенә йәбешә, тауҙан төшкәндә һәр кем үҙ яйына йүгерә.
- Дин әхлаҡлыҡҡа өндәй, ә уға өлгәшеү, өлгәшмәүе кешенең үҙенән тора.
- Донъяларҙы бөтә руханиҙарҙың доғаһы бер баланың илауынан көсһөҙөрәк.
- Бай доға уҡып байлығын һаҡлай, ябай доға уҡып донъяһын яҡлай.
- Ҡорһаҡ тулған һайын тын ҡыҫыла, мейе тулған һайын донъя киңәйә.
- Ишектәр кинерәк асылған һайын, уларға инеү ауырлаша.
- Маймыл ағас башынын ҡолап төшөп мейеһе һелкенгәндә кешегә әүерелгән.
- Юлда өргән һәр эт менән булышҡан ыратып алға китә алмаҫ.
- Көслөгә тиңләшәләр, көсһөҙҙө, түбәнерәк эйелһен өсөн, башынан һыйпайҙар.

**Урал МОСТАФИН.**
**(Дауамы бар).**

***✓ Артыш көслө фитонцид үҫемлектәрҙән һанала. Уның бер гектар ҡыуағы 30 килограмм фитонцид матдә бүлеп сығара. Был ҡәҙәр фитонцид миллион тирәһе халҡы булған ҙур бер ҡаланы бактерияларҙан таҙартыу өсөн етерлек.***



ИНТЕРНЕТТАН



# ТУҢДЫРМА КӘЙЕФТЕ КҮТӘРӘ

■ Туңдырма - "бәхет гормоны" - серотонин эшләп сығарырға һәләтле, шуға ла табиптар уны кәйефте күтәреүсе сара булараҡ та ҡулланырға тәҡдим итә. Туңдырмала файҙалы элементтар һәм витаминдар, мәҫәлән, кальций, Л-триптофан, лактоза, минераль тоҙҙар һәм еңел үҙләштерелеүсе аҡһымдар күп. Бер илдә артыҡ ауырлыҡ менән яфаланыусы бер нисә кешенең диетик менюһына туңдырма өҫтәйҙәр. Эксперимент аҙағында көн һайын туңдырма ҡулланыусыларҙың тиҙерәк ябығыуы асыҡлана. Баҡтиһәң, һөт аҙыҡтарында һәм туңдырмала булған кальций организмдағы артыҡ майҙарҙың яныуына булышлыҡ итә икән.

■ Сәләмәт булғығыҙ килһә, үҙегеҙҙе башҡалар менән сағыштырмағыҙ һәм көнләшмәгеҙ, тип белдерә Канаданың Конкордия университеты ғалимдары. Улар кешенең иммунитеты һәм гормональ фоны социаль торошона бәйле булыуын асыҡлаған. Эксперимент күрһәтеүенсә, үҙҙәрен уңышлы кешеләр менән сағыштырып, файҙа үҙ иҫәбенә булмауына зарланырға яратыусыларҙың иммунитеты ла түбән булған, гормондар дисбалансы ла күҙәтелгән. Дуҫтары һәм хеҙмәттәштәре араһында үҙен кәрәкле кеше тип тойоусыларҙың кәйефе лә яҡшы була, улар төрлө вирустарға ла бирешеп бармайҙар, имеш.

■ Коннектикут университетында үткәрелгән тикшеренеүҙәр күрһәтеүенсә, организмға саҡ ҡына һыу етешмәй башлаһа, шунда уҡ кәйеф насарая, көсһеҙлек барлыҡҡа килә, фекерләү ҡеүәһе түбәнәйә. Тикшеренеүҙәрҙең етәксеһе профессор Лоренс Е. Армстронг фекеренсә, ял иткәндә лә, компьютер алдында ултырғанда ла һыу эсергә кәрәк. "Һыуһау тойғоһо беҙ 1-2 процент шыйыҡлыкты юғалтҡас ҡына барлыҡҡа килә. Әммә был ваҡытҡа организмда һыуһыҙлыҡ һөҙөмтәһендә кире эҙемтәләр башланған була", - ти профессор. Бындай хәл килеп тыумаһын өсөн көнөнә 2 литр һыу эсергә кәрәк. Балалар өсөн был норманың дүрттән бер өлөшө йәки яртыһы ла етә. Был исемлеккә ҡайнар эсемлектәрҙе лә индерергә ярай, тик уларҙың составында кофеин булмаһын. Үлән сәйҙәре бигерәк файҙалы; бөтнөк, имбир, аҡ сәскә сәйенә лимон да ҡушып эбәрегеҙ.

■ Йәйге эҫе көндә һау кеше лә тын ҡыҫылыуы, йөрәк тибеше йышайыуынан яфалана. Ә һау булмаған йөрәк был осорҙа бигерәк көсөргәнешле эшләргә мәжбүр була. Йәйге ялын баҡсала уҙғарыусыларға ауыр эштәрҙе көндөң эҫе мәленән алда йәки ул бер аҙ һүрелгәс башҡарыу кәңәш ителә. 30-40 минут эшләгәс, туҡтап ял итеп алығыҙ. Әгәр ҙә тынығыҙ ҡыҫыла, башығыҙ әйләнә йәки үҙегеҙҙе хәлһеҙ тояһығыҙ икән, шунда уҡ эшләүҙән туҡтағыҙ. Башты аҫҡа эйеп йәки эйелеп елек-емеш йыйырға ла тырышмағыҙ, был осраҡта ҡан әйләнеше боҙолоп, баш әйләнеүе, артериаль ҡан баҫымының ҡапыл күтәрелеүе, иҫте юғалтыу, инсульт кисереү ихтималы бермә-бер арта. Бындай эштәрҙе тәпәш ултырғысҡа ултырып башҡарырға кәрәк.

БИОЛОГ ҒАЛИМ КӘҢӘШЕ

# АРТЫШ, КИПАРИС...

**Артыш беҙҙең республиканың Белорет, Бөрйән, Баймаҡ, Әбйәлил, Учалы, Ғафури, Ейәнсура һәм башҡа таулы райондарында ылыҫлы урмандарҙа, тау битләүҙәрендә, ҡомло йәки ваҡ ташлы урындарҙа үҫә. Ваҡ ташлы тупраҡтарҙа ул ергә ятып, ә ҡомло урындарҙа, мәҫәлән, Марий Эл республикаһында тура олонло булып үҫә. Бейеклеге 1-3 м булған был үҫемлектең олондары ҡара һоро, ә йәш ботаҡтары ҡыҙғылт һоро төҫтә була. Артыштың 10-16 мм оҙонлоҡтағы тар ланцет япраҡтары энәне хәтерләтә, ҡышҡылыҡҡа ҡойолмай.**



Ғалимдар артыштың ергә ятып үҫкән төрөн "можжевельник казацкий", ә ҡыуаҡ формаһында тура үҫкәндәрен "можжевельник обыкновенный" тип йөрөтә. Артыш (Можжевельник - Juniperas L.) кипаристар ғаиләһенә ҡараған ике өйлә ҡыуаҡ үҫемлек. Үҫемлектәрҙең береһендә - тик ата сәскәләр, ә икенсеһендә инә сәскәләр урынлашҡан. Ата сәскәләре оҙонса һырғаны хәтерләтә. Инә сәскәләренең йәшел тубырсыктарында 8-10 рәттән торған тәңкәләре була. Уларҙың өҫкө рәте емеш бирә. Аталанғандан һуң тәңкәләрҙең һәр береһе ҙурайып үҫеп китә һәм емеше еләккә оҡшаған тубырсыҡ барлыҡҡа килтерә. Был емештәр тик икенсе йылға ғына өлгөрөп етә. Тәүге йыл улар йәшел, ә икенсе йыл күкһел ҡара төҫкә инә. Уларҙың ҙурлығы 6-10 миллиметр диаметрлы шар йәки эллипс формаһында була.

Артыштың тубырсыҡтарын тамам өлгөрөп еткәс кенә йыялар. Улар, ғәҙәттә, сентябрь айында өлгөрә. Япраҡтары сәнскеле булыу сәбәпле, артыштың еләктәрен йыйыу эше бер аҙ ҡатмарлаша. Ләкин ҡыуаҡ аҫтына брезент йәйеп, уны һелкһәң, был эш байтаҡҡа еңелләшә, еләктәр үҙҙәре уҡ ҡойолоп төшә. Артыш еләген киптерер алдынан ҡоро ботаҡтарҙан, йәшел еләктәрҙән айырып алырға кәрәк. Уны махсус киптергестәрҙә йәки температура артыҡ юғары булмаған йылы бинала киптерәләр. Һәйбәт киптерелгән еләк ҡара төҫтә, йомро формала булырға тейеш. Киптереү процесы оҙаҡ бара. Шуға күрә уны йыш әйләндереп торорға кәрәк.

Артыш көслө фитонцид үҫемлектәрҙән һанала. Уның бер гектар ҡыуағы 30 килограмм фитонцид матдә бүлеп сығара. Был ҡәҙәр фитонцид миллион тирәһе халҡы булған ҙур бер ҡаланы бактерияларҙан таҙартыу өсөн етерлек. Ошо үҫемлектең һәм уның ҡәрҙәштәренең һауаны таҙартыу сифаты хатта боронғо мифтарҙа һәм легендаларҙа һаҡланып ҡалған. Мәйет сыҡҡан өйҙә артыш менән ыҫлау ғәҙәте булырға тейеш. Артышты шулай уҡ һәр өйҙәң ишек башына йә өй мөйөшөнә ҡыҫтырып ҡуйыу, йәғни был йортто төрлө яманлыҡтарҙан һаҡларға тырышыу, елек-электән килгән йола. Хәҙер ҙә грипп киҙеүе ҡотороған осорҙа күп ауылдарҙа өйҙә артыш яндырып ыҫлап алалар.

Шуныһы иғтибарға лайыҡ: был йолалар боронғо гректарҙа ла күҙәтелгән һәм легендаларында һаҡланып ҡалған. Мәҫәлән, кипарис тураһындағы легендала былай тип һөйләнелә (кипарис - артыш менән бер ғаиләгә ҡараған мәңге йәшел ылыҫ япраҡлы үҫемлек):

...Кеос утрауындағы Карфей үҙәнендә алтын мөгөҙлө үтә нәфис болан йәшәгән, ти. Уның муйынын гәүһәр муйынсаҡ, ҡолаҡтарын үтә ҡиммәтле һырғалар биҙәп торған. Кешеләр араһында үҫкәнгә күрә, ул бер кемдән дә ҡурҡмаған. Был боланды барыһы ла яратҡан. Кем нисек теләй, шулай иркәләгән. Әммә утрау батшаһының улы Кипарис уны айырыуса ныҡ яратҡан була. Ул болан менән бергә тауҙар, туғайҙар буйлап гиҙгән. Боланды төрлө тәм-том, үләндәр менән һыйлаған, көмөш һыулы шишмәләрҙән һыу эсергән, мөгөҙөн төрлө сәскәләрҙән үрелгән гөлләмәләр менән биҙәгән. Ҡайһы саҡта ул боланға атланып алып, Карфей үҙәне буйлап сәйәхәткә сығып китер булған.

...Йәйге эҫе көндәрҙең береһендә был алтын мөгөҙлө болан ҡыуаҡтар күләгәһе ышығына ял итергә ята. Осраҡлы рәүештә ошонда уҡ Кипарис һунар итеп йөрөгән була. Ҡыуаҡ төбөндә ятҡан боланды күреп ҡала һәм уны үткер һөңгөһө менән сәнсеп үлтерә. Әлбиттә, ул үҙенең яратҡан боланын һәләк иткәнен белмәй, сөнки ул яртылаш япраҡтар менән күмелгән була. Тик табышына яҡынлашҡас ҡына Кипарис үҙенең ниндәй хата эшләгәнен аңлай. Кипарис һис кисекмәҫтән болан менән бергә үлергә теләй. Аполлондың уны йыуатырға теләүе юҡҡа ғына була. Ул аллаларҙан үҙен мәңгелеккә ҡайғыға дусар итеүҙәрен һорай. Аполлон, үҫмер егеттең теләгән үтәп, уның кәүҙәһен ағасҡа әүерелдерә. Уны ҡайырылар менән ҡаплап ҡуйып, йәшел төҫлө ылыҫтар менән биҙәй. Һомғол буйы менән күккә ынтылған был мәңге йәшел ағасҡа ҡарап, Аполлон былай ти:

- Мин һинең өсөн, үҫмер егет, һәр ваҡыт ҡайғы кисерермен һәм һин дә һәр саҡ шулай кеше ҡайғыһы өсөн ғазап сигерһең. Бына шулай мәңге ҡайғырып йәшә!

Шул ваҡыттан алып гректар, өйҙәрендә мәйет булһа, кипарис ботаҡтары элеп ҡуйыр, ҡәберҙәргә кипарис ағасы ултыртыр булған... Был риүәйәткә бәйләме, юҡмы, әммә башҡорттар элек-электән артышты шулай уҡ кипарис ағасы кеүек изге күрә һәм бер үк маҡсатта ҡуллана.

Тура үҫкән артышты Ҡыраҡа тауҙарында (Белорет районы) осратырға була. Ул матурлығы, һомғол булыуы менән кипаристан берҙә генә ҡалышмай. БДУ-ның Сибай институты ғалимдары һуңғы йылдарҙа артышты морфологик, генетик яҡтан ныҡлап өйрәнеү менән шөғөлләнә. Хәйбулла районы Урыҫбай ауылы янында олоно 13-14 см булған 45-60° текә үҫкән артыш ҡыуаҡлығы иғтибарҙы йәлеп итә. Биология фәндәре докторы, профессор Юлай Янбаев етәкселегендәге төркөм генетик тикшереүҙәр үткәреп, уның айырым төр түгел, ә осраҡлы үҙгәртеү кисергән клон булыуын иҫбат итте. Һуңғы йылдарҙа Бөрйән районында тура үҫеүсе артыштарҙан ғына торған ҙур майҙандар булғанлығы билдәле булды. Артышты ҡалаларҙы, бигерәк тә шифаханалар тирәләрен йәшелләндереү өсөн ултыртыу ифрат файҙалы. Грецияла, Румынияла, Болгарияла артыш ҡыуаҡтарын ҡалаларҙы биҙәү өсөн киң ҡулланалар.

Әйткәндәй, артыш менән ыҫланған ҡымыҙ мискәләре ҡымыҙға үҙенсәлекле тәм бирә. Уны шулай уҡ ит ыҫлау өсөн дә ҡулланалар.

# ТАТЛЫ ТАМЫР

**"Татлы тамырҙы (солодка Коржинского) беләһеңме? Уның файҙалы үҫемлек икәнлеге билдәлеме, юҡмы?" - тип атайым күп йылдар элек үк һорағайны инде. Ул ошо үләндең 1921 йылғы йотлоҡта һәм унан һуңғы ауыр йылдарҙа берҙән-бер тәмләткес булыуын, аслыҡтан үлем хәленә еткән кешеләрҙең ошо үләндең тамырын сәйнәп һауығыуҙарын легенда итеп һөйләгәйне...**



Баймаҡ районы Татлыбай ауылының өлкән уҡытыусыларының береһе Юнир ағай Әбделкәримов та ошо фекерҙе ҡеүәтләп: "Көнө буйы бесән эшләп арыйһың, ә ҡайтышлай ошо үләндең тамырын сәйнәһәң, янынан көс ингәндәй була", - тип, үҙенең йәш саҡтағы хәтирәләрен урталашты. Ул саҡта мин ғилем юлын яңы ғына башлап йөрөй инем әле. Әммә минең буласаҡ ғилми эшкә этәргес көс булды ул һүҙҙәр.

Татлы тамыр - ҡуҙаҡлылар семьяһына ҡараған бик ҡиммәтле, һирәк осрай торған күп йыллыҡ дарыу үҫемлектәренең береһе. Ул беҙҙең илебеҙҙә Волга, Урал, Тобол, Ишим йылғалары араһындағы эндемик (тик ошо урындарҙа ғына осрай торған) үҫемлектәрҙән һанала. Татлы тамыр дала зонаһында, бер аҙ татырлы болондарҙа үҫә. Уны шулай уҡ йәй көнө ҡороп бөтә торған бәләкәй йылғаларҙың ярҙарында ла осратырға мөмкин. Тоҙло грунт һыуҙары булған урындар татлы тамыр өсөн һәйбәт шарттар тыуҙыра. Ул ҡылған, аҡтамыр, әрем араһында үҫергә ярата. Башҡортостанда уны Баймаҡ районының Байыш, Кәрешкә ауылдары һәм Хәйбулла районының Таштуғай, Мәмбәт тирәһендә һ.б. ерҙәрҙә осратырға мөмкин. Баймаҡ районының Ирәндек арьяғы халҡы һөйләүенсә, татлы тамыр был тирәлә күпләп үҫкән. Күрәһең, малдың, бигерәк тә һарыҡтың, күбәйеүе уға кинәнеп үҫергә ирек бирмәйҙер. Бына шуның өсөн дә ул хәҙер бик һирәк осрай торған (юғала барған) үҫемлектәрҙән береһенә әүерелгән.

Бер аҙ тарихҡа иғтибар итәйек. Татлы тамыр - иң боронғо дарыу үҫемлектәренең береһе. Уның ғәжәп тәмле тамыры Боронғо Ҡытайҙа киң ҡулланылған. Тибет медицинаһында уны женьшень үҫемлегенән дә юғары баһалағандар. Был үҫемлек төнәтмәһенең күп ағыулы матдә-

ләрҙе нейтралләштерә алыу үҙенсәлеген шул ваҡытта уҡ белгәндәр. Тибет медицинаһы раҫлауынса, татлы тамыр ҡарттарҙың көсөн һиҙелерлек арттырған, йәш организмды нығытҡан.

Был үсемлектең тамырында 23 процентҡа тиклем (!) глицерризин бар. Ул үсемлеккә тәм бирә лә инде. 4 процент тирәһе флавоноид бар. Татлы тамыр шулай уҡ төрлө эфир майҙарына, аспаратинға, аскорбин кислотаһына һәм башҡа физиологик әүҙем матдәләргә бай. Бөтә әйтеп үтелгән сифаттар уны күп төрлө ауырыуҙарға ҡаршы торорлоҡ дарыу сифатында файҙаланырға мөмкинлек бирә.

Татлы тамырҙың морфологияһы тураһында бер нисә һүҙ. Ул, әйтеп үтелгәнсә, күп йыллыҡ үсемлек. Бейеклеге 30-70 см, төп тамыры бик тәрәнгә - 8 метрға, грунт һыуҙарына тиклем етә. Сәскәһе 10-13 мм ҙурлыҡта, күкһел аҡ төҫтә, суҡ рәүешендә урынлашҡан. Емеше 1-3 см оҙонлоғондағы ҡуҙаҡ. Япраҡтары яҫы йәки киң эллипс формаһында, һабағы йөнтәҫ, тимгелле. Май-июнь айҙарында сәскә атып, сентябрь баштарында өлгөрә.

Үсемлек тамырын сентябргә ҡаҙып алырға кәрәк. Һайбәтләп һалҡын һыу менән йыуып, күләгәлә киптерәләр. Дөрөҫ киптерелгән тамыр һары йәки һоро төҫтә булып, мурт ҡына һынып торорға тейеш.

Татлы тамырҙы, үрҙә әйтелгән сифаттарын иҫәпкә алып, айырым плантацияларҙа сәсеп үҫтереү маҡсатҡа ярашлы булыр ине. Һуңғы йылдарҙа татлы тамыр яңынан күпләп таралып үҫә башланы. Быға, әлбиттә, һарыҡ малы көтөүҙәренең ҡырҡа кәмеүе сәбәпсе булды.

## БӘҒӘНӘШ

**Был дарыу үләненә көтмәгәндә тап булдым. Йәй башланған мәл ине. Трамвайҙа осраған ғалим-шағир Вафа Әхмәҙиев (хәҙер мәрхүм инде): "Әйҙә, бәғәнәш үләнен күрһәтәм. Өфө урмандарында ла үҫә ул. Хәҙер сәскә атҡандыр инде", - тип мине ҡала Советы туҡталышына алып барҙы.**



Мәжит Ғафури исемендәге ял паркы миллиондан ашыу халҡы булған үҙ ҡаланың уртаһында урынлашһа ла, үҙенең тәбиғилеген һаҡлай әле. Йөҙйәшәр имәндәр, һылыу йүкәләр, күркәм сағандар менән бергә айыу балаһы, зелпе ҡыуаҡтары бында йырып үткеһеҙ булып үҫә.

Яҙ килеү менән, кәкүк емеше, тайтояҡ, яҙ күрке аҡ умырзая, дарыу үләндәренән сөйәл үләне, юл япраҡтарының бер нисә төрө, ҡырҡколас кеүек иртә сәскә атыусы үсемлектәр ҡалҡып сыға.

Сирек сәғәт самаһы ваҡыт үтеүгә, бәғәнәште үҙенә хас үсемлектәр берлегендә - ҡатнаш урманда, ҡарағай, акация һәм айыу баланы ҡыуаҡтары күләгәһендә осраттыҡ. Русса "воронец колосовидный" тип атала ул. Аҙаҡ шағир бәғәнәш үләненең Ишембай, Күгәрсен, Ғафури райондарында күпләп үҫеүе һәм урындағы халыҡҡа яҡшы таныш булыуы тураһында һөйләне. Уның икенсе исеме "Салауат тамыры" икәнен дә хәтергә төшөрҙө.

Бәғәнәш, әйтеп үтелгәнсә, шыршы, ҡарағай урмандарында үҫә. Ҡатнаш урмандарҙа ла осрай. Ул үҫкән тирәлә ваҡ ҡымыҙлыҡ, ҡырҡбыуын, ҡаҙаяҡ үләндәре үҫеүсән. Бәғәнәштең бейеклеге 30-40 сантиметр. Япраҡтары киң, овал (эллипс) формаһында, бер-береһенә ҡапма-ҡаршылаш урынлашҡан. Япраҡ һабы тирәһендә улар тарайып бәләкәйләнә. Яҙ көнө аҡ сәскә ата, емеше ҡара төҫтә. Ҡыҙыл емешлеләре лә бар. Улары "воронец красноплодный" тип атала.

Шуныһы иғтибарға лайыҡ: был үсемлектең орлоғо тупраҡта ике ҡыш ятҡас ҡына шытым бирә. Беренсе йыл үсенте тик бүлбеләргә оҡшаған һурыусы һәм һаҡлыҡ тамырҙарын ғына барлыҡҡа килтерә. Июль айҙарында орлоҡ өлөштәре кибеп һәләк була һәм үсенте ҡышҡылыҡҡа бүлбеләр рәүешендә китә. Икенсе яҙға үсемлек тәүге япраҡтар барлыҡҡа килтерә.

Бәғәнәш һуңғы йылдарҙа күп ғалимдарҙың, бигерәк тә фармацевтика өлкәһендә эшләүселәрҙең, иғтибарын йәлеп итә. Хәҙер был үләндән күп төрлө дарыу эшләү мөмкинлектәре асыҡланды. Әйтергә кәрәк, бәғәнәш, аҙ-аҙлап осрай. Шуға күрә уны тәләфләргә ярамай. Билдәле булыуынса, ул ағыулы үсемлектәр исемлегенә инә һәм уның менән эш иткәндә мотлаҡ һаҡлыҡ сараларын иҫәпкә алырға кәрәк.

**Был ҡыҙыҡлы.** Иң ҙур япраҡлы үсемлектәрҙең береһе - Амазонка викторияһы. Уның диаметры 2 метр, хатта унан да ашып китә. Уның ситтәре өҫкә ҡайтарып бөрөлгән, һыу өҫтөндә ҙур бер табаҡ кеүек йөҙөп йөрөй. Япраҡтарының ҙурлығы күҙәнәктәренең күплеге иҫәбенә түгел, ә ҙурлығы иҫәбенә икән. Был япраҡты һыуға батырыу өсөн ярайһы ғына көс кәрәк. Япраҡтың һыу өҫтөндәге был ныҡлығы япраҡ һеңерсәләренең үҙенсәлекле булып ишелеп урынлашыуында - улар япраҡ йөҙөнән 3-5 сантиметр өҫкә ҡалҡып тора. Был һеңерсәләр үҙенә күрә төҙөлештә ҡулланылған балкаларҙы хәтерләтә. Үткән быуатта ошо япраҡ һеңерсәләренең урынлашыуына оҡшатып эшләнгән Лондондағы вокзал һәм күргәҙмәләр залы һаман да үҙенең ныҡлығы менән белгестәрҙе һәм йәмәғәтселекте хайран итә.

**Сәфәрғәли ЙӘЙТҮРИН,**
**биология фәндәре докторы.**

*БЫЛ - ҠЫҘЫҠ!*

# ИҢ ЙӘШ УЙЛАП ТАБЫУСЫЛАР



**Балалар донъяны үҙҙәренсә аса һәм уға үҙҙәренең яңылыҡтарын индерә. Күп балалар өлкәндәргә ҡарағанда зирәклеге, уйлап эш итеүе менән ғәжәпкә ҡалдыра. Нимәнелер уйлап сығарыу һәләте, фекерҙәренең ҡалыплашып, ҡатып ҡалмауы бала кешене асыштарға алып килә, тормошобоҙҙо яҡшыртыуға, камиллаштырыуға хеҙмәт итә. Күптәр файҙалана уларҙың асышы менән, бала кеше уйлап тапҡан икән, тиғән уй хатта башҡа ла килмәй. Ҡайһы берҙәре менән таныштырыу бөгөн маҡсатыбыҙ. Бәлки, беҙҙең арала ла йәмғиәт үҫешен яҡшыртыуға өлөш индереүсе шундай балалар йәшәп яталыр?**

### Донъялағы иң йәш профессор

Буласаҡ профессор Алия Сабур 1989 йылда Америкала тыуған, сығышы буйынса ҡыҙҙың атаһы Мөхәммәд - Пакистандан.

Алия һигеҙ айлыҡ сағында һөйләшә башлай, ике йәшендә ҙур яҙмаларҙы уҡыуы менән аптырата. Ун йәшендә мәктәпте ташлап, университетҡа уҡырға инеп тә китә. Шул уҡ мәлдә ул музыка мәктәбенә йөрөргә ваҡыт таба, кларнетта оҫта уйнарға өйрәнә. Үҙен уҡыуға ғына арнамай, спорт менән дә шөғөлләнә һәм туғыҙ йәшендә тхэквондо буйынса ҡара билбауға эйә була. 14 йәшендә ул - бакалавр, 17 йәшендә магистр дәрәжәһенә эйә була, 18 йәшендә Көньяҡ Кореяның Конкук университетында халыҡ-ара тикшеренеүҙәр һәм бәйләнештәр профессоры булып китә. Ошо ҡаҙанышы өсөн уны Гиннестың рекордтар китабына индерәләр. Алияға тиклем оҙаҡ йылдар буйы Колин Маклаурин иң йәш профессор булып һанала. 1717 йылда ун туғыҙ йәшендә ул ошондай уҡ дәрәжәгә лайыҡ була. Уны Исаак Ньютондың шәкерте булған, тиҙәр. Гиннестар китабында хәҙер уны Алия Сабур икенсе урынға шылдырҙы. Иң йәш профессор Алия Көньяҡ Корея университетында бер йыл лекция уҡығандан һуң, контракты бөтөү менән, кире Америкаға әйләнеп ҡайта. Ул ғилми эш менән шөғөлләнә, диабет менән ауырыған кешеләрҙең шәкәрен ҡанын алмайынса ғына үлсәй торған ҡоролма эшләргә тырыша. Сөнки үҙенең ата-әсәһе ошо сир менән яфалана. Алия Сабур бөгөнгө көндә төрлө медицина тикшеренеүҙәре өҫтөндә эшләй.

### Йөҙ илдәге ваҡытты күрһәтә

Бер үк мәлдә йөҙ илдәге ваҡытты күрһәткән сәғәтте ун ике йәшлек Ҡытай ҡыҙы Ву Сяонь уйлап тапҡан.

Ер шарының сәғәт поястары тураһында ул беренсе тапҡыр география дәресендә ишетә. Был яңылыҡ менән шул тиклем ныҡ ҡыҙыҡһына һәм донъя картаһын өйрәнә башлай. Үҙен ураған мөхитте таныш белергә теләүе ҡыҙҙы асышҡа алып килә, Ву бер үк мәлдә йөҙ илдәге ваҡытты күрһәткән сәғәтте уйлап таба һәм уны патентлауға өлгәшә. Был сәғәтте күпләп етештерә башлайҙар, хәҙер ул ер шарында иң таралған сәғәттәрҙең береһе һанала. Ҡытай яңылыҡтар агентлығы хәбәр итеүенсә, илдең фән һәм техника эшмәкәрҙәре тарафынан бәләкәй ҡыҙҙың асышын өйрәнеү әле лә дауам итә.

**(Дауамы бар).**

*УҢЫШ ҠАҘАН*



# БӘХЕТКӘ УН АҘЫМ

### Бөгөнгөнө һәм иртәгәне яҡшы ит

Кисен йоҡларға ятҡас, беҙ ваҡыты-ваҡыты менән иртәгәһе көнөбөҙ нисек булырын күҙалларға тырышабыҙ. Бәлки, мөһим кәңәшмәлә ҡатнашып, унда яҡшы итеп сығыш яһарғалыр? Бәлки, осрашыуға барып, үҙем тураһында яҡшы тойғо ҡалдырыу мөһимдер? Шулай уҡ ниндәйҙер проектты ваҡытында тапшырыу йәки башҡа эшлекле маҡсаттарҙы тормошҡа ашырыуҙы планлаштырыуың да ихтимал. Тик... бөтә был пландар бер нисә сәғәт татлы йоҡонан баш тартыу өсөн сәбәп була аламы?

Әгәр һеҙ аңығыҙҙың башҡа һыймаҫлыҡ көсөн аңлаһағыҙ, былай эшләмәйәсәкһегеҙ. Бары тик күҙҙәрегеҙҙе йомоп, өс тапҡыр тәрән итеп тын алып, иртәгәһе көндөң хәл иткес ваҡиғаларын визуалләштерәсәкһегеҙ. Уйығыҙҙан ғына тап һеҙ теләгәнсә барасаҡ яҡшы күренештәрҙе күҙаллағыҙ. Әммә бындай күнекмәне ғәҙәттәге: "Мин ысынбарлыҡҡа ҡайтам", - тип түгел, ә: "Әйҙә, шулай булһын", - тип тамамларға кәрәк.

Был процедураны бер ауырлыҡһыҙ башҡарһағыҙ, бындай программалаштырыу менән көн һайын кисен файҙалана һәм үҙегеҙгә матур иртәгәһе көн тәьмин итә алаһығыҙ. Йоҡлар алдынан күҙҙәрегеҙҙе йомоғоҙ һәм өс тапҡыр тәрән итеп тын алығыҙ, һуңынан иртәгәһе көндәге ваҡиғалар тураһында "фильм" ҡарағыҙ. Уйығыҙҙағы картинаға иртәгә йоҡонан торғандан алып һәр сәғәт нимә эшләйәсәгегеҙҙе календарь формаһында индерегеҙ.

Беренсе күренеш: ғаиләгеҙ иртәнге ашҡа йыйыла. Һеҙҙең арала гармониялы мөнәсәбәт хакимлыҡ итә. Был - көндөң яҡшы башланғысы. Уйығыҙҙа ғына сәғәт телдәрен иртәнге һигеҙгә күсерегеҙ: ваҡытында эшегеҙгә барып етеү өсөн өйөгөҙҙән сығаһығыҙ. Ғаилә ағзаларығыҙҙың йөҙөндә "йылмайыу" күрергә онотмағыҙ - улар ҙа тәғәйен урындарына ваҡытында барып етә.

Хәҙер сәғәт телдәре туғыҙҙы күрһәтә. Һеҙ эш урынында. Барлыҡ хеҙмәткәрҙәрҙең дә энергияны ташып тора, улар эшләргә әҙер. Һеҙ беләһегеҙ: был көн бик емешле буласаҡ. Иртәнге ун: кәңәшмә (йәки һеҙ тәү сиратта башҡарған икенсе берәй эш) бик яҡшы үтә. Сәғәт ун бер: барыһы ла үҙ эше менән мәшғүл. Көн уртаһында яңы заказ биреүсе килә йәки һеҙ төшкө ашҡа китәһегеҙ (был көн тәртибенә тап иртәгә йәки башҡа ваҡытта булырға тейешле мөһим эштәрҙе ҡуйығыҙ).

Төшкө аш: аштар ҙа тәмле, фекер алышыу ҙа яҡшы бара. Сәғәт ике: һеҙ һәм коллегаларығыҙ яҡшы һөҙөмтәләргә ирешәһегеҙ. Сәғәт өскә был ҡаҙаныштар тағы ла яҡшыра. Дүрттә... Моғайын, иртәгәһе көнөгөҙ нисек булыры тураһындағы "фильм"ды үҙегеҙ ҙә күҙаллағанһығыҙҙыр инде.

Уйҙағы "кинофильм" иртәгәһе көнөгөҙҙөң нисек үтәсәге яҙылған ҡаралама булып тора, сөнки тап уйҙар киләсәккә нигеҙ һала. Хәҙер инде нисек итеп матур аҙна, уңышлы ай, һәйбәт йыл, иҫ киткес тормош программалауҙы ентекле аңлатып тороу кәрәкмәйҙер, тип уйлайым.

**Роберт СТОУН.**
**(Дауамы бар).**



### 29 АВГУСТА
### ПОНЕДЕЛЬНИК
### РОССИЯ 1

5.00, 8.41 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10 "Утро России".
9.00, 14.30, 21.05 Местное время. Вести-Башкортостан.
9.30 Доброе утро, республика! [12+]
11.00, 14.00, 17.00, 20.00 Вести.
11.30, 17.30 "60 минут". [12+]
14.55 Кто против? [12+]
21.20 Т/с "Елизавета". [16+]
22.20 Вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
1.00 Т/с "Годунов". [16+]
2.00, 2.55 Т/с "Морозова". [16+]
3.45 Т/с "Срочно в номер!" [16+]

### БСТ

**7.00 "Сәләм".**
**10.00 Т/с "Ышан". [12+]**
**11.00 Новости недели (на рус.яз).**
**11.45 Специальный репортаж. [12+]**
**12.00 Счастливый час. [12+]**
**13.00 Новости (на баш. яз).**
**13.30 Бәхетнамә. [12+]**
**14.30 "Бай". [12+]**
**15.00 Интервью. [12+]**
**15.15 Әлләсе... [12+]**
**16.00 Новости (на рус. яз).**
**16.15 "Гора новостей". [6+]**
**16.30 Т/с "Ышан". [12+]**
**17.30 Автограф. [12+]**
**18.00 Пофутболим? [12+]**
**18.15 Интервью. [12+]**
**18.30 Новости (на баш. яз).**
**19.00 Вечерний телецентр.**
**20.00 Полезные новости. [12+]**
**20.15 "Сәңгелдәк". [0+]**
**20.30 Интервью. [12+]**
**20.45 История одного села. [12+]**
**21.00 "Елкән". [6+]**
**21.30 Новости (на рус. яз).**
**22.00 Тайм-аут. [12+]**
**22.30 Новости (на баш. яз).**
**23.00 "Млечный путь". [12+]**
**0.00 Х/ф "Один и без оружия". [0+]**
**1.45 Бәхетнамә. [12+]**
**2.30 Спектакль "Жанна, завтра будет новый день". [12+]**
**4.45 Честно говоря. [12+]**
**5.30 Счастливый час. [12+]**
**6.30 Новости (на рус. яз).**

### 30 АВГУСТА
### ВТОРНИК
### РОССИЯ 1

5.00, 8.41 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10 "Утро России".
9.00, 14.30, 21.05 Местное время. Вести-Башкортостан.
9.30 Доброе утро, республика! [12+]
11.00, 14.00, 17.00, 20.00 Вести.
11.30, 17.30 "60 минут". [12+]
14.55 Кто против? [12+]
21.20 Т/с "Елизавета". [16+]
22.20 Вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
1.00 Т/с "Годунов". [16+]
2.00, 2.55 Т/с "Морозова". [16+]
3.45 Т/с "Срочно в номер!" [16+]

### БСТ

**7.00 "Сәләм".**
**10.00 Т/с "Ышан". [12+]**
**11.00 Новости (на рус. яз).**
**11.15 Республика LIVE #дома. [12+]**
**11.45 Дорожный патруль. [16+]**
**12.00 Счастливый час. [12+]**
**13.00 Новости (на баш. яз).**
**13.30 Бәхетнамә. [12+]**
**14.30 Хазина. [0+]**
**15.00 Интервью. [12+]**
**15.15 Алга укырга! [6+]**
**15.45 "Кош юлы. Балалар". [6+]**
**16.00 Новости (на рус. яз).**
**16.15 "Гора новостей". [6+]**
**16.30 Т/с "Ышан". [12+]**
**17.30 "Дорога к храму". [0+]**
**18.00 "Криминальный спектр". [16+]**
**18.15 Интервью. [12+]**
**18.30 Новости (на баш. яз).**
**19.00 Вечерний телецентр.**
**20.00 Полезные новости. [12+]**
**20.15 "Сәңгелдәк". [0+]**
**20.30 Интервью. [12+]**
**20.45 История одного села. [12+]**
**21.00 М/с "Нурбостан сәйәхәте". [6+]**
**21.30 Новости (на рус. яз).**
**22.00 "Это моя профессия". [12+]**
**22.30 Новости (на баш. яз).**
**23.00 Колесо времени. [12+]**
**0.00 Х/ф "Найти и обезвредить". [12+]**
**2.00 Бәхетнамә. [12+]**
**2.45 Спектакль "Счастье с неба". [12+]**
**4.45 История одного села. [12+]**
**5.00 "Бай". [12+]**
**5.30 Счастливый час. [12+]**
**6.30 Новости (на рус. яз).**

### 31 АВГУСТА
### СРЕДА
### РОССИЯ 1

5.00, 8.41 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10 "Утро России".
9.00, 14.30, 21.05 Местное время. Вести-Башкортостан.
9.30 Доброе утро, республика! [12+]
11.00, 14.00, 17.00, 20.00 Вести.
11.30, 17.30 "60 минут". [12+]
14.55 Кто против? [12+]
21.20 Т/с "Елизавета". [16+]
22.20 Вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
1.00 Т/с "Годунов". [16+]
2.00, 2.55 Т/с "Морозова". [16+]
3.45 Т/с "Срочно в номер!" [16+]

### БСТ

**7.00 "Сәләм".**
**10.00 Т/с "Ышан". [12+]**
**11.00 Новости (на рус. яз).**
**11.15 Республика LIVE #дома. [12+]**
**11.45 "Криминальный спектр". [16+]**
**12.00 Счастливый час. [12+]**
**13.00 Новости (на баш. яз).**
**13.30 Бәхетнамә. [12+]**
**14.30 Тормош. [12+]**
**15.00 Интервью. [12+]**
**15.15 "Тамыр" представляет... [0+]**
**15.45 "Сулпылар". [6+]**
**16.00 Новости (на рус. яз).**
**16.15 "Гора новостей". [6+]**
**16.30 Т/с "Ышан". [12+]**
**17.30 Тайм-аут. [12+]**
**18.00 Дорожный патруль. [16+]**
**18.15 Интервью. [12+]**
**18.30 Новости (на баш. яз).**
**19.00 Вечерний телецентр.**
**20.00 Полезные новости. [12+]**
**20.15 "Сәңгелдәк". [0+]**
**20.30 Интервью. [12+]**
**20.45 "Честно говоря". [12+]**
**21.30 Новости (на рус. яз).**
**22.00 Историческая среда. [12+]**
**22.30 Новости (на баш. яз).**
**23.00 Гала-концерт детского телевизионного конкурса "Байык-2022". [6+]**
**0.00 Х/ф "Миллион в брачной корзине". [12+]**
**2.15 Бәхетнамә. [12+]**
**3.00 Спектакль "Почему девушки плачут?". [12+]**
**4.30 Әлләсе... [12+]**
**5.15 История одного села. [12+]**
**5.30 Счастливый час. [12+]**
**6.30 Новости (на рус. яз). [0+]**

### 1 СЕНТЯБРЯ
### ЧЕТВЕРГ
### РОССИЯ 1

5.00, 8.41 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10 "Утро России".
9.00, 14.30, 21.05 Местное время. Вести-Башкортостан.
9.30 Доброе утро, республика! [12+]
11.00, 14.00, 17.00, 20.00 Вести.
11.30, 17.30 "60 минут". [12+]
14.55 Кто против? [12+]
21.20 Т/с "Елизавета". [16+]
22.20 Вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
1.00 Т/с "Годунов". [16+]
2.00, 2.55 Т/с "Морозова". [16+]
3.45 Т/с "Срочно в номер!" [16+]

### БСТ

**7.00 "Сәләм".**
**10.00 Т/с "Ышан". [12+]**
**11.00 Новости (на рус. яз).**
**11.15 "Честно говоря". [12+]**
**12.00 Счастливый час. [12+]**
**13.00 Новости (на баш. яз).**
**13.30 Бәхетнамә. [12+]**
**14.30 "Это моя профессия". [12+]**
**15.00 Интервью. [12+]**
**15.15 Здравствуй, школа! Детский концерт. [0+]**
**15.45 Лит-ра. [6+]**
**16.00 Новости (на рус. яз).**
**16.15 "Гора новостей". [6+]**
**16.30 Т/с "Ышан". [12+]**
**17.30 Моя планета Башкортостан. [12+]**
**18.00 "Криминальный спектр". [16+]**
**18.15 Интервью. [12+]**
**18.30 Новости (на баш. яз).**
**19.00 Вечерний телецентр.**
**20.00 Полезные новости. [12+]**
**20.15 "Сәңгелдәк". [0+]**
**20.30 Интервью. [12+]**
**20.45 История одного села. [12+]**
**21.00 Башкорттар. [6+]**
**21.30 Новости (на рус. яз).**
**22.00 Республика LIVE #дома. [12+]**
**22.30 Новости (на баш. яз).**
**23.00 Ап-асык. [12+]**
**23.45 История одного села. [12+]**
**0.00 Х/ф "Валькины паруса". [0+]**
**2.00 Бәхетнамә. [12+]**
**2.45 Спектакль "В ночь лунного затмения". [12+]**
**5.00 "Бай". [12+]**
**5.30 Счастливый час. [12+]**
**6.30 Новости (на рус. яз).**
**5.00 Утро России.**

### 2 СЕНТЯБРЯ
### ПЯТНИЦА
### РОССИЯ 1

5.00, 8.41 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10 "Утро России".
9.00, 14.30, 21.15 Местное время. Вести-Башкортостан.
9.30 Доброе утро, республика! [12+]
11.00, 14.00, 17.00, 20.00 Вести.
11.30, 17.30 "60 минут". [12+]
14.55 Кто против? [12+]
21.30 Ну-ка, все вместе! [12+]
23.40 Улыбка на ночь. [16+]
0.45 Х/ф "Блюз для сентября". [12+]
2.00 "44-й Московский Международный кинофестиваль. Торжественное закрытие".
3.30 Х/ф "Прошлым летом в Чулимске". [16+]

### БСТ

**7.00 "Сәләм".**
**10.00 Д/с "Тайны космоса". [12+]**
**11.00 Новости (на рус. яз).**
**11.15 "Йома". [0+]**
**11.45 "Криминальный спектр". [16+]**
**12.00 Республика LIVE #дома. [12+]**
**12.30 Үткән гүмер. [12+]**
**13.00 Новости (на баш. яз).**
**13.30 Автограф. [12+]**
**14.00 БашГост. [6+]**
**14.30 Моя планета Башкортостан. [12+]**
**15.00 Интервью. [12+]**
**15.15 "Алтын тирмә". [12+]**
**16.00 Новости (на рус. яз).**
**16.15 "Гора новостей". [6+]**
**16.30 Д/ф "У слияния трех рек". [12+]**
**17.15 История признания. [12+]**
**17.30 "Аль-Фатиха". [12+]**
**18.00 Дорожный патруль. [16+]**
**18.15 Интервью. [12+]**
**18.30 Новости (на баш. яз).**
**19.00 "Башкорт йыры". [12+]**
**19.45 Специальный репортаж. [12+]**
**20.00 Полезные новости. [12+]**
**20.15 "Сәңгелдәк". [0+]**
**20.30 Интервью. [12+]**
**20.45 История одного села. [12+]**
**21.00 "Йома". [0+]**
**21.30 Новости (на рус. яз).**
**22.00 90-летие башкирской нефти. [12+]**
**22.30 Новости (на баш. яз).**
**23.00 Автограф. [12+]**
**23.45 История одного села. [12+]**
**0.00 Х/ф "Вот такие чудеса". [0+]**
**1.45 Спектакль "Сваха". [12+]**
**3.45 Автограф. [12+]**
**4.15 Х/ф "Вот такие чудеса". [0+]**
**5.30 "Млечный путь". [12+]**
**6.30 Новости (на рус. яз).**

### 3 СЕНТЯБРЯ
### СУББОТА
### РОССИЯ 1

5.00 Утро России. Суббота.
8.00 Местное время. Вести-Башкортостан.
8.20 Местное время. Суббота.
8.35 По секрету всему свету.
9.00 Формула еды. [12+]
9.25 Пятеро на одного.
10.10 Сто к одному.
11.00, 17.00, 20.00 Вести.
11.55 Доктор Мясников. [12+]
13.00 Т/с "Вместо нее". [16+]
18.00 Привет, Андрей! [12+]
21.00 Х/ф "Три девицы". [12+]
0.50 Х/ф "Родное сердце". [12+]
4.00 Х/ф "Любви целительная сила".

### БСТ

**7.00 "Доброе утро!" Концерт. [12+]**
**8.00 Новости (на баш. яз).**
**8.15 "Аль-Фатиха". [0+]**
**8.45 "Орнамент". [6+]**
**9.00 "Это моя профессия". [12+]**
**9.30 М/ф "Мультфильмы". [0+]**
**10.00 "Елкән". [6+]**
**10.30 "Гора новостей". [6+]**
**10.45 "КультУра". [6+]**
**11.00 "МузКәрәҙ". [6+]**
**11.30 Нык бул. [6+]**
**12.00 Күстәнәс. [12+]**
**12.30 Бәхетнамә. [12+]**
**13.00 Үткән гүмер. [12+]**
**13.30 Башкорттар. [6+]**
**14.00 "Дарю песню". [12+]**
**16.00 Колесо времени. [12+]**
**17.00 Башкорт аты. Репортаж с первого республиканского фестиваля лошадей башкирской породы. [12+]**
**18.00 Новости (на баш. яз).**
**18.30 Хоккей. СКА (Санкт-Петербург) - "Салават Юлаев" (Уфа). КХЛ.**
**21.30 Новости (на рус. яз).**
**22.00 "100 имен Башкортостана". [12+]**
**22.30 Новости недели (на баш. яз).**
**23.15 Х/ф "Встретимся у фонтана". [0+]**
**0.45 Новости недели (на баш. яз).**
**1.30 Спектакль-балет "Журавлиная песнь". [12+]**
**3.00 Х/ф "Встретимся у фонтана". [0+]**
**4.15 Колесо времени. [12+]**
**5.15 Башкорттар. [6+]**
**5.45 "Млечный путь". [12+]**
**6.30 Новости (на рус. яз).**

### 4 СЕНТЯБРЯ
### ВОСКРЕСЕНЬЕ
### РОССИЯ 1

5.30, 3.10 Х/ф "Самое главное". [12+]
7.15 Устами младенца.
8.00 Местное время. Воскресенье.
8.35 Когда все дома с Тимуром Кизяковым.
9.25 Утренняя почта с Николаем Басковым.
10.10 Сто к одному.
11.00, 17.00 Вести.
11.55 Большие перемены.
13.00 Т/с "Вместо нее". [16+]
18.00 Песни от всей души. [12+]
20.00 Вести недели.
22.00 Москва. Кремль. Путин.
22.40 Воскресный вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
1.30 Х/ф "Личный интерес". [16+]

### БСТ

**7.00 "Доброе утро!" Концерт. [12+]**
**8.00 Новости (на баш. яз).**
**8.15 "Йома". [0+]**
**8.45 "Бай". [12+]**
**9.15 "Курай даны". [12+]**
**9.30 Тормош. [12+]**
**10.00 "Книга сказок". [0+]**
**10.15 "Городок АЮЯ". [6+]**
**10.30 "Гора новостей". [6+]**
**10.45 "Сулпылар". [0+]**
**11.00 М/с "Нурбостан". [0+]**
**11.15 М/с "Нурбостан сәйәхәте". [6+]**
**11.30 "Кош юлы. Балалар". [6+]**
**11.45 Вопрос + Ответ = Портрет. [6+]**
**12.30 Новости недели (на баш. яз). [12+]**
**13.15 "Алтын тирмә". [0+]**
**14.00 "Дарю песню". [12+]**
**15.30 "Дорога к храму". [0+]**
**16.00 Историческая среда. [12+]**
**16.30 Гала-концерт детского телевизионного конкурса "Байык-2022". [6+]**
**18.30 Спектакль-балет "Журавлиная песнь". [12+]**
**20.15 Әлләсе... [12+]**
**21.00 Республика LIVE #дома. [12+]**
**21.30 Новости недели (на рус.яз).**
**22.15 Специальный репортаж. [12+]**
**22.30 Республика LIVE #дома. [12+]**
**23.00 Х/ф "Любимая дочь папы Карло". [16+]**
**0.30 Спектакль "Касатка". [12+]**
**2.30 Моя планета Башкортостан. [12+]**
**3.00 Историческая среда. [12+]**
**3.30 Х/ф "Любимая дочь папы Карло". [16+]**
**5.00 "Млечный путь". [12+]**
**6.00 Итоги недели (на рус. яз). [0+]**
**6.45 Специальный репортаж. [12+]**

## НАМАҘ ВАҠЫТТАРЫ

*1444 һижри йыл.*

| Август - Сентябрь (Сафар) | Иртәнге намаҙ | Ҡояш ҡалка | Өйлә намаҙы | Икенде намаҙы | Аҡшам намаҙы | Йәстү намаҙы |
|---|---|---|---|---|---|---|
| 29 (2) дүшәмбе | 4:48 | 6:18 | 13:30 | 18:01 | 20:14 | 21:44 |
| 30 (3) шишәмбе | 4:50 | 6:20 | 13:30 | 18:00 | 20:11 | 21:41 |
| 31 (4) шаршамбы | 4:52 | 6:22 | 13:30 | 17:58 | 20:09 | 21:39 |
| 1 (5) кесе йома | 4:54 | 6:24 | 13:30 | 17:56 | 20:06 | 21:36 |
| 2 (6) йома | 4:56 | 6:26 | 13:30 | 17:54 | 20:04 | 21:34 |
| 3 (7) шәмбе | 4:57 | 6:27 | 13:30 | 17:52 | 20:01 | 21:31 |
| 4 (8) йәкшәмбе | 4:59 | 6:29 | 13:30 | 17:50 | 19:59 | 21:29 |

*"Башҡортса дини календарь"ҙан алынды.*

✔ *Күптән түгел үткәрелгән тикшеренеүҙәр корица һәм бал ҡатнашмаһын ашаған кешеләрҙең иғтибарлыраҡ, хәрәкәтсәнерәк булыуын, шулай уҡ хәлһеҙлекте бөтөрөүен асыҡлаған.*



*БАШ ЭШЛӘТМӘК*

# 1 СЕНТЯБРЬ - БЕЛЕМ КӨНӨ




**Йәмилә ШӘРӘФЕТДИНОВА төҙөнө.**

**33-сө һандағы сканворд яуаптары.**

**Горизонталь буйынса:** Взвод. Асҡаров. Таған. Йоҙаҡ. Урман. Ағайрыҡ. Мамыҡас. Атлет. Артель. Апорт. Йод. Мулла. Илгә. Ритм. Ризыҡ. Обой. Атыш. Әкрен. Таһиров. Йосопов.

**Вертикаль буйынса:** Михалков. Йомағолов. Ҡаптырма. Аҡса. Тартай. Ҡасаҡ. Ваҡыт. Йомош. Трико. Ғәйнетдинов. Бруно. Диван. Уҡа. Мәрйә. Табу. Енел. Нут. Арҡан.

## ҠОТЛАЙБЫҘ!

Август айында тыуған көндәрен билдәләүсе - **Хәйбулла районы** Аҡъяр ауылынан Раян Атнабаев, **Салауат районы** Лағыр ауылынан Земфира Йәнтүрина, **Мәсетле арйоны** Дыуан-Мәсетле ауылынан Ғәлимә Әхмәтйәрова, **Йылайыр районы** Юлдыбай ауылынан Шәмсинур Нәҙерғолова, **Өфө районы** Шамонино ауылынан Ләйсән Абдрафиҡова, Вадим Зөлҡәрнәев, Мәсғүт Кәримов, **Өфө ҡалаһынан** Рөстәм Ғатауллин, **Стәрлетамаҡ ҡалаһынан** Гөлшат Сөләймәнова, **Күмертау ҡалаһынан** Рәйсә Искәндәрова һәм башҡа уҡыусыларыбыҙҙы ихлас күңелдән ҡотлайбыҙ! Йәй миҙгеленең иң йомарт айында тыуғандарҙың тормошонда ла барыһы ла мул булһын: ҡоростай ныҡлы һаулыҡ, бәхет-ҡыуаныстарға мөлдөрәмә тулы оҙон ғүмер теләйбеҙ, рухи һәм матди байлыҡтар берҙәй килһен, һәр эшегеҙ уңыш менән осланһын, тик изге күңелле һәм игелекле кешеләр менән бәхет һәм мөхәббәт сорналышында йәшәгеҙ!

**Иң изге теләктәр менән, "Киске Өфө"ләр.**

*МОСОЛМАН ӘҘӘБЕ*

## ИМАНҒА ӨНДӘҮ

Дин өйрәтә: әгәр ҙә кеше йәшәгән йылдарында иманға өндәүҙәрҙе ишетергә теләмәй, уны инҡар итһә, ул, ти, иманһыҙ булып иҫәпләнә. Иман тигәндә беҙҙең ата-бабаларыбыҙ Аллаһы Тәғәлә тарафынан бәйғәмбәребеҙ Мөхәммәт ғәләйһис-сәләм аша беҙгә тапшырылған төп шарттарҙы үтәү менән бергә, иң элек, әҙәм балаһында булырға тейешле әҙәпте күҙ уңында тотҡан. Бер ниндәй сәбәп булмай тороп, дингә өндәүҙәрҙе аңламай ҡалыуҙы ҡабул итмәгән.

"Ҡиәмәт көнөндә дүрт кеше генә иманға килмәй ҡалыуына аҡланыу таба ала, - тигән Бәйғәмбәр, - бер нәмә ишетмәгән һаңғырау, аҡылдан яҙған кеше, бөлтерәп бөткән ҡарт, ике бәйғәмбәр араһындағы хаҡ дингә урын ҡалмаған дәүерҙә үлеп ҡалған кеше". Һаңғырау әйтер: "Эй, Раббым! Ислам дине барлыҡҡа килеүе тураһында мин бер нәмә лә ишетмәнем". Аҡылдан яҙған әҙәм: "Эй, Раббым! Ул ваҡытта мин үҙемә дөйә тиҙәге атып йөрөгәндәрҙән башҡаны күрмәнем", - тип аҡланыр. Бөлтерәп бөткән ҡарт: "Эй, Раббым! Ислам дине килгәндә мин инде бер нәмә лә аңламаҫ хәлдә инем", - тиер. Бәйғәмбәрҙәр килмәй торған арала үлеп ҡалған: "Илселәрҙән бер кем дә килмәне", - тиер.

*Ә ҺЕҘ БЕЛӘҺЕГЕҘМЕ?*



# ИКМӘККӘ ҺЫЛАП...

**Көн һайын иртән бал һәм корицанан эшләнгән пастаны икмәккә һылап ашағыҙ. Ул холестеринды кәметә, инфаркттан һаҡлай. Тын алыуҙы яҡшырта, йөрәк мускулын нығыта, шулай уҡ ҡартайыуҙы иҫкәртә.**

● Күптән түгел үткәрелгән тикшеренеүҙәр корица һәм бал ҡатнашмаһын ашаған кешеләрҙең иғтибарлыраҡ, хәрәкәтсәнерәк булыуын, шулай уҡ хәлһеҙлекте бөтөрөүен асыҡлаған.

● Көн һайын иртәле-кисле 2 ҡалаҡ балға 1 балғалаҡ корица һалынған ҡатнашманы 1 сынаяҡ йылы һыуға һалып эсһәгеҙ, артриттан ҡотолорһоғоҙ.

● 2 ҡалаҡ бал һәм 3 балғалаҡ корицаны 2 стакан йылы һыуға һалып ҡабул итһәгеҙ, 2 сәғәт дауамында ҡандағы холестерин 10 процентҡа кәмейәсәк. Көн һайын балдың үҙен генә ашағандарҙың да холестерины нормалләшә.

● Бал һәм корица ҡатнашмаһы иммунитетты нығыта, бактерия һәм вирустарҙан һаҡлай. Бәүел ҡыуығындағы микробтарҙы ла юҡ итә. Экзема, бәшмәк кеүек башҡа тире ауырыуҙарын да дауалай. Бының өсөн ҡатнашманы сирле тирегә һөртөргә кәрәк. Һыткыны ла бөтөрә. Бөжәк тешләгән урынға һөртөү ҙә килешә.

● Сәсегеҙ ҡойолһа, 1 ҡалаҡ бал, 1 балғалаҡ корица һәм зәйтүн майынан ҡатнашманы баш тиреһенә һөртөгөҙ. 15 минуттан йыуығыҙ.

● 2 ҡалаҡ балға ҡушылған корица ашҡаҙан эшмәкәрлеген яҡшырта, унын әселеген кәметә һәм иң ауыр һаналған аҙыҡты эшкәртергә, хатта сей яраны дауаларға, шулай уҡ эстәге газдан ҡотолорға ярҙам итә.

● 1 балғалаҡ корица һәм 5 балғалаҡ бал ҡатнашмаһын ауыртҡан тешкә һалһаң, һыҙлауы кәмей. Бал һәм корица һалынған йылы һыу менән сайҡатһаң, ауыҙҙан еҫ килмәй.

● Бер тигеҙ нисбәттәге бал һәм корица ҡатнашмаһы һаңғыраулыҡты ла дауалай. Шулай уҡ һыуыҡ тейгәндә, киҙеү ваҡытында, тымау тейгәндә, йүткергәндә файҙаһы ҙур.

● 1 ҡалаҡ балға 1 балғалаҡ корица ҡушылған ҡатнашманы ай дауамында көнөнә 3 тапҡыр ашап, яман шеште дауаларға мөмкин. 3 стакан һыуға 1 балғалаҡ корица, 4 ҡалаҡ бал һалынған сәйҙе даими эскән осраҡта тире оҙағыраҡ йәш һаҡлана.

*ИҒЛАН*

# ҒӘЛИӘ ИСЛАМ КОЛЛЕДЖЫ

**Мосолман дини ойошмаһы - Башҡортостан Республикаһы Мосолмандары диниә назаратының "Ғәлиә ислам колледжы" дини һөнәри белем биреү ойошмаһы 2022-2023 уҡыу йылына көндөҙгө-ситтән тороп уҡыу (киске) һәм ситтән тороп уҡыу (ҡатын-ҡыҙҙар өсөн) бүлектәренә студенттар ҡабул итә.**

Ике бүлектә лә 3 йыл 10 ай уҡытыла. Уҡырға 9-сы һәм 11-се кластарҙан һуң (урта һөнәри һәм юғары белеме булғандарҙы ла) алалар. Колледжды тамамлағандан һуң урта һөнәри дини белем тураһында диплом тапшырыла. Ҡабул итеү комиссияһына белем алыу тураһында документ (аттестат, диплом - төп нөсхәһе/күсермәһе), 3х4 үлсәмендәге 3 фото, паспорт күсермәһе (беренсе һәм теркәлеү бите), абитуриенттан ғариза талап ителә. **Беҙҙең адрес:** Өфө ҡалаһы, М. Кәрим урамы, 3, ҡабул итеү комиссияһы (эш ваҡыты сәғәт иртәнге 10-дан, киске 6-ға тиклем, шәмбе һәм йәкшәмбе ял көндәре). **Белешмәләр өсөн телефон:** 8-917-911-54-10. Эл. адрес: islamcollege_ufa@mail.ru

МӘҘӘНИӘТЕБЕҘ

# СОВЕТ МАЙҘАНЫНА ЙӘН ИНӘ



**11 октябрҙә Өфөнөң барлыҡ төп майҙансыҡтарында Республика көнөнә арналған саралар ойошторола. Башҡортостан Башлығы Хакимиәте етәксеһе Максим Забелин республиканың ойоштороу комитеты ултырышында Совет майҙанын төҙөкләндереү буйынса ҙур эш башҡарылғанын билдәләне.**

11 октябрҙә төп ваҡиға - генерал-майор, легендар 112-се Башҡорт кавалерия дивизияһы командиры, Рәсәй Геройы Миңлеғәли Шайморатовҡа һәйкәл асыу.

Мәҙәниәт министры Әминә Шафиҡова һүҙҙәренсә, Республика көнөндә Совет майҙанында "Геройҙар ваҡыты" беренсе Бөтә Рәсәй патриотик йырҙар фестиваленең финалы, шунда уҡ Башҡортостан сәнғәт оҫталарының "Үлемһеҙ дан өсөн тыуғандар" концерты була. Тамашасылар "Салауат тоҡомдары сигенмәй" спектакленән өҙөктәр һәм күләмле мэппинг-шоу ҡарай ала. Башҡортостан халҡы Республика көнөнә арналған төп тантаналарҙы ҡарай алһын өсөн БСТ каналынан тура трансляция ла ойошторола.

Республика көнөндә Өфөнөң Совет майҙанында Миңлеғәли Шайморатов һәйкәлен асыу тантанаһында 20 мәктәптән 500 уҡыусы "шайморатовсылар" сафына алына. Ә 1 сентябрҙән Башҡортостанда 78 "шайморатов" класында 1600 бала уҡый башлай, тине мәғариф министры урынбаҫары Элфиә Ғәлиева. 13 сентябрҙә уларҙың командалары "Патриот" хәрби-патриотик паркында ойошторолған "Геройҙар ярышы"нда ихтыяр көсөн һынай, ярышта еңеүсегә Шайморатов исемендәге күсмә кубок тапшырыла.

Башҡортостан Хөкүмәте вице-премьеры - ауыл хужалығы министры Илшат Фәзрахманов билдәләүенсә, байрам көндәрендә ауыл хужалығы йәрминкәләре ойошторола. Башҡортостан Башлығы Хакимиәте етәксеһе Максим Забелин байрам саралары ваҡытында хәүефһеҙлекте тәьмин итеүгә һәм йәмәғәт тәртибен һаҡлауға айырым иғтибар бүлде. Уның һүҙҙәренсә, коронавирус инфекцияһын йоҡтороусыларҙың артыуына бәйле килеп тыуған хәлдән сығып, ковидҡа ҡаршы саралар хаҡында ла оноторға ярамай.

# "ШАҒИР КӨНДӘЛЕГЕ"НӘН...



**Башҡортостандың халыҡ шағиры Рәми Ғариповтың тормошона һәм ижадына арналған "Шағир көндәлеге" нәфис фильмын монтажлау тамамланды.**

Фильм башҡорт режиссеры Булат Йосопов етәкселегендә төшөрөлә. "Әлеге ваҡытта бөтә тауыштар ҙа тиерлек яҙҙырылған, бер артист та һынатманы, кинокартина персонаждарының тауышы шәп", - тип белдерҙе проекттың ижади төркөмө.

Июлдә Өфө сәнғәт училищеһының концерт залында Башҡортостан Республикаһының Милли симфоник оркестры башҡарыуында фильмға музыка яҙҙырылды. Музыка авторҙары - композиторҙар Илшат Яхин һәм Шәүрә Сәғитова. Кадр артында рус теленә тәржемәләү ҙә тамамланып килә. "Һоҡланғыс тауышлы, рус телмәре структураһын нескә аңлаған Александр Бызов - беҙҙең проект өсөн табыш. Тәржемә шәп, совет кинематографының иң яҡшы традицияларын ы күсек", - тип билдәләне фильмдың тауыш режиссеры Юлай Тауылбаев.

Хәтерегеҙгә төшөрәбеҙ, "Шағир көндәлеге" - республика тарихында тәүге халыҡ фильмы. Башҡортостан Башлыҡы, республиканың Мәҙәниәт министрлығы, Әмир Абдразаҡов исемендәге "Башҡортостан" киностудияһы, Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы кинотаҫма төшөрөүҙә хупланы. Әлеге проект хаҡында 2019 йылдың авгусында билдәле булды. Ул саҡта халыҡ ярҙамы менән 1 миллион һумдан ашыу аҡса йыйылды, шунан һуң ижади төркөм фильм төшөрә башланы. Дәүләт яғынан фильмға 16 миллион һумлыҡ ярҙам күрһәтелде. Кинотаҫма башлыса Өфөлә, Шишмә районында, Һамарҙа төшөрөлдө.

# ҠЫҘЫЛ ПАШАҒА АРНАП...




**М.Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театры 103-сө миҙгелдә Нәжиб Асанбаевтың "Ҡыҙыл паша" пьесаһы буйынса спектаклде сәхнәгә сығарырға йыйына. Спектакль күренекле совет дипломаты, Совет Рәсәйенең ғәрәп илдәрендәге беренсе тулы хоҡуҡлы вәкиле Кәрим Хәкимовҡа арналған.**

Хәбәр ителеүенсә, Башҡортостан Башлығы Бишбүләк районына сәфәре барышында Мәҙәниәт министрлығына Дүсән ауылында Кәрим Хәкимовтың йорт-музейын яңыртыу буйынса тәҡдимдәр әҙерләргә, шулай уҡ Мәжит Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театрында "Ҡыҙыл паша" спектаклен яңынан сәхнәләштерергә ҡушты. Бынан алда театр репертуарында 1982 йылда ҡуйылған "Ҡыҙыл паша" спектакле бар ине. Пьесаның авторы Нәжиб Асанбаев, спектаклдең режиссеры Лек Вәлиев һәм төп ролде башҡарған Әхтәм Абушахманов шуның өсөн Салауат Юлаев исемендәге республика премияһына лайыҡ булды. Спектакль ғәрәп илдәре театрҙарының халыҡ-ара театр фестивалендә (Дамаск, 1986), ә телевизион версияһы Совет Үҙәк телевидениеһы аша күрһәтелде.

Мәҙәниәт министрлығының матбуғат хеҙмәте хәбәр итеүенсә, яңы спектакль өҫтөндә Башҡорт дәүләт академия драма театрының баш режиссеры Айрат Абушахманов эшләй. "Совет дипломатының тыуған төйәген өйрәнеү һәм яҡташтары менән аралашыу өсөн рәссам Альберт Нестеров менән Кәрим Хәкимовтың тыуған яғына - Бишбүләк районы Дүсән ауылына барып ҡайттыҡ, - тип һөйләне ул. - Әле яңы инсценировка өҫтөндә эш бара, уны йәш башҡорт драматургы Әнгизә Ишбулдина яҙа. 1987 йылда ижад ителгән пьесаға өҫтәмәләр индерергә кәрәк, сөнки ошо ваҡыт эсендә яңы фактар асыҡланды". Премьера ноябрҙә көтөлә.

# ЮЛТЫЙ ЯҘҒАН ТАРИХ



**Арыҫлан Мөбәрәков исемендәге Сибай дәүләт башҡорт драма театры 91-се ижад миҙгелен Дауыт Юлтыйҙың "Әлимә, йәки Мырҙаш ҡарт туйы" повесы буйынса спектаклдең премьераһы менән тамамланы. Инсценировка авторы - Ш.Бабич исемендәге республика йәштәр премияһы лауреаты Зөһрә Бураҡаева.**

- Бәхетле булыу - һәр кешенең теләге. Тик һәр кем дә үҙ бәхете өсөн көрәшергә, бар ҡаршылыҡтарҙы үтергә әҙерме? XX быуат башында башҡорт ауылында йәшәгән йәш ҡыҙ Әлиминең үҙ-үҙе булып ҡалыуы һәм бәхетенә ирешеү ынтылышы беҙгә ысын кеше өлгөһөн күрһәтә. Башҡорт әҙәбиәте классигы Дауыт Юлтый яҙған был тарих һәр кемебеҙҙең күңеленә лә үтеп инер, фәһемле лә булыр, - тип һөйләне театрҙың әҙәбиәт бүлеге мөдире Гөлсәсәк Теләүсина.

Әҫәрҙең режиссеры - Мостай Кәрим исемендәге Милли йәштәр театры башҡорт труппаһының баш режиссеры, Башҡортостандың атҡаҙанған сәнғәт эшмәкәре Рөстәм Хәкимов. Ҡуйыусы рәссам - Рәсәйҙең һәм Ҡалмыҡ Республикаһының атҡаҙанған сәнғәт эшмәкәре Валерий Яшкулов. Композитор - Башҡортостандың атҡаҙанған сәнғәт эшмәкәре, Ш.Бабич исемендәге республика йәштәр премияһы лауреаты Юлай Үҙәнбаев. Хореограф - Башҡортостандың атҡаҙанған артисы Сулпан Аҫҡарова.

"Был минең Сибай театрындағы тәүге эшем. Яңы коллектив менән эшләүе ҡыҙыҡ. Ләкин был эштә минең өсөн иң мөһиме - тарих. Дауыт Юлтый ошо ваҡиғаларҙың шаһиты булған. 1938 йылда ғүмере фажиғәле өҙөлгән яҙыусының әҫәре бер быуат самаһы үткәс сәхнәләштерелеүе бик ҡыуаныслы, - тип билдәләне Зөһрә Бураҡаева. - Ҡәнзәфәр менән Әлиминең дуэты күптәргә оҡшар, моғайын, йыр бик матур, күңелгә ятышлы. Композитор Юлай Үҙәнбаев менән берлектә ижад иткән тәүге йырыбыҙ".

Спектакль рус теленә синхрон тәржемә ителә. Сәхнә әҫәре "Берҙәм Рәсәй" партияһының "Бәләкәй ҡалалар театрҙары" проекты буйынса тормошҡа ашырыла. Билетты Пушкин картаһы менән дә һатып алырға мөмкин буласаҡ.

## АҠЫЛ-ҠАҘНА



**Аҡыллы кешеләрҙең һүҙҙәренә эйәреп, донъяуи хәҡиҡәткә баҡ, һығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.**

# "ТИК"ТЕҢ АТАҺЫ...

## тегәнәккә батҡан

Үлгәндең бары ла ҡала, ҡалғандың йөрәге яна.

**(Башҡорт халыҡ мәҡәле).**

Донъяны яҡшыртыуҙың берҙән-бер ысулы - үҙеңде яҡшыртыу.

**(Элизабет Кюблер-Росс).**

Ҡатын-ҡыҙ яҡшы сифаттарға түгел, насарҙарына көнләшә.

**(Самюэл Джонсон).**

Тормошта бер дуҫың булыу - ул күп, ике дуҫың булыу - артыҡ күп, өс дуҫың булыу... мөмкин булмаған хәл.

**(Генри Адамс).**

Һуғыш мөхәббәткә оҡшаш - ул һәр саҡ юлын таба.

**(Бертольд Брехт).**

Бөйөк кешеләр һәйкәлгә нигеҙҙе үҙҙәре төҙөй, ә һәйкәлде иһә киләсәк ҡуя.

**(Виктор Гюго).**

Алдаҡ дөрөҫлөк һымаҡ уҡ бер йөҙлө булһа, беҙҙең хәлебеҙ еңелерәк булыр ине.

**(Мишель де Монтень).**

Һәр саҡ дөрөҫ эшлә - был ҡайһы берәүҙәргә ҡәнәғәтләнеү килтерер, ҡалғандарҙы аптыратыр.

**(Марк Твен).**

Беҙҙең менән көрәшкәндәргә рәхмәт: улар беҙҙең нервыларҙы нығыта, беҙҙең һәләтлекте һәм ҡылыҡтарҙы шымарта.

**(Эдмунд Берк).**

**Шулай итеп, тағы бер аҡыл: "Борон заманда һаранлыҡтары, көнсөллөктәре хаттин ашҡан ике күрше йәшәгән. Көндәрҙән бер көндө уларҙың береһе ҡармағына алтын балыҡ эләктергән. Балыҡ телгә килгән һәм: "Мине киренән һыуға ебәрһәң, һинең өс шартыңды үтәйем", - тигән. Балыҡты эләктереүсе үҙенең көнитмеше яҡшырып китәсәген, күршеһенең танауын сиртәсәген уйлап, сикһеҙ шатланған. Әммә балыҡ үҙенең тағы ла бер шарты булыуын әйтеп, уны оло хафаға һалған: "Һинең бер теләгеңде үтәһәм, күршеңдең ике теләген үтәргә мәжбүр буласаҡмын - шул саҡта ғына беҙҙең килешеү бойомға ашасаҡ",- тигән балыҡ. Был һүҙҙәр көнсөл кеше күңелендәге шатлыҡты юҡҡа сығарған. Ни эшләргә? Бер тоҡ алтын һораһам, күршегә ике тоҡ алтын тейәсәк. Бер алтын һарай һораһам, күршенең ике алтын һарайы буласаҡ. Әмәлен таба көнсөл, балыҡҡа өс шартын әйтә: "Минең бер күҙем һытылһын, бер аяғым сатанлаһын, бер улым үлһен..."**

"Киске Өфө" гәзитен ойоштороусы:
**Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте**
Гәзит Киң коммуникация, элемтә һәм мәҙәни мираҫты һаҡлау өлкәһен күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттең Башҡортостан Республикаһы идаралығында теркәлде.
Теркәү таныҡлығы
№ТУ 02-00001, 10 июнь 2008 йыл.

1 582218 911006 22034

**Баш мөхәррир:**
**Гөлфиә Гәрәй ҡыҙы ЯНБАЕВА.**
**Мөхәрририәт:**
Сәриә ҒАРИПОВА,
Әхмәр ҒҮМӘР-ҮТӘБАЙ,
Зәйтүнә ӘЙЛЕ,
Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА,
Артур БАТЫРШИН.

Редакция һәм нәшер итеүсе адресы:
**450005, Башҡортостан Республикаһы, Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 167/1**
Беҙҙең сайт: **www.kiskeufa.ru**
E-mail: **kiskeufa@mail.ru**

ООО "СПУТНИК-ЮГ"
нәшриәтендә баҫылды
(453400, Башҡортостан Республикаһы, Дәүләкән ҡалаһы, Мәжит Ғафури урамы, 4, офис 203).

**Телефондар:**
**Баш мөхәррир** 253-25-44
**Хәбәрселәр** 252-39-99
**Матбуғат таратыу** 252-39-99

**Ҡул ҡуйыу ваҡыты -**
26 август 17 сәғәт 30 мин.
Ҡул ҡуйылды - 16 сәғәт 00 мин.

«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте **253-25-44** телефоны буйынса «Киске Өфө» гәзитенә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә.

«Киске Өфө»нөң индексы –
**ПР905**

Тиражы - 3007
Заказ - 1070